ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 май (һабанай) 2016

№ 19 (697)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҙ көндәрендә лә...**

Һаҡмар элеккеләй ташмай



3

**Яу яланы мөғжизәләре**



6

**Һалым арҡаһында дәүләт тере...**

Шулаймы, Мәжит Ғафури?



8-9

**Атайымдың исемен...**

хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегенән алдырҙым



12

**ТВ-программа** 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө"гә 12 майҙан иғлан ителәсәк ташламалы яҙылыу көндәрен күҙҙән ысҡындырмағыҙ. 22 майға тиклем дауам итәсәк ун көнлөктә гәзитебеҙгә 494 һум 70 тингә, һуғыш ветерандары һәм инвалидтары 437 һум 76 тингә (индекс ВО665), предприятиелар һәм ойошмалар 524 һум 70 тингә (индекс ВО673) яҙыла аласаҡ.***

***(Дауамын 2-се биттә уҡығыҙ).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ата-бабаларҙан килгән илһөйәрлек традицияһына - Тыуған илде һаҡлау бурысына йәштәребеҙҙең мөнәсәбәте нındәй?

***Илһам ХИСМӘТУЛЛИН, БДУ студенты, 22 йәш:*** Башҡорттарҙың борон-борондан ирек һөйөүсән, яугир халыҡ булыуын яҡшы беләм. Бындай сифаттар уның гендарында үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәгәндер, ә йәшәү шарттарына бәйлелер, тип уйлайым, сөнки ата-бабаларыбыҙ быуаттар буйына көн иткән аҫаба ерҙәрен баҫҡынсыларҙан яҡлап, яуға күтәрелергә мәжбүр булған. Башҡортостаныбыҙҙың аҫты ла, өҫтө лә хазина булған иркен ерҙәре күптәргә тынғылыҡ бирмәгән шул. Башҡорт үҙе бер кемдең еренә лә баҫып инмәгән, бер кемгә лә ҡаршы һуғыш асмаған, тик йәндәй күргән үҙ илен һаҡлаған. Үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылғас, башҡорттар үҙ илен генә түгел, оло ватан именлеген һаҡлауҙан да баш тартмаған. Киреһенсә, изге яуҙарҙа ҙур ҡаһарманлыҡтар күрһәтеп, Рәсәй наградаларына лайыҡ булған. Мәҫәлән, 1812 йылғы Ватан һуғышында Наполеонға ҡаршы 28 атлы полк менән ҡатнашып, француздарҙың ҡотон алған һәм Парижғаса барып еткән башҡа легендар халыҡты мин белмәйем. Бөйөк Ватан һуғышында 80 проценты башҡорттарҙан торған 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһынан ғына ла 78 яугирға Советтар Союзы Геройы тигән юғары исем юҡҡа бирелмәгәндер.

Был тарихи мәғлүмәттәр мине бик ныҡ тулҡынландыра, халҡым өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уята. Ҡайһы бер тиңдәштәремдең ошо хаҡта йүнләп белмәүе асыуымды килтерә. Йәштәрҙә илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү өсөн ил тарихы менән бер төптән ғаилә шәжәрәләрен дә киң файҙаланырға кәрәк, юғиһә, күптәребеҙ ҡартатайҙарының кем булғанын да белмәй, шул иҫәптән мин үҙем дә. Бөйөк Ватан һуғышында оло ҡартатайым - атайымдың атаһының атаһы Алыҫ Көнсығышта япондарға ҡаршы һуғышҡаны ғына мәғлүм миңә. Үкенескә, атайым да, ҡартатайым да был хаҡта миңә һөйләгәне булманы. Әле бына "Үлемһеҙ полк" маршы башланғас, беҙ Үҙәк архивҡа оло ҡартатай хаҡында материалдар ебәреүҙәрен һорап, хат яҙҙыҡ. Ил һаҡлауға үҙемдең мөнәсәбәтем ыңғай. Тик университетты тамамлағансы борсомай торһондар ине, тигән теләктәмен. Армияға барырға бер ҡасан да һуң түгел, минеңсә, тик уның ысын ир-егеттәр мәктәбенә әйләнеүен теләйем. Урыны менән һаман да унда тәртип урынлаштырып бөтә алмайҙар, ахыры. Бар теләгем - элиталы берәй частка эләгеү.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЯҠШЫ ХӘБӘР!

## КРЕМЛДӘ... ҡаҙылыҡ

Рәсәй Президенты Хакимәтенең "Кремль" туҡланыу комбинатында Башҡортостандан килтерелгән аҙыҡ-түлек кәштәһе барлыҡҡа килде. Федераль власть органдары хеҙмәткәрҙәре хәҙер ҡаҡланған ҡаҙ, ҡаҙылыҡ, бал һәм "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" билдәһе ҡуйылған башҡа ризыҡтар һатып алыу мөмкинлегенә эйә. Шулай итеп, республика проекты ил кимәлендә танылды, тип билдәләнеләр Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитетында. "Кремль" комбинаты конкурс нигеҙендә Башҡортостандан ете тәьминәтсене һайлап алды, ошо көндәрҙә продукцияның икенсе партияһы Мәскәүгә юлланды, тип һөйләне "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" проекты етәксеһе Александр Ковтуненко.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## ВАСЫЯТ ҠАЛДЫРҒАН

***Һуғыш тураһында бик күп яҙҙыҡ,***
***Күбебеҙҙең хатта шағирлыҡ***
***Шул йылдарҙа алды башланғысын...***
***Ғәйепме ни: беҙ бит атайҙарҙы,***
***Ағайҙарҙы көттөк - һағындыҡ.***

***Әсәйҙәрҙең итәгенә йәбешеп,***
***Бергә иланыҡ, бергә табындыҡ...***
***Йөрәктәргә түҙмәй ҡәләм алдыҡ,***
***Булған инек хәреф танырлыҡ,***
***Шулай килде беҙгә шағирлыҡ.***

***Һуғыш тураһында бик күп яҙҙыҡ,***
***Яҙа-яҙа әллә арыныҡ -***
***Туҡтап ҡалдыҡ... Һүҙҙәр ҡалманымы***
***Нәфрәт итеп аҡҡа яҙырлыҡ?***
***Тыуманымы яңы ҡәләмдәштәр***
***Был алышҡа тиң һүҙ табырлыҡ?***
***Донъябыҙҙы биләп алдымы ни***
***Таң ҡалдырған башҡа батырлыҡ?***

***Һуғыш тураһында бик күп яҙҙыҡ...***
***Яңылышам - бик аҙ яҙылған:***
***Һәр аҙымы тыуған еребеҙҙең***
***Мең ҡорбандар биреп алынған,***
***Һәр усламы изге был тупраҡтың***
***Һуғарылған һалдат ҡанынан...***
***Яу ҡырында ятып ҡалған яугир***
***Һәр быуынға васыят ҡалдырған:***
***Һуғыш уты ҡабат ҡабынасаҡ,***
***Беҙ туҡтатһаҡ уны яҙыуҙан...***
***Һуғыш тураһында бик аҙ яҙҙыҡ...***

**Риф МИФТАХОВ.**



✓ *4-се синыфта уҡығанда минең тимерлектә яңылыш ҡына бер бармағым өҙөлдө. Шунда әсәйемдең: "Улымды армияға алмаҫтар инде", - тип ултырып илағаны хәтеремдә. Әммә был миңә армияға барырға бер нисек тә ҡамасау итмәне.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ӘЛЕ ЛӘ БАР БАТЫРҘАР

***Харис СӘҒИТОВ, Бөтә Рәсәй Байконур космодромы ветерандары йәмғиәтенең Өфө филиалы рәйесе урынбаҫары:*** Иң мөһиме, балаларҙы илһөйәр итеп тәрбиәләү бурысы тураһында онотмайыҡ. Тыуған илде яратыу - ул уны күккә күтәреп маҡтау ғына түгел, ә ғәзиз ереӊ, туған халҡыңдың өсөн файҙалы эш башҡарыу, хатта кәрәк сакта уны яҡлап, йәнеңде фиҙа ҡылырға әҙер булыу. Тәү сиратта, ир-егеттәргә улар Ватандың төп яҡлаусылары икәнен аңлатып үстереү мөһим. Сөнки илде тотҡан да ир кеше, ғаиләне тотҡан да ир кеше.

Хәҙер йәштәр хәрби хеҙмәт үтәп, Ватан алдындағы бурысын ҡайтарыу тураһында артыҡ уйланып бармай. Ҡайһылары әрме сафына эләкмәҫ өсөн әллә ниндәй мутлыҡтар уйлап табырға, аҡсаһын сығарып һалырға ла әҙер. Улар әрме хеҙмәтенең ир-егеттәр өсөн ниндәй ҙур тормош мәктәбе булыуын аңламай. Армия ата-әсәһенең ҡанаты аҫтында ауырлыҡ күрмәй генә үҫкән егеттәрҙе сыныҡтыра, улар физик яҡтан нығынып, төрлө һөнәрҙәр үҙләштереп ҡайта. Элек йәш егеттәр армияға алынмаһа, ата-әсәләренең дә, ҡыҙҙарҙың да уларға ҡарата мөнәсәбәте үҙгәрә торғайны. 4-се синыфта уҡығанда минең тимерлектә яңылыш ҡына бер бармағым өҙөлдө. Шунда әсәйемдең: "Улымды армияға алмаҫтар инде", - тип ултырып илағаны хәтеремдә. Әммә был миңә армияға барырға бер нисек тә ҡамасау итмәне, мин 25 йыл хеҙмәт итеп, подполковник дәрәжәһенә етеп, тыуған яҡтарыма әйләнеп ҡайттым.

Һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙең Ҡоралны Көстәрен тейешле кимәлдә тотоу өсөн бик күп ыңғай үҙгәрештәр булды, беҙ хеҙмәт иткән осор менән сағыштырғыһыҙ хатта. Тик бер нәмә генә борсоуға һала - армияла аҡсаға ялланған хәрбиҙәрҙең һаны арта. Ялланып эшләгән кеше бер ҡасан да иле өсөн йәнен бирмәйәсәк, ул бөтә ерҙә тик үҙ файҙаһын ҡайырта. Ә беҙгә ҡурҡыу белмәҫ Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов), Миңлегәле Ғөбәйҙуллин, Юрий Гагарин кеүек шәхестәр кәрәк. Шакирйән Мөхәмәтйәнов уйлап та тормайынса дошман утын күкрәге менән ҡаплаһа, Юрий Гагарин Ергә кире әйләнеп ҡайтыуын-ҡайтмауын уйлап тормай, аңлы рәүештә беренсе булып космосҡа оса. Бөгөн уларҙың батырлығын Сүриәләге һуғышта ҡатнашыусы 25 йәшлек Ырымбур өлкәһе егете Александр Прохоренко ҡабатланы: дошмандар уратыуында ҡалған һалдат бомбаға тотоусы самолеттар утын үҙенә төбәлттерҙе. Тимәк, беҙҙең илһөйәр, Ватаны, халҡы өсөн үлемдән дә ҡурҡмаған замандаш батырҙарыбыҙ, һәр өлкәлә үҙ эшен оло фиҙаҡәрлек менән башҡарыусы шәхестәребеҙ әле лә бар. Балаларҙы улар миҫалында, булған хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләп, аңлатып тәрбиәләргә кәрәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ата-бабаларҙан килгән илһөйәрлек традицияһына - Тыуған илде һаҡлау бурысына йәштәребеҙҙең мөнәсәбәте ниндәй?

**(Башы 1-се биттә).**

***Альберт СӘМИҒУЛЛИН, менеджер, 26 йәш:*** Запастағы рядовой булараҡ, мине армия темаһы бик борсомай, тейешле бурысты атҡарып ҡайттым - шул еткән. Илһөйәрлек тойғоһон мин армия сафында хеҙмәт итеү бурысына ғына бәйләп ҡарауҙан алыҫмын. Хәҙер күптәр өсөн армия уҡыу йә хеҙмәт юлындағы ваҡытлыса ҡаршылыҡ, законлы бурыс һымағыраҡ ҡабул ителә. Был турала усалыраҡ әйткәндәр ҙә бар, әлбиттә, ләкин йәмғиәттә йәшәгәс, уның законларынан ҡасып ҡалып булмай бит инде. Уның ҡарауы, мин әле мәктәптә уҡып йөрөгән кесе туғанымдың яҙмышы өсөн борсолам. Бер яҡтан, хәҙер армияла бер аҙ тәртип булдыралар ҙа кеүек, ләкин, ҡайҙа эләгеүеңә ҡарап, һаман булһа төрлө шарттарҙа хеҙмәт итергә тура килгән осраҡтар хаҡында ла ишетелеп тора. Илһөйәрлек, тигәндән, уны армияға ғына бәйләп ҡарамайым, тигәйнем инде, сөнки был киңерәк төшөнсә. Икенсе мәсьәлә - әгәр илгә берәй тышҡы хәүеф янаһа (әсәйем әйтмешләй, Хоҙай күрһәтмәһен), мин уның именлеген яҡларға һәр саҡ әҙермен, сөнки илгә янай икән, тимәк, йәшәгән йорт-ерең дә, ғаиләң дә ҡурҡыныс аҫтында ҡаласаҡ, тигән һүҙ. Ундай шарттарҙа бөҫөп ҡалған ир-ат һирәк булыр ине, тигән уйҙамын. Ҡабатлайым: фәҡәт үҙ илемде яҡларға әҙермен. Ә инде бына ҡайҙалыр сит илгә, ғүмере күрмәгән-белмәгән сит халыҡ мәнфәғәтен яҡларға ебәрәләр икән, мин быға әҙер түгелмен.

***Рөстәм ХӘЙРУЛЛИН, нотариус ярҙамсыһы, 24 йәш:*** Бөгөнгө йәштәр аңында көсләп-көсләп илһөйәрлек тәрбиәләргә тырышалар. Әгәр йәш быуын үҙ иленең өҫтөнлөктәрен, ҡаҙаныштарын, дәүләтебеҙҙең ябай халыҡ ҡатламына ихтирамлы күреп үҫә икән, был йәһәттән бер кемде лә мәжбүрләү кәрәкмәйәсәк. Үкенескә, бөгөн йәштәргә тыуған илебеҙҙе ныҡ үҫешкән Европа илдәре, Америка менән даими сағыштырып ҡарау һөҙөмтәһен татып һәм күреп йәшәргә тура килә. Ә сағыштырыуҙар кем файҙаһына икәнлеген үҙегеҙ күреп тораһығыҙ. Беҙҙә туктауһыҙ көрсөк, эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ... Ябай халыҡ тиндәрен һанағанда, байҙар миллиардтарын түгеп, туй үткәрә, танылған артистар казиноларҙан сыҡмай. Былар үҙҙәре өсөн үҙҙәре һөйләп торған күренештәр. Хәҙер сит илгә китеп йәшәгән һәм китергә теләгән бик күп йәштәштәрем бар, мин уларҙы илһөйәр булмағандары өсөн ғәйепләргә йыйынмайым. Урыҫ әйтмешләй, балыҡ - тәрәнерәктә, кеше яҡшыраҡты һайлай. Дәүләт үҙе шундай сағыштырыуҙарға "нигеҙ" бирҙе. Ул тап йәш быуынға аң-белем биреү системаһын юҡҡа сығарыуҙан башланды түгелме? Мәғариф системаһын "көнбайышса" йәки "американса" үҙгәртеп ҡорорға маташыуҙар үҙ емешен бирә инде ул. Йәнәһе, уларҙың системаһы һәйбәт һәм өҫтөн, беҙ шуны өлгө итеп алырға тейеш. Шулай уҡ кино, телевидениеның ниндәй йөгөнтөлө көскә эйә булыуын күрә тороп, көнөтөнө сит ил фильмдары пропагандалана. Ниңә, үҙебеҙҙең фильмдар юҡмы ни беҙҙең? Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, минеңсә, илһөйәрлек - ул үҙ илеңдең ҡеүәтен күреп, уның менән ғорурланып, дәүләтеңдең гуманлығын үҙ йәшәйешеңдә тойоп йәшәү. Эйе, ата-бабаларыбыҙ ҙа еңел йәшәмәгән. Һуғыш йылдары быуындары иһә бөтөнләй йәшәй ҙә алмаған: беҙ яҡшы йәшәһен өсөн ғүмерҙәрен биргән. Ә беҙ яҡшы йәшәйбеҙме һуң? Илһөйәрлек темаһына һеҙ биргән һорауға мин ошо һорау менән генә яуап ҡайтара алам, ғәфү итегеҙ, әгәр һеҙҙең алда илһөйәр булып күренмәһәм...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Апрелдә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан:**



• Әбйәлил районы Аҫҡар ауылынан Зәлифә Шакирова - **"Көрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**;

• Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Әкрәм Тотманов - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**;

• Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан Рәйфә Вәлиева - **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана"**;

• Ишембай ҡалаһынан Р. Әхмәров - **"Башҡорттарҙың хәрби тарихы"**;

• Хәйбулла районы Иҫәнгилде ауылынан Бөртөкбикә Гәлина, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан Рәшиҙә Ғәйнуллина, Ҡырмыҫҡалы районы Моҡай ауылынан Рәйфә Фәйрушина, Әбйәлил районы Буранғол ауылынан Мәүзиға Ғәбитова, Бәҡалы районы Иҫке Ҡатай ауылынан Н. Ситдиҡова, Көйөргәҙе районы Түбәнге Бабалар ауылынан Радик Хәлитов, Күгәрсен районы Дауыт-Ҡайып ауылынан Зөбәржәт Йәнбәкова, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес ауылынан Ф. Ҡолоҡаев, Учалы районы Миндәк ауылынан Ф. Тайфурова - **башҡортса "Дини календарь"**;

• Кушнаренко районы Кушнаренко ауылынан Р. Ғәлиева, Миәкә районы Боғҙан ауылынан Мәүсилә Хәбирова, Баймаҡ районы Билал ауылынан С. Кәримова, Мәләүез районы Һарыш ауылынан Х. Саҙретдинова - **"Мәктәп календары"** китаптарына лайыҡ булды.

• Иң өлкән, тоғро уҡыусыларыбыҙ - Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан Вилдан Шәриповка, Мәләүез ҡалаһынан Роза Хәзиеваға - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"** китабын бүләк итәбеҙ.



**• Ошондай уҡ дәртләндереү сараһы майҙа ла ҡаралған. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер "Көрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"; "400 башҡорт халыҡ йыры"; "Башҡорттарҙың хәрби тарихы" китаптарын, шулай уҡ 10 уҡыусы "Матурлыҡ календары"н алып ҡыуанасаҡ. Кем алыҡ?**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда Еңеү көнө айҡанлы почтальондар 63 мең һуғыш ветеранына Рәсәй Президентының ҡотлауын тапшыра. Төбәктәргә ҡотлау хаттары барып еткән, тип хәбәр иттеләр Рәсәй почтаһының республика филиалында. "Ҡотлауҙар 2-9 майҙа таратыласаҡ. Әгәр ветерандар күрһәтелгән адрес буйынса йәшәмәһә, почта Пенсия фонды менән берлектә мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн тикшерәсәк һәм ҡотлау хаты яңы адресҡа ебәреләсәк. Ветеран өйҙә юҡ икән, хат бер ай почта бүлексәһендә һаҡлана", - тип хәбәр иттеләр почта идаралығында.

✓Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар һәм инвалидтар, шулай уҡ оҙатып йөрөүсе кеше өсөн электр транспортында бушлай йөрөү ойошторолған. Акция ошо йылдың 1 майынан 10-на тиклем ғәмәлдә була. Бының өсөн ветеранға таныҡлығын күрһәтеү ҙә етә. Алдан хәбәр ителгәнсә, 3 майҙан 10-на тиклем Рәсәй тимер юлдары һуғышта ҡатнашыусыларға һәм инвалидтарға, шулай уҡ оҙатыусыға алыҫ араға йөрөүсе поездарҙа бушлай йөрөү хоҡуғын бирҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ғаиләһенең уҙған йылдағы килеме тураһында мәғлүмәт бирҙе. Тейешле мәғлүмәт төбәк етәксеһенең сайтында баҫылған. 2015 йылда республика Башлығы 7,64 миллион һум аҡса эшләгән. 2014 йылда уның килеме 43,2 мең һумға күберәк булған. Ғаиләбашлығының исеменә - майҙаны 3699 квадрат метрлыҡ баҡса участкаһы һәм дөйөм майҙаны 25,7 квадрат метр булған йорт, уның ҡатынына майҙаны 120,5 квадрат метрлыҡ фатир теркәлгән. Былтырғы кеүек үк, Хәмитовтар дәүләт дачаһы (444,8 квадрат метр) һәм дәүләт фатиры (79,9 квадрат метр) менән файҙаланыуын дауам итә.

✓Өфө хакимиәте башлығының атаәсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған Өфө студенттарына стипендияһы бер нисә тапҡырға арттырылды. Хәҙер юғары уҡыу йорттарында уҡыған стипендиаттар ай һайын 600 һум урынына ике мең һум аласаҡ. Урта звено белгестәрен әҙерләү программалары буйынса белем алған студенттар өсөн айлыҡ түләү 1,5 мең һум тәшкил итә (быға тиклем 500). Квалификациялы эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр әҙерләү программалары буйынса уҡыусылар 400 һум урынына мең һум аласаҡ. Яңылыҡтар республиканың баш ҡалаһында урынлашҡан уҡыу йорттарында ҡағыла.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЯҘ КӨНДӘРЕНДӘ ЛӘ...

## Һаҡмар элеккеләй ташмай

**Йәмғиәтебеҙҙә һуңғы йылдарҙа барған үҙгәрештәр кеше аңына ғына түгел, тәбиғәткә лә кире йоғонто яһаны, күрәһең. Тәбиғәттең кинәт үҙгәреүе, яуым-төшөмдөң кәмеүе, йылдың ҡоро килеүе, йылға-күлдәрҙең һайығыуы һәм ҡороуы, урмандарҙың иҫәпһеҙ ҡырҡыу арҡаһында юҡҡа сыға барыуы, шул сәбәпле кейек-ҡоштарҙың кәмеүе уйлана, күрә белгән кешеләрҙе хафаға һалмай ҡалмайҙыр.**



*Һаҡмар йылғаһы. Яманташ һикәлтәһе.*

Беҙҙә һаман да тәбиғәткә яраҡлашып йәшәй белеү түгел, ә, киреһенсә, уны үҙебеҙгә буйоһондорорға тырышыу көслө. Шуның өсөн дә еребеҙҙең күп өлөшөндә төрлө стихиялы бәләләр тыуып ҡына тора. Ә бит уларҙың күбеһен булдырмау үҙебеҙҙән тороуын кешеләр аңлаһын ине лә һуң. Әммә әҙәм заты һәр ваҡыт үҙенә уңайлы булһын өсөн тырыша. Мәҫәлән, эсәр һыуҙың күпме исраф ителеүен күрәбеҙ. Ә бит һәр нәмәнең сиге бар. Ҡулланылған һыу махсус фильтрҙар аша үтеп, кире ергә ағыҙылһа - бер хәл, әммә ысынбарлыҡта улай түгел шул. Изге китабыбыҙ Ҡөрьән-Кәримдең Әл-Мөлөк сүрәһенең 30-сы аятында бына нимә тиелә: "Беләһегеҙме, һеҙҙең эсәр һыуығыҙ ергә бик тәрәнгә китһә, кем һеҙгә шишмә урғылтып сығарып бирер?" Тағы ла үҙебеҙҙең башҡорт халҡының булмышын һәм асылын билдәләгән "Урал батыр" эпосына мөрәжәғәт итһәк, унда Урал батыр халыҡҡа бына нимә ти: "Күлдең һыуын эсмәгеҙ, хараплыҡҡа төшмәгеҙ". Урал батыр халҡына ошо һүҙҙәрҙе васыят итеп ҡалдыра, сөнки аҡмаған, быуылған һыу төрлө паразиттар үрсер өсөн бик ҡулай. Ошо һыуҙы ҡулланып, үҙе белмәгән күпме ауырыуҙарға дусар була әҙәм балаһы. Күп сирҙәрҙең төп сәбәбе лә һыуҙан булыуын белгестәр ҙә раҫлай.

Йырҙарҙа йырланған һәм данланған, бер ҡараһаң, аҫау айғыр кеүек ярһыу, икенсе ҡараһаң, иркә кәләш кеүек йыуаш, наҙлы Һаҡмарымды быуғас, йылғабыҙ ныҡ һайыҡты, ләм баҫты, ҡото китте. Йылға ярын йәмләп үҫкән ҡамыш-томбойоҡтар юҡҡа сыҡты. Һандуғастар ҡунып һайрар талдар ҙа, йөҙйәшәр тирәктәр ҙә күпләп ҡорой башланы. Элек ат йөҙҙөргән тәрән ятыуҙар хәҙер тауыҡ кисмәле булып ҡына ҡалды. Йылға шул тиклем һайыҡты, хатта еңел машина менән дә бер ауырлыҡһыҙ үтергә була. Иң таҙа һыуҙы ғына үҙ иткән Ҡыҙыл китапҡа ингән бәрҙе балығы ла үрләмәҫ булды. Халыҡтың, килгән туристарҙың ғәмһеҙлеге арҡаһында яр буйҙары полиэтилен, шешә ярсыҡтары, консерва һауыттары кеүек ҡый-ғыпыр менән тулды. Былай барһаҡ, киләсәк быуындарыбыҙға, балаларыбыҙға ни ҡалыр? Улар алдында ни тип яуап бирербеҙ? Нимә тип аҡланырбыҙ? Иң аянысы, балаларыбыҙ ниндәй мөхиттә көн итер, донъя көтөр?

Ҡулды быуғас, уның аҫҡы өлөшө күгәреп, иҫһеҙләнгән кеүек, йылғаны ла быуғас, уның менән дә шул уҡ хәл килеп сыға түгелме ни? Һаҡмар быуылғас, йылға буйында кинәт яуым-төшөм үҙгәрҙе, ямғыр йылғанан көс алырға тейешле булһа, кәмегән, юҡ һыуҙан ҡалай ғына көс алһын инде. Яҙ көнө йылғалар ташырға тейеш тә бит, әммә Һаҡмар ҙа, Таналыҡ та элекке кеүек шаулап ташмай. Элекке кеүек боҙ киткәне лә һиҙелмәй. Ә ташҡын бөтә бысраҡты алып китә, йылғаның үҙәнен таҙалай. Ә беҙ ошо тәбиғи процесты боҙҙоҡ.

Йәнә бер һорау тыуа. Ярай, "Ташлы", "Хворостянка", "Матрай" һыуһаҡлағыстары кәрәктер ҙә, ләкин "Һаҡмар" ниндәй маҡсаттан сығып төҙөлдө икән? Әлбиттә, ҡасандыр миллиондар түгеп төҙөлгән быуаны асып ҡына был проблемаларҙы хәл итеп булмай. Бында системалы эш алып барыу кәрәк. Һәр хәлдә, был етди проблема менән ошо өлкәлә эшләүсе белгестәр шөғөлләнергә тейештер, шулай уҡ халыҡтың да быға битараф ҡалмауы кәрәктер. Тағы ла... Һаҡмар буйы ауылдарының күбеһендә малдар көтөлмәй, тырым-тырағай йөрөй. Шул арҡала йылға буйын йәмләр талдар ҙа, башҡа ағас-үҫентеләр ҙә ашалып бөттө. Ә бит ағас йылғаны ҡороуҙан һаҡлай. Ғөмүмән, тәбиғәттә һәр нәмә бер-береһе менән ныҡлы бәйләнгән. Колхоз-совхоз заманында меңәрләгән баш мал аҫыралһа ла, әлеге кеүек тәртипһеҙлек булмаған. Шуға күрә, мал көтөүҙәрен ойоштороу ҙа зарур. Үҙем иһә был мәсьәләләрҙе сисеү юлдарын түбәндәгеләрҙә күрәм:

- Һыу буйҙарына ағастар ултыртыуҙы тергеҙергә. Был эште яҙлы-көҙлө өмәләр ярҙамында башҡарырға була.

- Һыуҙың кимәлен тотоу өсөн Һаҡмарҙы туйындырған кесе йылғаларҙа бәләкәй быуалар (июндән сентябргә ҡәҙәр) эшләү кәрәк.

- Һаҡмар буйында мал йөрөтөүҙе (майҙан сентябргә тиклем) тыйыу мөһим.

- Һаҡмар яҙмышын, йылғаларҙың хәл-торошон үҙ эсенә аласаҡ программа эшләү һәм уға таянып эш алып барыу кәрәк.

- Әгәр ҙә ауылдарҙы бөтөрмәй һаҡлап ҡалабыҙ тип тырышабыҙ икән, йәйәү, атта, кәмәлә турист маршруттары ойошторорға була.

Әгәр ҙә күмәкләп тотонһаҡ, был мәсьәләләрҙе сисеү юлдарын табырбыҙ, тип ышанам. "Берҙәмектә - көс", ти халыҡ мәҡәле. Әлегә һуң булмаҫ борон барлыҡ белемебеҙҙе, көсөбөҙҙө егеп, был изге эште атҡарып сыға алыуыбыҙға иманым камил.

**Буранбай АСҠАРОВ,**
**"Ғәлләм" мәсете**
**имам-хатибы.**
**Хәйбулла районы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ХӘҘЕР КҮРҺӘЛӘР...

Халҡымдың ихласлығы, эскерһеҙлеге, йомартлығына хайран ҡалырлыҡ. Шуны раҫлаусы бер генә ваҡиға тураһында һөйләп китмәксе булдым...

Рәсәй Үҙәк телевидениеһында "Вечный зов" кинофильмының юбилейы айҡанлы тапшырыу булғайны. Унда ошо фильмда уйнаған, хәҙер инде ологайған актерҙар саҡырылғайны. Улар үҙҙәренең иҫтәлектәре менән уртаҡлашты, ниндәй ауыр шарттарҙа эшләргә тура килгәнлеген һөйләне.

Билдәле булыуынса, "Вечный зов" Башҡортостандың Дыуан районында төшөрөлгән. Мәшһүр актерҙар урындағы халыҡ тураһында йылы һүҙҙәр әйтеп үтте. Агата ролен башҡарған актриса ауырлы ҡатын булып уйнаған. Уны гримерҙар тейешенсә кейендергәндәр бит инде. Ә ауылдағы башҡорт ҡатындары актриса ысын ауырлы икән тип уйлап, үҙҙәрендә лә наҡыҫ булған ашамлыҡтарын уға ташығандар. "Мои башкирки!" тине оло актриса, күҙҙәренә йәштәр эркелеп.

Актерҙар шулай уҡ Дыуандың тәбиғәте, ундағы халыҡтың еңел булмаған тормошо тураһында ла телгә алды. Һуғыш йылдары тураһында кино төшөргәс, беҙгә шул замандағыса алам-һалам кейем кейергә тура килде, ә ауыл кешеләре ысынбарлыҡтағы тормошонда шулай кейенә ине, тип хәтерләне улар. Мәскәүҙән алып килгән матур-матур ап-аҡ кейемдәребеҙҙе кейеп йөрөргә насип булманы, сөнки йыш ҡына ямғыр яуҙы, батҡаҡ булды, тинеләр.

Хәҙер килеп күрһендәр ине актерҙар Дыуан яҡтарын, Башҡортостанды, тип уйлап ҡуйҙым. Башҡа шәл ябынып, өҫкә фуфайка, аяҡҡа резина итектәр кейеп, беҙҙең быуын да колхоз-совхоздарҙа тиндәр өсөн бил бөктө. Ә хәҙер ауыл урамдарында асфаль түшәлгән, кешеләр автомобилдәрҙә генә елдерә, тәмле ашай, ҡупшы кейенә.

Бәлки, Кино йылында "Вечный зов" фильмы буйынса беҙҙә лә берәй сара уҙғарырҙар? Һыйларға ине башҡорт балы менән шул актерҙарҙы!

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

# ҺҮҘҺЕҘ АҢЛАТ...

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары менән осрашыуҙа профессор Әхмәт Сөләймәнов заманса йырҙарға әсенеүен белдергәйне. "Халҡыбыҙ йырҙарҙы һәр ваҡыт юғары зауыҡ, юғары шиғриәт, тәүфиҡ менән ижад иткән, ә бөгөн сәхнәләрҙән ир-егеттәрҙең "яратам" тип ҡысҡырыуын нисек йыр тип атап була?"- тигәйне ул.

Эйе, ҡатын-ҡыҙ йырсылар тағы ла уҙҙырып ебәрә: "ҡосағына ингем килә", тип йырлай. Ҡасандан алып ҡатын-ҡыҙ яратыуын ғына түгел, эротик хыялдарын да шулай асыҡтан-асыҡ әйтеүҙән оялмай башланы әле? Ни булды беҙгә?

"Сибай" башҡорт халыҡ йырындағыса, ҡайтып, ҡатынын күреүҙән мәхрүм ир ҙә уны танһыҡлағандыр бит, әммә ул :

*"Киң түшәккәйҙәрен тарҙар йәйеп,*
*Йоҡлай микән Фатимам төш күреп"*, - тип йырлаған!

Ниндәй кинәйә, ниндәй образ, ниндәй сафлыҡ, тәүфиҡ!

Беҙҙең халыҡ йырҙарында "яратам, һөйәм" һүҙҙәре юҡ, әммә шул тиклем тәрән мөхәббәт сағылдырыла. Мәҫәлән:

*Күҙ алдыҡайымдан үтеп китһәң,*
*Күҙ алмаҡайҙарым ирейҙер!*

Бына нисек аңлатҡан һөйөүен уҙған быуаттарҙың ғашиҡ ирҙәре!

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ялта ҡалаһындағы Даларис Имелбаев етәкселегендәге "Иҙел-Урал" башҡорт мәҙәниәте үҙәге ағзалары "Ялта - дуҫлыҡ яры" фестивалендә ҡатнашты. Байрамда "Халыҡтар дуҫлығы" концерт программаһы тәҡдим ителде, унда уның исеме фестиваль тарихында тәүге тапҡыр Ҡырымда йәшәгән 25-тән ашыу халыҡ телендә яңғыраны. Ҡатнашыусылар рус, украин, татар, грузин, йәһүд, әрмән һәм башҡорт телдәрендә йырҙар башҡарҙы.

✓Йыл башынан 156 өфөлө эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге нигеҙҙәре буйынса бушлай курстарҙы тамамлаған. 156 кешенең 37-һе - рәсми рәүештә теркәлгән эшһеҙҙәр. Курсҡа йөрөүселәрҙең күбеһе юғары һөнәри белемгә эйә. Шуның менән бергә уларҙың 94-е - ҡатын-ҡыҙҙар. Бындай курстарҙы Өфө ҡалаһының үҫеш һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү фонды менән берлектә баш ҡалалағы Халыҡ мәшғүллеге үҙәге даими ойоштора. 5-16 сентябрҙә һәм 7-18 ноябрҙә Өфөлә йәнә бушлай курстар үткәреү күҙаллана.

✓Башҡортостанда "Башагро" сауҙа майҙансығын үҫтереү буйынса берлектәге проектты ғәмәлгә ашырыу башлана. Эксперттар һүҙҙәренсә, яңы сауҙа майҙансығы етештереүсе һәм һатып алыусы араһында тура бәйләнеш булдырырға мөмкинлек бирәсәк. Майҙың икенсе яртыһында "БашАгро" майҙансығында эш башларға теләүселәр өсөн өйрәтеүсе семинар уҙғарыу күҙаллана.

✓2015 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан илдең картуф етештереүҙә юғары күрһәткестәргә өлгәшкән биш төбәге иҫәбенә инде. Республикала үҫтерелгән картуфтың 96 проценты шәхси ярҙамсы хужалыҡтарға тура килә. Йыл һайын төбәктә 90 мең гектар майҙанда картуф ултыртыла. Быйыл республика ауыл хужалығы предприятиелары һәм фермер хужалыҡтары картуф ултыртыу өсөн 3,1 мең гектар ер бүлергә ниәтләй.

✓"Change.org" сайтында 1500-ҙән ашыу кеше 2000 һумлыҡ аҡсала Өфөнөң иҫтәлекле урындарын төшөрөү тәҡдимен хупланы. Әлеге мәлгә бөтәһе 1850 кеше тауыш биргән. Өфө ҡалаһы төшөрөлгән аҡса берәмегенең дизайнеры булып Красноярскиҙың "Агрессив дизайн студияһы" сығыш яһаны. Яңы аҡса өсөн дизайнерҙар зәңгәрһыу-йәшел төҫтө һайлаған. Купюраның алғы яғында - Салауат Юлаев һәйкәле һәм "Ләлә" мәсете, икенсе яғында Дуҫлыҡ монументы төшөрөлгән. Тиҙҙән федераль каналдарҙың береһендә яңы аҡсаларға һүрәт һайлау буйынса тауыш биреү башлана.

**“Башинформ”дан.**

✔ *Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙе байрам итер алдынан Өфөлә йәшәүсе 34 ветеран ҡаланың юғары наградаһы - ҡала округы хакимиәтенең Маҡтау ҡағыҙы һәм "Ҡала алдындағы хеҙмәте өсөн" билдәһе менән бүләкләнде.*



ҠЫҪҠАСА...



# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

✔ Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙе байрам итер алдынан Өфөлә йәшәүсе 34 ветеран ҡаланың юғары наградаһы - ҡала округы хакимиәтенең Маҡтау ҡағыҙы һәм "Ҡала алдындағы хеҙмәте өсөн" билдәһе менән бүләкләнде. Наградаларҙы ветерандарға 9 майға тиклем уларҙың өйөнә алып барып тапшырасаҡтар. Һәр депутат бер ветеранды ҡотлаясаҡ. Ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко алты һуғыш ветеранын бүләкләйәсәк. Былдай сараны Өфө ҡала Советы йыл һайын уҙғара. Бынан тыш, байрам көндәрендә ветерандар өсөн төрлө осрашыуҙар үткәрелә. Былтыр Еңеү көнөнә арналған сараларҙы үткәреү, ветерандарға ярҙам итеү өсөн депутаттар һәм был изге эшкә йәлеп ителгән бағыусылар тарафынан йыйылған хәйриә сараларының дөйөм суммаһы 11,5 млн һумға еткән.

✔ Өфөлә "Үлемһеҙ полк" акцияһын үткәреү барышында Октябрь проспектының бер өлөшө ябыла. Ҡала хакимиәте сайтында баҫылған документтан күренеүенсә, 9 майҙа иртәнге сәғәт 11-ҙән көндөҙгө 1-гә тиклем Октябрь проспектының бер өлөшөндә - Шафиев урамынан алып Кольская урамына тиклем транспорт хәрәкәте туҡтатыла. Пассажирҙар автобусы һәм электр транспорты хәрәкәтенең схемаһын үҙгәртеү Өфө хакимиәтенең Транспорт һәм элемтә идаралығына йөкмәтелгән. 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 71 йыллығына арналған тантаналы йөрөштә үткәреү барышында юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында тейешле саралар ҡабул ителәсәк.

✔ 7 майҙа Өфөлә һигеҙ төркөм буйынса традицион еңел атлетика эстафетаһы үтә. Унда мәктәптәр, колледждар, вуздар, үҫмерҙәр һәм спорт клубтары, шулай уҡ ҡала предприятиелары һәм ойошмалары ҡатнаша. Шулай уҡ эстафета сиктәрендә "Донъя уҙышы" була, унда һәр кем ҡатнаша ала. Шоссе велоспорты - велоспорттың бер дисциплинаһы. Ярышта 2001 йылғы һәм унан бәләкәйерәк үҫмерҙәр һәм ҡыҙҙар ҡатнашасаҡ. Улар ҡала урамы буйлап 23 саҡрым уҙасаҡ. Еңел атлетика эстафетаһын асыу тантанаһы 11.00 сәғәттә, велоспорт буйынса ярыш 14.00 сәғәттә башлана.

✔ Башҡортостанда бер йыл эсендә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һаны 69 меңдән 60,5 мең кешегә, йәғни меңгә кәмегән - БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ошондай статистик мәғлүмәттәр килтерә. Бөгөнгө көндә республикала 60 565 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм һуғышта ҡатнашыусыларҙың тол ҡатындары йәшәй. Был категорияға Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусылары һәм инвалидтары - 3131; "Блокадалы Ленинградта йәшәүсегә" билдәһе менән бүләкләнеүселәр - 137; һуғыш йылдары тылы хеҙмәтсәндәре - 39 964, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда фашистар тарафынан төҙөлгән концлагерҙарҙың, гетто һәм башҡа мәжбүри тотоу урындарының элекке балиғ булмаған тотҡондары - 150, һәләк булған (үлгән) Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусыларының, һуғыш инвалидтарының ғаилә ағзалары - 17 183 кеше инә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХАЛЫҠ-АРА УЙЫНДАРҒА ӘҘЕРБЕҘ!



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Халыҡ-ара балалар уйындары комитеты президенты Торстен Раш менән осрашты. Әңгәмә барышында Өфөнөң 2019 йылда Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарын үткәреүгә кандидат булараҡ әҙерлеге тикшерелде.**

- Халыҡ-ара балалар уйындары беҙгә абруй йәки PR-кампания өсөн түгел, ә йәш быуынды спортҡа, сәләмәт йәшәү рәүешенә йәлеп итеү өсөн кәрәк. Бынан сығып, беҙ 2019 йылда Өфөлә Халыҡ-ара балалар уйындарын уҙғарыу мөмкинлеген тикшерәбеҙ, - тине Рөстәм Хәмитов.

- 2013 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында үткән VI Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындарын ҡала юғары кимәлдә ойошторҙо, - тип билдәләне Торстен Раш. - Бөгөн Халыҡ-ара балалар уйындарын ҡабул итергә әҙер ҡаланы табыуы еңел түгел, сөнки унда ҡатнашыусылар ике тапҡырға күберәк, финанс йәһәтенән дә ҙур һорауҙар бар. Өфө кеүек ышаныслы партнерҙарыбыҙ булыуына бик шатбыҙ. Һеҙҙең базағыҙ ныҡлы, ошо уйындарҙы үткәреүгә әҙер булыуығыҙға ышанам...

Осрашыуҙа шулай уҡ Халыҡ-ара балалар уйындары комитетының генераль секретары Ричард Смит ҡатнашты. Торстен Раш менән бергә улар Өфөлә ярыштарҙы уҙғарыу өсөн йәлеп итергә мөмкин булған спорт һәм инфраструктура объекттарын ҡараны.

Билдәләнеүенсә, 2016 йылдың июлендә Нью-Тайбэй ҡалаһында (Тайвань) 50-се Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындары сиктәрендә 2019 йылда 53-сө Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарын уҙғарыуға кандидат булараҡ Өфө менән таныштырыу сараһы үтәсәк.

Белешмә өсөн: бынан өс йыл элек Башҡортостандың баш ҡалаһы VI Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындарын ҡабул иткәйне. Ярыштарҙа 20 илдең 60 ҡалаһынан йыйылма командалар ҡатнашты. Спортсылар ете спорт төрө: тау саңғыһы, хоккей, фигуралы шыуыу, шорт-трек, сноубординг, спорт ориентирыу һәм саңғы уҙышы буйынса 170-кә яҡын миҙал уйнатты. Ярыш һөҙөмтәләре буйынса Өфө командаһы 16 миҙал яуланы һәм беренсе урынға лайыҡ булды.

# ХЕҘМӘТТӘШЛЕК ФАЙҘАҒА ҒЫНА




**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Италияның Il Sole 24 Ore радиостанцияһына биргән интервьюһында Европа илдәре менән эшлекле хеҙмәттәшлекте төбәк-ара кимәлдә үҫтереү Рәсәйгә, Евросоюзға ҡарата иғлан ителгән санкцияларҙың әҙемтәләрен йомшартырға булышлыҡ итәсәге хаҡында белдерҙе.**

- Һис һүҙһеҙ, Рәсәй өсөн Италия - туғандаш ил. Беҙ эшҡыуарлыҡты, эшлекле мөнәсәбәттәрҙе үҫтерергә теләйбеҙ. Беҙ хеҙмәттәшлеккә әҙер. Бөгөн илебеҙгә, шулай уҡ Рәсәйҙең Евросоюз илдәренә ҡарата иғлан ителгән санкцияларҙың кире әҙемтәләрен бөтөрөү өсөн бөтә мөмкинлектәребеҙ ҙә бар. Эшлекле хеҙмәттәшлекте үҫтереү ошо санкцияларҙың йоғонтоһон кәметә алыр ине, - тине Рөстәм Хәмитов.

Уның һүҙҙәренсә, берлектәге предприятиелар асыу килеп тыуған хәлдә көйләү ысулдарының береһе булыуы ихтимал.

- Италия эшҡыуарлығының Рәсәйҙә яңы производстволар булдырыуы йәһәтенән эш алып барыу мөмкинлеге бар. Беҙ ошондай берлектәгә эш менән ҡыҙыҡһынабыҙ, - тип билдәләне республика Башлығы. - Элегерәк Италия бизнесы үҙенең продукцияһын Рәсәй биләмәһендә һата ине. Беҙ Рәсәйҙә итальяндар менән шундай уҡ продукция етештерергә тәҡдим итәбеҙ.

Санкциялар бер кемгә лә файҙа килтермәй, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Башҡортостан етәксеһе. Мәҫәлән, Италия яғы, Рәсәй етәкселәре яуап санкцияһы ҡабул иткәс, яҡынса 4 миллиард евро күләмендә юғалтыу кисерҙе. Шуға күрә еңел булмаған иҡтисади шарттарҙа ла сит ил партнерҙары менән хеҙмәттәшлек итеү дауам итә.

# ЙОНДОҘҘАР МАТЧЫ - ӨФӨЛӘ!



**Башҡортостан Хөкүмәте, Континенталь хоккей лигаһы һәм "Салауат Юлаев" хоккей клубы араһында 2017 йылда Континенталь хоккей лигаһының Йондоҙҙар матчын Өфөлә уҙғарыу тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйылды. Документҡа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов, Континенталь хоккей лигаһы президенты Дмитрий Чернышенко һәм "Салауат Юлаев" хоккей клубының генераль директоры Валерий Нургутдинов ҡул ҡуйҙы.**

Йыл һайын КХЛ чемпионатында сығыш яһаған һәм көйәрмәндәр, журналистар һәм лига етәкселәге тарафынан һайланған иң яҡшы уйынсылар ҡатнашлығында Континенталь хоккей лигаһының Йондоҙҙар матчы ойошторола. Туғыҙынсы Йондоҙҙар матчын 2017 йылдың ғинуар айында "Өфө-Арена" спорт аренаһында үткәреү күҙаллана. Астана, Владивосток, Тольятти ҡалаларынан килгән ғаризаларҙы, КХЛ-дың рәсми сайтында көйәрмәндәрҙең тауыш биреү һөҙөмтәләрен ҡарағандан һуң, Өфөгә Континенталь хоккей лигаһының Йондоҙҙар матчын уҙғарыу хоҡуғы биреү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

- Республикала хоккейға ҙур иғтибар бирелә, - тип билдәләне Дмитрий Чернышенко. - "Салауат Юлаев"-тың Континенталь хоккей лигаһында - бронза, "Ағиҙел" ҡатын-ҡыҙҙар командаһының Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһы чемпионатында көмөш миҙал яулауы һәм "Таусы"ның (Учалы) Йәштәр хоккей лигаһы беренселегендә еңеүе быға миҫал булып тора. Республикағыҙҙа хоккей менән шөғөлләнеү өсөн яҡшы шарттар булдырылыуы бына шундай ҡаҙаныштарға килтерҙе. Төбәк һәм баш ҡала етәкселегенең сәйәсәте сәләмәт йәшәү рәүешенә генә түгел, беҙҙең яратҡан спорт төрө - хоккейҙы үҫтереүгә лә йүнәлтелгән. Шуға күрә килеһе миҙгелдең иң ҙур ваҡиғаһы - Континенталь хоккей лигаһының Йондоҙҙар матчы тап Өфөлә үтһен өсөн күп кандидаттар араһынан һайлап алыу еңел булды.

- Беҙ - хоккей республикаһы. Был йәһәттән яҡшы уңыштарыбыҙ бар. Башҡорт хоккейы һәр саҡ көслө, ҡеүәтле, ҡыҙыҡлы буласаҡ, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Йондоҙҙар матчы 2017 йылдың ғинуарында Өфөлә уҙасаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Башҡортостан викимедиясылары фотографтарҙы "Вики ерҙе ярата 2016" халыҡ-ара фотоконкурсында ҡатнашырға саҡыра. Бының өсөн республикалағы тәбиғәт ҡомартҡыларының исемлеген табып, фотоға төшөрөргә һәм уларҙы исемлектәге һылтанмалар буйынса халыҡ-ара Wikimedia Commons аудио-, видео-, фотофайлдар һаҡлағысына ҡуйырға кәрәк. Был хаҡта Башҡорт Википедияһы администраторы Рөстәм Нуриев хәбәр итте. Бәйге ағымдағы йылдың 31 майына тиклем бара. Конкурстың Рәсәй этабында ун еңеүсе билдәләнә. Иң яҡшы ун фотоһүрәт авторҙары халыҡ-ара этапта ҡатнаша.

✔ Башҡортостан ауыл ерендә юлдар төҙөү һәм реконструкциялау өсөн федераль бюджеттан 267,6 миллион һум аҡса аласаҡ. Дөйөм алғанда, Рәсәй Хөкүмәте ошо маҡсатҡа 6,8 миллиард һумдан ашыу аҡса бүлде. Төбәктәр аҡсаны дөйөм ҡулланылыштағы автомобиль селтәрҙәренән ауылдарҙағы мөһим объекттарға, шул иҫәптән ауыл хужалығы продукцияһын етештереү һәм эшкәртеү буйынса предприятиеларға илтеүсе юлдар төҙөүгә һәм ремонтлауға йүнәлтергә тейеш.

✔ Израилдә тәүге тапҡыр халыҡ-ара һабантуй ойошторола. Ришон-ле-Цион ҡалаһында үтәсәк асыҡ һауаға байрамға 200-300 ҡунаҡ килеүе көтөлә. "Фейсбук" социаль селтәрендәге "Сит илдәрҙәге башҡорттар" төркөмө хәбәр итеүенсә, 21 майҙа һабантуй байрамын София (Болгария), 22 майҙа - Истанбул (Төркиә), 28 майҙа - Лос-Анджелес (Калифорния штаты, АҠШ), 28 майҙа - Вашингтон (АҠШ), 29 майҙа - Будапешт (Венгрия), 4 июндә - Рига (Латвия), 4 июндә - Прага (Чехия), 5 июндә - Женева (Швейцария), 18 июндә - Дрезден (Германия), 17 июлдә - Нью-Йорк (АҠШ) һәм Торонто (Канада) ҡабул итә.

✔ 9 Май көнө баш ҡалала байрам саралары "Еңеүселәр маршы" менән башлана. Колонна 9.30 сәғәттә Ленин исемендәге майҙандан Якутов паркына тиклем үтәсәк. Еңеү паркында 10.00 сәғәттә сәскәләр һалыу тантанаһы була. 11.00 сәғәттә Ленин исемендәге майҙанда "Үлемһеҙ полк" патриотик акцияһы башлана.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ЕР ХУЖАҺЫ ҠАЙҘА ТӘРБИӘЛӘНӘ?

**Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатында беренсе тапҡыр республика кимәлендә дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусыларының "Ер хужаһы" исемле фәнни-тикшеренеү конференцияһы үтте. Проекттың ойоштороусылары - Ишембай районы хакимиәтенең мәғариф бүлеге, ЮНЕСКО-ның Башҡортостан Республикаһы буйынса комитеты, Башҡортостан Республикаһының "Мин - патриот" төбәк йәмәғәт ойошмаһы.**

Һүҙ ҙә юҡ, мәктәп уҡыусылары төрлө кимәлдә үткәрелгән конкурстар, конференцияларҙа йыш ҡатнаша һәм юғары уңыштарға өлгәшә. Әммә был конкурс ауылдарыбыҙ яҙмышына битараф булмаған ауыл уҡыусылары өсөн ойошторолдо. Тыуған еребеҙгә янаған хәүефтәрҙән аралау, үҙең һәм ғаиләң, ерең һәм илеңдең проблемаларын хәл итеүгә үҙ өлөшөңдө индереү, киләсәккә айыҡ аҡыл һәм тәрән һөйөү менән килеү, дөрөҫ һөнәр һайлап, файҙалы ғилем алып, ысын мәғәнәһендәге ер хужалары тәрбиәләү - Бөтә донъя Ер көнөнә арнап үткәрелгән сараның төп маҡсаттары ошолар булды. Маҡсат ҡуйылғас, фекерҙәштәр ҙә табылды: "Мин-патриот" төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе урынбаҫары Рәйлә Камил ҡыҙы Вәхитова, Ишембай ҡалаһындағы "Юрматы" мебель эшләү цехы етәксеһе Илнур Марат улы Ғиниәтуллин, Ишембай районының Ҡолғона ауылында йәшәүсе шәхси эшҡыуар Урал Таһир улы Ғөбәйҙуллин конкурстың төп бағыусылары булып торҙо.

Ҡыҙыҡлы һәм фәһемле конкурс алты номинациянан торҙо: ауылды төҙөкләндереү; минең бизнес планым; ауылым уңғандары; Башҡортостан шарттарында үҫемлекселек; зоология һәм ветеринария; тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау; ҡортсолоҡ һәм бал биреүсе үҫемлектәр.

Республикабыҙҙың Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Сибай, Ишембай, Салауат ҡалаларынан һәм 22 райондан 112 буласаҡ йәш эшҡыуар, ер хужалары ҡатнашты был конкурста. Бигерәк тә Ауырғазы, Бишбүләк, Ейәнсура, Дүртөйлө, Әбйәлил, Ҡариҙел, Көйөргәҙе районы уҡыусылары әүҙемлек күрһәтте. Тормошҡа ашырырлыҡ бизнес пландар, эшлекле тәҡдимдәр, ауылдарҙы төҙөкләндереү буйынса уңышлы программалар жюри ағзаларында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Уҡыусылар ололарса фекер йөрөтөп, ил проблемаларын хәл итерлек тәҡдимдәр менән сығыш яһаны. Һәр уҡыусының эше оло хөрмәткә лайыҡ, әммә һәр конкурстың үҙ еңеүселәре - оҫталарҙың оҫтаһы була. Айырым номинацияларҙа 1-се дәрәжә диплом, ҡиммәтле бүләктәр менән бүләкләнгән уҡыусыларҙы атап китмәү мөмкин түгел.

"Ауылды төҙөкләндереү" номинацияһында - Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылының М. Абдуллин исемендәге 1-се мәктәбе уҡыусыһы Элена Кәримова, "Минең бизнес планым" номинацияһында - Стәрлетамаҡ районы Бүреғаҙған ауылы мәктәбе уҡыусыһы Илнур Ғәбитов, "Башҡортостан шарттарында - үҫемлекселек"тә - Бөрйән районының Яуымбай мәктәбе уҡыусыһы Дилиә Ғиззәтуллина, "Зоология һәм ветеринария" номинацияһында - Благовещен районы Үрге Изәк ауылы мәктәбе уҡыусыһы Лира Закирова, "Ауылым уңғандары" номинацияһында Благовар районының Һарайлы мәктәбе уҡыусыһы Айнур Ибраһимов, "Ҡортсолоҡ һәм бал биреүсе үҫемлектәр" номинацияһында Бишбүләк районы Бишбүләк ауылының 2-се мәктәбе уҡыусыһы Елизавета Нестерова, "Тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау" номинацияһында Сибай ҡалаһының Рамазан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейы уҡыусыһы Лия Насипова беренсе урын яуланы.

Конференцияла ҡатнашҡан барлыҡ уҡыусылар ҙа саранан илһам алып, күтәренке кәйеф менән таралышты. Баланы мәктәп эскәмйәһенән үк ер хужаһы, ил хужаһы итеп тәрбиәләү ошондай сараларҙан башлана икәнен аңлап, конкурсты киләсәктә лә дауам итергә һәм уны Башҡорт дәүләт аграр университеты, БР Ауыл хужалығы министрлығы менән берлектә үткәреү зарур, тигән ҡарарға килелде. Шулай уҡ "Ер хужаһы" конференцияһының эмблемаһына конкурс та иғлан ителде.

**Рифат ӘЙҮПОВ,**
**Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының фәнни-эштәр буйынса директор урынбаҫары.**



ТУҠТА, МӘЛ!

**Байрам алды көндәрендә үк баш ҡалалағы Еңеү паркында оло йәнлелек күҙәтелде. Парадка әҙерлек үткән һалдаттар, хәрби курсанттарҙан тыш, батырҙар һәйкәлдәренә сәскәләр һалыусы төрлө хеҙмәт коллективтары вәкилдәре ағымы бер минутҡа ла туҡтаманы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары ла ошо төркөмдө тулыландырҙы.**



*Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары.*



*Был ветерандар - Н. Дәүләтов, К. Сафиуллин һәм А. Романов Илештән килгән.*



*Ғафури районы Үтәк ауылынан һуғыш ветераны Әнүәр Иманғолов.*



## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Баш ауыртһа...

❖ Ҡапыл ғына баш ауыртһа, 1,5 стакан ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ укроп төнәтергә һәм бер тәүлек буйы эсергә.

### Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы тәбиғәт миҙгеле алышынған һайын үҙгәреп тора. Ҡан баҫымы күтәрелһә, сөгөлдөр, кишер, әсе торма (черная редька) һуттары, бал ҡушып болғатып, көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаны 2-3 ай дауам итәһең. Ҡатнашманы ҡараңғы, һалҡын урында һаҡларға.

### Псориаз

❖ Псориаз да яҙ "терелеүсән", ул саҡта 6 грамм йомортҡа ағы, 3 грамм бал, ярты ҡалаҡ ҡанлы үлән (чистотел) онтағы, 80 грамм медицина солидолы (дарыухананан алырға) һәм балалар өсөн тәғәйенләнгән 50 грамм кремдан май яһап һөртөргә.

### Аяҡ кейеме лә зыянлы

❖ Күп аяҡ кейемен сит-ят илдәрҙән индерәләр, уларға төрлө химик матдәләр ҡушып эшләнә. Шуның һөҙөмтәһе булып яман шеш сирҙәре, баш ауыртыуы, зиһен тарҡалыуы тора. Аяҡ кейемен ялан аяҡҡа киймәгеҙ.

### Һалҡын тейгәндә

❖ Яҙғы көн йылы тип, кейенмәй йөрөүселәр, ғәҙәттә, һалҡын тейҙерә. Был саҡта мунсала тирләргә һәм йүкә сәскәһе һалып бешерелгән сәй эсергә, үтәләй өргән елдән айырыуса һаҡланырға кәрәк.

### Бронхит

❖ Һары һыулы яҙ етһә, бронхит сире көсәйә. Был мәлдә һуған ашарға һәм уның шәкәрле һутын эсергә кәрәк.

### Варикоз

❖ 1 ҡалаҡ кипкән кесерткән сәскәһенә 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәткәс, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Ҡапыл ҡолағына кемдер: "Ҡәйүм, тор!" тип ҡысҡырғанға, һикереп тороп, ҡурҡҡан йәнлек кеүек ситкә ырғыған. Шул арала тап ул ятҡан ергә снаряд килеп төшә, ағас селпәрәмә килә.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

## ЛӘЙСӘН ЯУҒАНДА

**Беренсе яҙғы ямғырҙы ләйсән ямғыры тибеҙ. Ләйсән аҫтында ялан баш тороп:**

*- Эй Аллам, эй, Тәғәләм,*
*Хәйерҙәрең менән!*
*Дәүләттәрең менән!*
*Бәхеттәрең менән!*
*Бәлә-ҡазаң булмаһын,*
*Ер әфәттәре менән килгән ямғыр бул, -*
тиһең. Боронғолар әйткән бит:
*- Ут әфәте - ел менән,*
*Ер әфәте - ямғыр менән,*
*Ҡатын әфәте - ир менән.*

Йәшен йәшнәгәндә лә ошо һүҙҙәрҙе һамаҡлайҙар, мәскәй осҡанда ла. Шуға өҫтәп доға ла уҡыйһың. Боронғолар: "Башығыҙ ауыртмай, тиҙерәк үҫерһегеҙ", - тип, ялан баш шул ләйсән ямғыры аҫтында торорға ҡуша торғайнылар.

## КӘКҮК КИЛЕҮЕ

**Тәүге кәкүк тауышын уң ҡолаҡ менән ишетһәң, гел яҡшылыҡ ишетәһең, һулы менән - насарлыҡты.**

Кәкүктең тәүге ҡыҫҡырыуын ишеткәндә салҡатан ҡолайһың да, ерҙе услап алаһың. Усыңа ни эләкһә, был йылда шул алдыңа киләһә: үлән сыкһа - яҡшылыҡҡа, йөн сыкһа - мал үрсей, ризыҡ сыкһа - ашлыҡ уңа, тупраҡ сыкһа - үлем була.

Кәкүктең тәүге сағырыуын ишеткәндә, ҡайһы ҡолаҡ менән ишетеүгә ҡарап, төрләсә юрайҙар. Әгәр кеше уң ҡолағы менән ишетһә - килешә. Тауыш арттан ишетелһә, кеше һөйләй йә ғүмерең ҡыҫҡа була. Кәкүк тауышын ишеткәс тә, тауыш килгән яҡҡа ҡарап, өс тапҡыр тәғәрәргә кәрәк. Һәр осраҡта ла шулай итһәң, килешә. Кәкүктең тәүге тауышын ишеткәндә:

*- Тәнемдең һаулығын бир,*
*Йәнемдең һаулығын бир.*
*Тәнемдең зәкәтен бир,*
*Илдең именлеген бир,*
*Күпте күрҙем. Алда ла*
*Тағы ла күрергә,*
*Насип булһын күрергә, -*
тип, ҡайҙа торһаң - шунда, ҡайҙа ҡарап торһаң - шул яҡҡа ҡолап, тәғәрәп китеп, услап тупраҡ алырға. Шул тупраҡ бөтә рәнйеүҙәрҙән дә килешә. Уны тупһа аҫтына һалһаң, төрлө бәлә-ҡазаларҙан һаҡлай.

Кәкүк япраҡтан алда килһә, күк күкрәүҙән алда ҡысҡырһа, йыл насар килә. Кәкүктән алда тәүге күк күкрәһә, йыл яҡшы була. Күк күкрәгәндә, ер һелкенеп, балсыҡ таралып, үҫемлек үҫеүгә уңай була. Ундай йылда илгә ырыҫ килә. Башлап сағырған сағында кәкүк япраҡ ярмаған ағасҡа ултырһа, йыл ауыр килә. Йәшел ағаска ултырһа, йыл матур килә. Тәү башлап ҡысҡырғанда кәкүк ағастың аҫҡы ботағына ултырһа, йыш һәм оҙаҡ сағырһа, ул тиҙ һаҡауланмай. Шул йылды ямғыр мул була. Инде лә кәкүк, башлап ҡысҡырғанда, ағастың иң өҫкө ботағына ултырһа, ул тиҙ һаҡаулана - йәй аяҙ була.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

ХӘТЕРКИТАП

# ЯУ ЯЛАНЫ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ



**Атайым Ҡәйүм Ҡотлогилде улы Илбәков тураһында һүҙем. Ул фәһемле, матур, оҙон тормош юлы үтеп, яҡты иҫтәлектәр ҡалдырып, 94 йәшендә фани донъянан китте.**

Ихлас, күңелсәк, йор, тапҡыр һүҙле ябай кеше ине атайым. Уның ҡушаматтары күп ине. Кемгәләр ул - "Ҡыҙыл ыштан Илбәк", кемгәләр - "Койон", кемгәләр - "Ҡәйүм бай", кемгәләр - "немец Ҡәйүм", кемгәләр "Ҡәйүм мулла" ине. Ейәне, шуҡ малай Буранбай, теле лә асылып бөтмәҫтән: "Мөйәм ҡалт, ялтыл басыңды билеп тол әле", - тип шаярҡан. Һуңғараҡ мин атайыма арналған көйөмдә "Ялтыр баш Мөйәм ҡарт" тип ataным. Был атайыма тағылған һуңғы ҡушамат. Уны хәҙер бөтә Башҡортостан белә. Был көйгә бейеүҙәр һалына, ул йыр ҙа булып китте, ике тапҡыр клип төшөрөлдө. Көйө лә уның ырыҫлы, атайым ғүмере кеүек...

Ул етемлектә, малайлыҡта үҫкән. Бик теремек булған, яңылыҡҡа ынтылған, көслө йәшәү дәрте менән янған. Тормошто үҙ фәлсәфәһе менән, барлыҡ боролоштары, ҡыйынлыҡтары менән ҡабул итә белгән. Ул изгелеккә, кешелеклелеккә, мөғжизәләргә ышанып йәшәгән. Уның йәшәү дәүеренә Октябрь революцияһы, Беренсе һәм Икенсе Бөтә донъя һуғыштары, аслыҡ, репрессиялар осоро, байтаҡ боролоштар тура килгән. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларын һөйләгәне хәтерҙә айырыуса ныҡ уйылып ҡалған.

"Көнөң бөтмәгәс, йөрөйһөң инде, - ти ине ул уйланып ултыра биргәс. - Ниндәй генә ваҡиғалар кисермәнек һуғышта, шуныһы ғәжәп, бер үк тиерлек кешеләр иҫән ҡала инек. Старшина Селезнев, "котло" ҡаҙаҡ Дәүләтбай, Әбйәлилдән Әхмәт ағай, мин һәм тағы бер нисә кеше..." Атайым көслө рухлы, йылдам, бөрсәләй йылғыр булған, ҡайҙалыр тыуған яғынан алыҫта ятып ҡалырын башына ла килтермәгән. "Күптәр машиналар кузовында еңелсә кейемдә ятып барғанда һуғышҡа инмәҫ элек туңып үлделәр", ти торғайны ул. Ә атайым, өшөй башлаһа, машина кузовына тотоноп, йүгерер булған.

"Бер ваҡыт һалдаттарға нимәләр тараткандарын күреп, мин дә ҡулымды һуҙҙым, - тип һөйләй атайым.- Усымды асып ҡараһам, христиандарҙың тәреһен һалғандар. Ташламаным, кеҫәмә һалып ҡуйҙым. Кискеһен бер өлкән урыҫ ҡартының илап ултырғанын күрҙем. Таратҡанда уға тәре етмәгән, шуға ҡайғырған икән... Мә, тип, уға тәре һуҙғайным, әй шатланды, изге теләктәр теләне, хатта ҡулымды үбеп бөттө..."

Изге уйлы атайымды кешеләр рәхмәте лә ҡотҡарғандыр. Сөнки ысын мөғжизәле хәлдәрҙе лә күп күргән ул һуғышта.

Карантин ваҡыттары була икән яуҙа. Был саҡта ике яҡ та ярты сәғәт самаһы атышмай торорға тейеш. Дошман постары күренеп торғас, атайым бер йығылған ағас аҫтына ял итергә ятып торған. Бик арығас, шул арала ғына йоҡо ла баҫҡан кеүек булған. Ҡапыл ҡолағына кемдер: "Ҡәйүм, тор!" тип ҡысҡырғанға, һикереп тороп, ҡурҡҡан йәнлек кеүек ситкә ырғыған. Шул арала тап ул ятҡан ергә снаряд килеп төшә, ағас селпәрәмә килә, ер өңөлә. Шулай ул контузия ала, әммә иҫән ҡала, тик ҡолағына кем ҡысҡырғанын ғына аңлай алмай... Мөғжизә...

"Бер ваҡыт шулай күҙәтеү пунктына мендем дә, нимәлер һиҙенеп, тиҙ генә кире төштөм. Күреп тә өлгөрмәнем, минең артымса уҡ үнда бер иптәш менгән икән, шунда уҡ атып та төшөрҙөләр. Фашист снайперын миңә тоҫҡаған булғандыр ҙа, өлгөрмәгәс, күҙәтеү пунктына менгән икенсе кешегә атҡандыр", - ти атайым. Мөғжизә...

Белоруссияла, Литва һәм Латвияла алғы һыҙыҡта һуғышып, 1944 йылда атайым һәм тағы 14 һалдат әсирлеккә алына. Туҡмалыуҙан ҡан ҡоҫҡан һалдаттарҙы өс карапҡа тейәп, Гамбургҡа оҙаталар. Ләкин Порт-Эльба ярында фашист караптарын Англия самолеттары утҡа тота. Өс карапты икәүһе батырыла. Батмай ҡалғанында атайым да була. Мөғжизә...

Бер мәл атайымдың Хәйбулла районында йәшәгән туғандарына "Ҡәйүм Илбәков хәбәрһеҙ юғалды" тигән хат тапшыралар. Барлыҡ михнәттәрҙе бергә татып үҫкән бер туған ағаһы был ваҡытта, һыңар ҡулын юғалтып, госпиталдән өйгә ҡайтарылған була. Хатты алып уҡығас, ул уйланып тора ла: "Юҡ, Ҡәйүм үлмәйәсәк..." - тигән һүҙҙәр әйтә... Мөғжизә...

Берҙән-бер көндө фашистар әсир атайымды аяуһыҙ туҡмап, ҡанға батырып, үләнәнә инанып, кәүҙәһен дөйөм ҡәберлеккә сығарып ташлайҙар. Әсирҙәр көн һайын ошо ҡәбер соҡоро эргәһенән эшкә үтеп-сүтеп йөрөй. Соҡорҙа мәйеттәр менән бергә өс көн ятҡас, атайым иҫенә килеп, ҡыбырлағандай итә. Шул ваҡыт эштән ҡайтып барған әсирҙәр араһында Әбйәлилдән Әхмәт дуҫы уны күреп ҡала. Ул "котло" ҡаҙаҡ Ҡотлобай менән йәшерен генә барып, атайымды ҡағыҙ тоҡҡа урап һалып, лагерға кире алып ҡайта. Тәнендә йәне генә ҡалған Ҡәйүмде дуҫтары лагерҙағы берҙән-бер дауа - һейҙек менән дауалап, терелтеп, аяҡҡа баҫтырып алалар. Мөғжизә...

1945 йылда Англия һалдаттары Гамбургты азат итеп, совет тотҡондарын Америкаға тапшыра. Күп һалдаттар һатлыҡ исеме алыуҙан, Сталиндан, яҡташтары асыуынан ҡурҡып, сит-ят ерҙә тороп ҡала. Тик Ҡәйүм үҙенең һатлыҡ булмағанын иҫбат итеп, бөтә Европа аша йәйәү тиерлек үтеп, алты фронтташ дуҫы менән Башҡортостанға әйләнеп ҡайта. Мөғжизә...

Һуғыш тамуҡтарын үткән атайым кешеләргә һәр саҡ мәрхәмәтле булды. Дуҫын да, дошманын да яратты. Ваҡсылланманы, юҡ-барға бошонманы. Донъяға гел йылмайып баҡты, тыныслыҡҡа һөйөндө. Һуғыштан һуң өйләнгән әсәйебеҙ менән алты бала һөйөп үҫтерҙеләр. Һуғышҡа тиклемге ғаиләһендә тыуған балаларын да ситкә типмәй, берҙәй ҡарап кеше иттеләр. Ишле ғаиләнең ҡарар өсөн атай ихлас тырышты, эшләне. Ат булмағанда, үгеҙ екте. Көтөү көттө, яландар гиҙҙе, һаулығын нығытты. Ҡорт аҫыраны. Хуш еҫле бал, май ягылған әсәйебеҙ бешергән икмәк тәме әле лә тел осонда...

Атайҙың киң күңеллелеге фронтташ яугирҙар менән осрашҡанында ла күренә ине. Бер ваҡыт бөтә яугирҙар атайҙа ғына булған, Сталин портреты төшөрөлгән миҙалды тапты, фотоға төшкән. Баҡһаң, ул "Бөтәбеҙ ҙә был миҙалға лайыҡлы", тип, миҙалын кем һорай, шуға бирер тора икән.

Тора-бара атайымдың Ҡөрьән сүрәләрен, доғалар белеүе лә асыҡланды. Ауылдаштарын һуңғы юлға оҙатырға, яңы тыуған балаларға исем ҡушырға саҡыра башланылар. Үҙенең ишле балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә, хатта күп бүлә-бүләсәләренә лә исемде үҙе ҡушты. Шуға ла Ҡәйүм мулла булып йәшәп, үҙ үлеме алдынан йыназа уҡырға килгән хәҙрәткә ҡушылып, үҙенә-үҙе ясин сығып, матур итеп был донъянан баҡыйлыҡҡа күсте. Быныһы ла мөғжизә...

**Ишморат ИЛБӘКОВ,**
**ҡурайсы,**
**Башҡортостандың халыҡ артисы.**

✓ *Беҙгә уларҙың дошмандарына ҡаршы нисек теләп һәм ҡурҡыуһыҙ барыуын күреү бигерәк тә оҡшаны. Бөрйән бунты ваҡытында ҡырғыҙҙарҙан күргән яфалары арҡаһында дошманға ҡарата тыуған нәфрәт уларҙың ҡанына һеңгән.*



ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

**СССР-ҙы Бөйөк Еңеүгә алып барған иң ҡөҙрәтле көстәрҙең береһе, моғайын, халыҡтың рухи берҙәмлеге булғандыр. Гитлер Германияһы, һис шикһеҙ, коммунистик идеологияның ныҡлығы, кешеләрҙең аңлылығы менән дә ҡыйратылды. Ә радио халыҡты бына шундай идея-сәйәси юҫыҡта тәрбиәләүсе ҙур бер көс булды.**

# РАДИО ҺӘМ БӨЙӨК ЕҢЕҮ



Радио һуғыш йылдарында фронттағы яугирҙарҙы һәм тылдағы хеҙмәтсәндәрҙе бәйләүсе, ышаныс-өмөт уятыусы төп мәғлүмәт сығанағы була. Тылдағылар радио аша Ҡыҙыл Армияның ниндәй фронттарҙа хәрәкәт итеүен, ниндәй юғалтыуҙар кисереүен, еңеүҙәр яулауын, фронттағылар илдәгеләрҙең Еңеү өсөн ниндәй батырлыҡтарға ынтылыуын, ҡайҙа нимәләр етештерелеүен белеп тора. Шул уҡ радио аша фашистарға нәфрәт уятырлыҡ шиғырҙар уҡыла, йырҙар башҡарыла, көйҙәр яңғырай. Был тапшырыуҙар миллионлаған кешеләр йөрәгенә үтеп инә, яугир рухы, киләсәккә ышаныс уята.

Радио партия һәм дәүләттең халыҡ менән аралашыуҙағы иң ҡөҙрәтле сараһына әйләнә. Һуғыш йылдарында радиотапшырыуҙар 70 телдә һәм 28 сит телдә алып барыла. Башҡортостан Радио комитеты эфирҙа 56 минут ваҡыты биләй һәм шуның 30 минуты сәйәси темаларға арналһа, 26 минутында әҙәби-музыкаль әҫәрҙәрҙе тыңларға була. Һуғыш башланғандың беренсе ике айында ғына ла башҡорт телендә хәрби темаға арналған 60 тапшырыу эфирға сыға.

Һуғыш башланған саҡта илдә 11 мең трансляция үҙәге, 6 миллион самаһы трансляция нөктәһе һәм 1 миллионлап радиоалғыс була. Башҡортостанда иһә 1908 радиоалғыс, 48114 радионөктәһе булған 158 радиоүҙәк иҫәпләнә. Йылдан-йыл был нөктәләр арта бара. 1942 йылдың аҙағында инде улар һаны 50753-кә етә. Быларҙан тыш, һәр колхоз-совхоздың үҙ МТС-ы, радиоалғыстары була. Сәсеү-урыу мәлдәрендә баҫыуҙарға ла репродукторҙар ҡуйыла. Радио редакциялары хеҙмәткәрҙәре оператив һәм алһыҙ-ялһыҙ эшләйҙәр. Республика редакциялары тәржемәләргә ҙур иғтибар бирә. Һуғыштың тәүге 11 айында ғына ла 207 сәғәтлек тәржемә материал эфирға сығарыла. Үҙәк матбуғат мәҡәләләре, Совинформбюро мәғлүмәттәре, ТАСС телеграммалары, партия һәм идаралыҡ етәкселәре сығыштары халыҡҡа аңлайышлы булһын өсөн башҡортсаға тәржемә итеп тапшырыла.

Ауыл хужалығы алдынғылары хаҡындағы тапшырыуҙар бигерәк тә популяр була. Мәҫәлән, бер тапшырыуҙа Баймаҡ районының "Урал" колхозынан 92 йәшлек Шәриповтың 11 риҙуан, 50 ҡул тырмаһы, 50 пар тәртә, 4 бестарка яһауы, 6 лабогрейканы һәм 2 елгәргесте төҙөкләндереүе, бер айҙа 358 хеҙмәт көнлөк эш башҡарыуы өлгө итеп ҡуйыла.

Радио аша мөрәжәғәттәр ҙә күп яңғырай. Мәҫәлән, "Өфө районы колхозсы ҡыҙҙарынан Бөтә Башҡортостан ҡыҙҙарына тракторсылар һәм комбайнсылар курсына уҡырға саҡырыу", йә "Сталинградты һаҡлаусы Башҡортостан комсомолкаларынан республика комсомолдарына хат" һ.б. Дүртөйлө районы МТС-ның ҡатын-ҡыҙҙар бригадаһы бригадиры Ф. Ҡаһармpraneваның мөрәжәғәтенән һуң Башҡортостан буйынса меңәрләгән йәш колхозсы-ҡыҙҙар тракторсылар курсына уҡырға килә.

Шулай уҡ радио аша хат-хәбәрләшеү ҙә киң таралып китә. Гәзит-журналдарҙың тиражы кәмей, уны таратыу ҙа ауырлаша һәм уларҙың бурысын радио үҙ иңенә ала. Радиоға фронттан хаттар килә, уларҙы уҡып ишеттергәс, тылдағылар уларға яуап яҙа, ул яуаптар ҙа киң тыңлауға сығарыла. Шулай итеп фронт менән тыл араһындағы хат бәйләнешен дә үтәргә тура килә радиоға.

Шулай итеп, һуғыш йылдарында радио халыҡ өсөн алыштырғыһыҙ ярҙамсы ла, мәғлүмәт үҙәге лә, рухты күтәреүсе лә булып тора. Ул 1418 көн һәм төн бер туҡтауһыҙ тапшырыуҙар сығарып, совет илен Еңеү яҙына әйҙәй, яҡынайта. Уның ошо фиҙаҡәр хеҙмәтен юғары баһалап, 1945 йылда СССР Совнаркомы 7 майҙы Радио көнө итеп билдәләй. Тимәк, радио был абруйлы көнгә һәм халыҡ һөйөүенә лайыҡлы.

**Клара ӘСФӘНДИЙӘРОВА,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

# ИҢ КҮП ҺАЛДАТ - БАЙМАҠТАН



**Гитлер армияһының Советтар Союзына һөжүм итергә йыйыныуы хаҡында 30-сы йылдар аҙағында уҡ билдәле була. Әммә Совет дәүләте етәкселеге 1941 йылдың 14 июнендә радио аша, Германия менән беҙҙең ил араһында һөжүм итмәү тураһында килешеү төҙөлгән, тип сығыш яһап, халыҡты тынысландыра. Теүәл ете көндән Бөйөк Ватан һуғышы башлана.**

Һөжүм Советтар Союзынан киҫкен саралар талап итә. Шуларҙың иң тәүгеһе - Хәрби көстәрҙе туплау һәм һуғышҡа һалдаттар әҙерләү була. СССР Юғары Советы Президиумы 1941 йылдың 22 июнендә армияға мобилизациялау тураһында Указ сығара. Был Указға ярашлы, 23-36 йәшлек ир-егеттәр кисекмәҫтән хәрби комиссариаттарға барырға тейеш була. Райондарға һәм ҡалаларға телеграммалар ебәрелә. Кешеләрҙе һәм транспортты мобилизациялау пландары төҙөлә.

Республиканың Милли архивында һаҡланған документтарҙан күренеүенсә, Өфө һәм Ишембай ҡалаларында, Баймаҡ, Дүртөйлө һәм Хәйбулла райондарында мобилизация айырыуса тиҙ һәм ойошҡан рәүештә башҡарыла. Баймаҡ районы республикала һуғышҡа иң күп һалдат оҙатҡан төбәктәрҙең береһе. Был райондан яуға бөтәһе 16324 кеше китә, шуларҙың ете меңгә яҡыны әйләнеп ҡайта алмай.

Дошманға нәфрәт менән янған кешеләр, һуғышҡа алыуҙарын һорап, ҡала һәм ауылдарҙа асылған мобилизация пункттарына килә башлай. Тәүге өс көн эсендә генә Өфөлә йәшәүсе 1270, Стәрлетамаҡтан 500-ҙән ашыу кеше һуғышҡа китергә теләк белдерә.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында 30 июнгә тиклем 94 митинг, 85 йыйылыш һәм 27 мең 483 кешене йәлеп иткән 521 һөйләшеү үтә. Был митингыларҙа һәм йыйылыштарҙа барлығы 206 кеше сығыш яһай. 30 июнгә тиклем ҡала хәрби комиссариатына 380 ғариза бирелә.

1941 йылдың 1 октябрендә Дәүләт Оборона комитеты ҡарары менән 15 йәштән 50 йәшкә тиклемгеләрҙе хәрби уҡытыу башлана. Был курстарҙа автоматсылар, пулеметсылар, саперҙар, снайперҙар, элемтәселәр, шәфҡәт туташтары әҙерләнә, шоферҙар, санитарҙар өйрәтелә. Өфө, Белорет, Стәрлетамаҡ ҡалаларында осоусыға һәм парашютсыға уҡыталар. Республика йәштәре уҡытыу курстары өсөн 267 мең 700 ағас винтовка макеты, 14 мең 800 граната, 2 мең 500 сапер көрәге эшләй. 1942 йылдың аҙағына республикала 1624 уҡытыу пункты була. Унда 61 мең 573 кеше уҡып сыға. 1944 йылға тиклем бөтәһе ике йөҙ меңгә яҡын кеше хәрби уҡыу үтә.

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

29-сы числола, күреп-ҡарап сығыуға уңайлыраҡ булһын өсөн, Ирәмәл Тау ҡаршыһында туҡталдыҡ: әммә башҡорттарҙың ығы-зығы килеүенән беҙ ошо көндө ял итергә мәжбүр булдыҡ. Ул саҡта улар ҡайһы бер урындарҙа Яйыҡ линияһына үтеп инеүсе бунт күтәргән ҡырғыҙҙарға (ҡаҙаҡтарға. - **Ред. иҫк.**) ҡаршы сығырға йыйына ине. Ошо ваҡытта беҙ уларҙы үҙҙәренә хас булған яугир ҡиәфәтендә күрә алдыҡ. Уларҙың хәрби ополчениеһы бар яҡтан да казактарҙыҡына оҡшаш: кәрәк саҡта алыҫ юлға сығыр өсөн уларҙың һәр береһенең икешәр эйәрле аты һәм етерлек аҙыҡ запасы бар ине. Уларҙың төп ҡоралы - уҡһаҙаҡ һәм һөңгө; мылтыҡ һирәк кешелә генә була. Улар үҙ өйөрҙәрен тамғалар менән билдәләй һәм бөтөн эштәре казак уставы буйынса бүленә. Беҙгә уларҙың дошмандарына ҡаршы нисек теләп һәм ҡурҡыуһыҙ барыуын күреү бигерәк тә оҡшаны. Бөрйән бунты ваҡытында ҡырғыҙҙарҙан күргән яфалары арҡаһында дошманға ҡарата тыуған нәфрәт уларҙың ҡанына һеңгән.

Үҙҙәренең эштәрен тамамлағас, 29-сы числола башҡорттар беҙҙе Ирәмәл Тауға алып китте. Ул беҙгә 6 саҡрымдан да алыҫыраҡ түгел кеүек тойолһа ла, беҙгә 28 саҡрым ерҙән урап барырға тура килде: тау бар яҡтан да һаҙлыҡтар менән уратып алынғанлыҡтан, уға бары тау һырттары һәм урмандар аша урап барырға ғына мөмкин ине. Төрлө өс тау ошо исем аҫтында йөрөһә лә, уларҙың урталағыһы ғына Ирәмәл Тауҙың үҙе була. Тауға уның ҙур булмаған, әммә ҡуйы урман менән ҡапланған көнсығыш тарафынан менеүе уңайлы һәм артыҡ ауыр ҙа түгел. Был арауыҡ 300 сажин самаһы булыр. Был юлда бар ерҙә лә һыуы үтә күренмәле шишмәләр шарлап аға, улар һуңынан, бергә ҡушылғас, 15 саҡрымлап үтеүгә, Ағиҙелгә ҡойоусы, уғата тиҙ ағымлы һәм ярайһы уҡ киң Ағаҙыт һәм Әүнәт йылғасыҡтарын барлыҡҡа килтерә.

Ирәмәл Тау һырты киң һәм тигеҙ майҙан булып күренә: ул төшкөлөк яҡтан яҡын килеүсе Йүрүҙән һыуҙары менән йыуыла; төньяҡ тарафтан Ирәмәлдең түбәһе тип иҫәпләргә мөмкин булған бейек кенә тау күтәрелә. Уның бейеклеге йөҙ сажин самаһы, ул емерелеп төшкән тау таштарынан хасил булған: бөтә ҡалҡыулыҡ төрлө ҙурлыҡтағы квадрат таштар менән тулған. Тау түбәһе яҫы, әммә еүеш һәм һаҙлыҡлы; бар ерҙә лә һыу менән тулы соҡор-саҡырҙар күренеп ята. Төшкөлөк яғынан аҫҡа табан тау үҙенән махсус рәүештә айырып сығарған кеүек тойолған арҡыры вал ярты саҡрым тирәһендә ҡаршылағы Әүәләк тауы менән тоташа. Бөтә был арауыҡты батҡыл һаҙлыҡ биләй, уға ҡурҡмайынса аяҡ баҫырлыҡ та түгел, һәм бынан Ағиҙел йылғаһының төп сығанағы башлана.

**(Дауамы бар).**

***✓ Бөгөн кемдәр миллион һумлыҡ машиналарҙа йөрөй, ҡатлы коттеджарҙа йәшәй һәм аҡсаға ҡытлыҡ кисермәй, шулар һалым түләмәй. Ундайҙар бай булһа ла: "Нишләп мин дәүләткә түләргә тейеш һуң?" - тигән ҡараштa йәшәй.***

# ҺАЛЫМ АРҠАҺЫНДА

## Шулаймы,

**Һуңғы ваҡытта төрлө радиоканалдар, телевидение, матбуғат аша иң йыш яңғыраған төшөнсәләр араһында "кредит", "ипотека", "һалым", "коллекторҙар", "суд приставтары" тигәндәре лә бар. Әгәр ҙә был һүҙҙәр йыш яңғырай икән, күпселек халыҡтың көнитмеше ошо төшөнсәләргә бәйле ойошмалар һәм проблемалар тирәһендә барғанлығы ла аңлашыла. Суд приставтары Федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы етәксеһе Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ менән әңгәмәбеҙ тап шулар хаҡында бара.**

**Мәжит Ғафуриҙың "Беҙҙең нәмәләрҙе һатканда" тигән хикәйәһе революциянан алдағы ваҡиғаларға нигеҙләнеп яҙылған. Унда властарҙың недоимка (түләнмәгән һалым) өсөн ярлыларҙың аҡтыҡ әйберҙәрен өйҙәренән алып сығып китеп, баҙарҙа һатып, шуның иҫәбенә бурыстарын ҡаплауҙары хаҡында бара. Хикәйә шулай тамамлана: "... Ул ваҡытта кешеләрҙең ерҙәренә, килерҙәренә (бында "килем" хаҡында һүҙ бара - Ә.Ғ.-Ү.) ҡарап налог һалмайҙар ине. Ул ваҡытта ерҙәрҙе хәҙерге кеүек тигеҙләп бүлмәйҙәр ине. Ул ваҡытта байҙар кеҫәләренә ҡулдарын тығып, ярлыларҙың шулай ауырлыҡ күреүҙәренә көләп ҡарап торалар ине. Ул ваҡытта ярлыларға ла бер тигеҙ налог килә, улар уны түләй алмайҙар, шуның өсөн уларҙың аҡтыҡ кәзәләрен, һалып ята торған мендәрҙәрен, сәй эсә торған самауырҙарын, балтырған өйрәһе бешерә торған ҡаҙандарын ҡуптарып алып һата торғайнылар. Сөнки ул ваҡытта Совет власы түгел ине..."**
**Совет осоронда, шәхси милекселек булмағас, ябай халыҡ һалым түләүҙең ауырлығын ул тиклем үк кисермәне, икенсенән, халыҡ хужалығының һәр бер тармағы эшләгәс, кешеләрҙең барыһы ла эш менән мәшғүл булғас, илебеҙ бюджеты, асылда, дәүләт предприятиелары, күмәк хужалыҡ иҫәбенә тулылана килде. Бөгөн килеп, Мәжит Ғафури әйткәнсә, "Совет власы ла түгел", шул уҡ ваҡытта һалым түләү мәсьәләһе лә ҙур проблемаға әүерелде.**
**Шулай уҡ һуңғы ваҡытта Рәсәй буйынса коллекторҙар эшмәкәрлегенең негатив яҡтары ла күренде, һалым йыйыу һәм кредит түләү мәсьәләләре ҙур проблемаға әүерелде. Түләргә теләмәүселәр ҙә, түләй алмағандар ҙа бар.**
**Зариф Закир улы, һеҙ республикабыҙҙың суд приставтары эшмәкәрлеген ойошторған кешеләрҙең береһе булараҡ, ошо мәсьәләләргә нисек ҡарайһығыҙ?**

- Һалым йыйылырға тейеш, сөнки дәүләттең бюджеты һалымдан хасил була. Уҡытыусыларға, табиптарға, гөмүмән, бюджетҡа ҡараған тармаҡтарҙа эшләүселәргә - эш хаҡы, балаларға пособие һ.б. һалымдан түләнә. Былтыр ғына беҙҙең республиканың бөтә төр бюджеттарынан ауыл хужалығына ғына 28 миллиард һум ярҙам бирелгән. Шул уҡ ваҡытта бөгөн ауыл өйҙәренең байтағы иҫәптә тормай, уларҙың биләгән еренә, йорт-ҡаралтыһына документы юҡ. Шәхси ауыл хужалығы техникаһы менән дә шундай уҡ хәл күҙәтелә. Тимәк, кемдәрҙер һалым түләмәй, тигән һүҙ. Хәҙерге көндә ҡайҙалыр хеҙмәт итеп, эш хаҡы алыусылар һалым түләй. Был йәһәттән Мәжит Ғафуриҙың "килемдәргә ҡарап налог һалыу" тигәне менән килешергә кәрәк. Үкенескә күрә, беҙҙә 10 мең эш хаҡы алыусы менән 100 мең эш хаҡы алыусы бер үк процент менән һалым түләй. Миненсә, күберәк эш хаҡы алыусы күберәк һалым түләргә тейеш.

Икенсе мәсьәлә: әгәр ҙә Мәжит Ғафури хикәйәһенең синфи йөкмәткеһенә иғтибар итмәгәндә, һәр бер дәүләт һалым йыйылыу кимәле менән тере. Совет осоронда, һеҙ дөрөҫ әйттегеҙ, кеше көнө-төнө эш менән булды. Ул ваҡытта хатта эшләмәгән кешене язаға тарттырыусы, уны мәжбүр итеп эшкә ҡуша торған закон да булды, ҡайһы берәүҙәрҙе төрмәгә лә ултыртып ҡуя торғайнылар. Хәҙерге ваҡытта рәсми рәүештә ҡарағанда күпселек кеше бер ерҙә лә эшләмәй һәм уларҙың эш хаҡынан һалым да тотолмай. Иң ҙур проблема шунда: бөгөн кемдәр миллион һумлыҡ машиналарҙа йөрөй, ҡатлы-ҡатлы коттедждарҙа йәшәй һәм аҡсаға ҡытлыҡ кисермәй, шулар һалым түләмәй. Ундайҙар бай булһа ла: "Нишләп мин дәүләткә түләргә тейеш һуң?" - тигән ҡараштa йәшәй.

**Америкаға барып ҡайтыусы егеттәр ундағы тәртип тураһында аптырап һөйләгәйне. Әйтәйек, машинаңды ҡайҙалыр ҡалдырып оҙаҡлаһаң, камералар билдәле ваҡыттан һуң һиңә парковка өсөн шунсама сумманы түләргә тейешлегеңде белдереп, смс ебәрә. Унда төрлө һалымдарың, түләүҙәрең хаҡында туктауһыҙ мәғлүмәт килеп тора. Әгәр өс көн һуҙымында бурысыңды түләмәһәң, махсус хеҙмәттәр һине тотоп алып, төрмәгә бикләп тә ҡуялар. Беҙгә әле бындай тәртипкә өлгәшеү өсөн бик күп ваҡыт кәрәк буласаҡ. Шулай түгелме?**

- Әлбиттә, беҙ әле күптән түгел генә икенсе төрлө йәшәй башланыҡ. Германияла, мәҫәлән, һалым түләүсе кеше суд приставының күрһәтмәһен үтәмәһә, уны алты айға төрмәгә ябып ҡуйырға мөмкиндәр.

Яңыраҡ беҙҙә лә юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙған өсөн штрафты 20 көн эсендә түләһәң, сумманың яртылаш кәметелеүе хаҡында закон ҡабул ителде. Был ҡағыҙҙа водителдәргә штрафтарын үҙ ваҡытында түләргә өйрәтеү өсөн барлыҡҡа килде.

**Кредитҡа бәйле заманса мәҡәл барлыҡҡа килде. Ул да булһа, "Кредит ауыҙыңды яптыра", йәғни кредит түләгән кеше эш урынын юғалтмаҫ өсөн ауыҙын йомоп йәшәргә, етәкселеккә ярамһаҡланырға мәжбүр...**

- Ишеткәнем юҡ ине быға са. Был мәҡәл, бәлки, дөрөҫлөккә лә тап киләләр. Күптәр кредит мәсьәләһенә еңел генә ҡарай. Уның бит проценттары, санкциялары бар. Һуңғы ваҡытта микрофинанс ойошмалары үҙҙәре "Аҡса бирәбеҙ, бының өсөн паспорт та етә..." тип саҡырып тора. Шуға күрә, бындай ойошмалар өсөн түләү төп бурыстан дүрт тапҡырҙан да артыҡ булырға тейеш түгеллеге хаҡында быйыл 1 апрелдән үҙ көсөнә ингән закон ҡабул иттеләр. Быға тиклем түләү 100 - 200 тапҡырға артып киткәйне уларҙа. Аҡсаға мохтаждар был ойошмалар менән килешеүгә уҡып тормайынса ҡул ҡуйып отола. Гөмүмән, кредитын түләй алмағандар мәсьәләһе икенсе бер мөһим проблемаға барып ялғана. Бындай осраҡта банк түләүҙе законлы рәүештә поручителдән талап итә. Беҙҙә иһә поручитель булыуға еңел генә ҡарайҙар һәм ҡултамға ҡуялар. Бер банктан кредит алып, икенсе банктыҡын ҡаплап, түләүҙәрен поручителдәренә йөкләп, ҡасып йөрөгән алдаҡсылар ҡулына эләкмәҫ өсөн бик һаҡ булырға тәҡдим итәм. "Аҡсаны ҡул менән бирәһең дә, аяҡ менән алаһың" тигән әйтем юҡтан ғына тыумаған.

**Илебеҙҙә туктауһыҙ хаҡтар артҡан бер мәлдә һаман да эш хаҡтарына индексация яһалмай, көндән-көн фәҡирҙәр һаны күбәйә. Әйтәйек, эш хаҡтарын, социаль түләүҙәрҙе, пенсияларҙы ҡапыл йылдам арттырған осраҡта бюджет та ҡапыл тулыланмаҫ инеме ни? Белгестәр Рәсәй тарихында индексация мәсьәләһенең бындай ҡырҡыу торған сағын иҫләмәй...**

- Һеҙ әйткәнсә индексация яһалһа, һумдың хаҡы төшөп, инфляция башланыры көн кеүек асыҡ. Минең ҡарамаҡҡа, күпселек халыҡҡа ҡыйынға төшһә лә, Үҙәк банктың ныҡ тороуы яҡшы күренеш. Тап шуның арҡаһында беҙҙә инфляция әллә ни ҙур түгел. Әгәр ҙә донъя баҙарында нефткә хаҡ төшмәһә, индексация яһалыр ҙа ине. Беҙҙең республикала, мәҫәлән, хеҙмәтсәндәргә айлыҡ эш хаҡын, пенсияны ваҡытында түләү мәсьәләһе беренсе урынға ҡуйылған. Бында беҙ ҙә үҙ өлөшөбеҙҙе индерергә тырышабыҙ. Былтыр ғына беҙ бюджетҡа өс миллиардтан ашыу аҡса күсерә алдыҡ. Шул иҫәптән 845 миллион һумды республика бюджетына, 206 миллион һумды муниципаль бюджеттарға индерҙек. Беҙ элекке һалым полицияһының эшен дауам итәбеҙ.

**Белеүебеҙсә, предприятиелар эшселәренә эш хаҡы ла түләттерәһегеҙ. Һеҙ тағы ла ниндәй эштәр менән шөғөлләнәһегеҙ?**



- Бәлки, бында "Һеҙ ниндәй эштәр менән шөғөлләнмәйһегеҙ?" тигән һорау урынлы булыр ине. Һуңғы 5 йыл эсендә генә беҙ 142 мең кешегә 2 миллиард һумдан ашыу эш хаҡы ҡайтарып бирҙек. "142 мең" тигәнде 3-кә ҡабатларға ла кәрәктер, сөнки бында һәр кемдең ғаиләһе хаҡында һүҙ бара. Законһыҙ мигранттарҙы тыуған иленә оҙатыу эше менән дә беҙ шөғөлләнәбеҙ. Былтыр ғына республиканан 500-ҙән ашыу кешене иленә оҙаттыҡ. Унан тыш, республикабыҙҙа 155 суд бар. Ул судтарҙа беҙҙең хеҙмәткәрҙәр һаҡта тора. Былтыр ғына үҙебеҙ 2200 тирәһе енәйәт эше ҡуҙғаттыҡ, енәйәт ҡылып ҡасып йөрөүсе 338 кешене тотоп, полицияға тапшырҙыҡ. Бөгөн республикабыҙҙа 25 мең кеше үҙенең балаһын ҡарамай, алименттан ҡасып йөрөй. Шуларҙың 2500-е - ҡатын-ҡыҙҙар. Улар менән дә беҙгә эшләргә тура килә.

***Беҙҙең ил граждандарында законды үтәүгә ҡарата тәрбиә етешмәйҙер, тип уйлайым. Беҙҙең илдә коррупция, ришүәтселек көслө тибеҙ. Хәҙер күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ инде: кеше балаһын балалар баҡсаһына урынлаштырыу, юғары уҡыу йортона индереү өсөн дә ришүәт бирә. Бала аҡса түләп законды урап үтеү мөмкин булыуын күреп үҫә. Аҙаҡтан ул үҙе лә ришүәт түләй һәм ала башлай. Ҡытайҙа, мәҫәлән, коррупция өсөн үлем язаһына хөкөм итәләр. Беҙҙең илдә улай мөмкин түгел. Был хәлгә кәртә ҡуйыр өсөн иң тәүҙә балалар ришүәт биреүҙең һәм алыуҙың насар икәнлеген белеп үҫергә тейеш.***

**Хәйбулла районының Әбеш ауылында дәүләт милкенә ҡарата бик һаҡсыл ҡараш өлгөһө тураһында һөйләгәйнеләр. Революцияға тиклем мир эштәрен алып барыусы бер уҡымышлы заттың өйөндә ике шәм булған. Ул бер шәменә кәрәсиндә ҡаҙна иҫәбенә һалған, икенсеһен үҙе иҫәбенә яндырған. Шул ке-**

***✓ Бурыстары булғандарҙың сит илгә сығыуын сикләү законын беҙ сит илдәрҙән алдыҡ. Быйыл 15 ғинуарҙан бурысы булғандарҙың водитель танытмаһын ҡулланыуҙы сикләү тураһындағы документ үҙ көсөнә инде.***

# ДӘҮЛӘТ ТЕРЕ...

## Мәжит Ғафури?

**ше мир эштәрен башҡарғансы ҡаҙна шәмен яндырған да, эше тамам булғас, уны һүндереп, ғаиләһе мәнфәғәте өсөн үҙенең шәмен тоҡандырған. Хәҙерге көн күҙлегенән ҡараһаң, был хәл бик көлкө тойола. Ә бит был хәл мир, дәүләт мөлкәтенә шундайын ҡараштың, мөнәсәбәттең булғанлығын да раҫлай...**

- Был матур тәрбиә күрһәткесе. Тимәк, был уҡымышлы зат үҙ атаһынан шундай өлгө алған. Сөнки уландарға матур өлгө атайҙарҙан күсә. Минең атайым 57 йәшендә генә донъя ҡуйҙы. Ул да миңә: "Кешенекен алма, урлашма", тип әйтә торғайны. Мин 4 йәшемдән һыбай йөрөп, атайым менән көтөү көттөм. Тыуған ауылыбыҙ Ҡалмаҡтан 42 саҡрым алыҫлыҡтағы йәйләүгә барып, ҡыуыш ҡороп, иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем атайым менән көтөү көтөп ятtыҡ. Төндә ҡыуышыбыҙ янына айыу килһә, атайым: "Улым, ҡурҡма, айыу кешегә теймәй, ике аяҡлы айыуҙан ҡурҡ", - тип әйтер ине.

**Әгәр ҙә яҙмышығыҙ ауылға бәйләнгән булһа, ҡалаға уҡырға китмәгән булһағыҙ, бөгөн ауылдағы үҙегеҙҙе ниндәйерәк итеп күҙ алдына килтерер инегеҙ?**

- 1988 йылдың июнь айында мин армиянан ҡайттым да, атайым урынына көтөү көтөп йөрөйөм. Атайым мине шул саҡ, колхозда көтөүсе урыны бар, көтөүсе булып ҡал, тип өгөтләй башланы. Ә мин юрист булырға хыялланам. Әммә был хаҡта атай-әсәйемә әйтеп тормайынса, эшкә урынлашам, тип, баш ҡалаға юлландым. БДУ-ның юридик факультетына уҡырға инер өсөн бер урынға 14 кеше дәғүә итә ине. Ни өсөн юрист булырға ҡарар итеүемдең дә үҙенә күрә сәбәбе бар. Атайымдың көтөүендә берәй баш мал ятып үлһә, уның эш хаҡынан тотоп алып ҡала торғайнылар. Шул ваҡыт минең ныҡ йәнем көйә ине, юрист булһам, атайымдың гәйепле булмауын иҫбат итер инем, тип хыялландым.

Ҡыҫҡаһы, уҡырға индем. Әгәр ҙә ауылда ҡалған булһам, бөгөн хужалығыбыҙҙың рәйесе булыр инем, мин етәкләгән хужалыҡ иң алдынғыһы һаналыр ине. Сөнки мин ҡайҙа ғына эшләһәм дә, эшемдә еренә еткереп башҡарам.

**Эште еренә еткереп башҡарыу нисек була?**

- Ниндәй генә ҡаршылыҡтар осраһа ла, ниәтенде тормошҡа ашырыуҙыр, тип уйлайым.

**Ә "Эшләп булмай торған эштәр булмай, ул эштәрҙе эшләй алмаған кешеләр генә була" тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?**

- Сөнки бар эштәрҙе лә башҡарып була, әгәр ҙә кеше ниндәйҙер эште башҡарырға теләмәһә, сәбәп, һылтау эҙләй башлай. Минең иһә ғүмерҙә лә бер эшкә тотоноп, уны эшләй алмайынса ташлап ҡуйғаным булманы. Юрислыҡҡа уҡыйым, судья булам, тигән маҡсатым да тормошҡа ашты. Әлбиттә, әлеге урында эшләрмен тип уйламағайным, бында килергә күндерҙеләр. "Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй", тип өйрәтте атайым.

**Улығыҙҙа атайығыҙҙың ниндәй сифаттары бар?**

- Ул атайым кеүек кешегә ярҙамсыл. Мин бер нәмә күтәрә башлаһам, көсө етәме-юҡмы, килеп йәбешә һала, унда "үҙем" тигән ынтылыш ныҡ һалынған. Бер мәл һунарҙа йөрөгәндә ҡаршыбыҙға һыу ағып ятҡан тәрән йырын осрап, уны урап үтергә уйлағайным, улым: "Атай, ысын ир-егеттәр ҡаршылыҡтарҙан ҡурҡмай!" - тип әйтеп аптыратты...

**Беҙҙең илдә закондар үтәлеше граждандарҙың ғөрөф-ғәҙәтенә ҡағиҙә булырлыҡ итеп һеңдерелмәй. Шуға күрәлерме, беҙ күберәк закондарҙың "хоҡуҡ" өлөшөнә иғтибар итеп, "бурыс" тарыбыҙҙы онотоп ебәрәбеҙ. Америкала булыусылар был илдәге граждандарҙың закондарҙан ҡурҡыуы арҡаһында уны тайпылышһыҙ үтәп йәшәүҙәрен бәйән итә. Ни өсөн беҙҙә закондар үтәлмәй тип уйлайһығыҙ?**

- Армияны һанамағанда, мин 28 йыл ошо системала эшләйем. Беҙҙең ил граждандарында законды үтәүгә ҡарата тәрбиә етешмәйҙер, тип уйлайым. Беҙҙең илдә коррупция, ришүәтселек көслө тибеҙ. Хәҙер күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ инде: кеше балаһын балалар баҡсаһына урынлаштырыу, юғары уҡыу йортона индерер өсөн дә ришүәт бирә. Бала аҡса түләп законды урап үтеү мөмкин булыуын күреп үҫә. Аҙаҡтан ул үҙе лә ришүәт түләй һәм ала башлай. Ҡытайҙа, мәҫәлән, коррупция өсөн үлем язаһына хөкөм итәләр. Беҙҙең илдә улай мөмкин түгел. Был хәлгә көртә ҡуйыр өсөн иң тәүҙә балалар ришүәт биреүҙең һәм алыуҙың насар икәнлеген белеп үҫергә тейеш.

Америкала, Европала закондарҙы ныҡлы күҙәтеү ҡағиҙәһе йөҙәр йылдар буйына эшләй. Беҙ иһә һаман да совет осороноң инерцияһы буйынса йәшәйбеҙ, үҙгәрештәр яйлап булһа ла бара. Тиҙҙән, 8-12 июндә, Өфөлә суд приставтары эше буйынса халыҡ-ара конференция үтәсәк. Унда утыҙ илдән вәкилдәр ҡатнашасаҡ. Улар араһында Израиль, Германия, Финляндия, Франция, Ҡытай, Монголия һ.б. дәүләттәрҙән коллегаларыбыҙ менән тәжрибә уртаҡлашасаҡбыҙ. Мәҫәлән, бурыстары булғандарҙың сит илгә сығыуын сикләү законын беҙ сит илдәрҙән алдыҡ. Быйыл 15 ғинуарҙан бурысы булғандарҙың водитель танытмаһын ҡулланыуҙы сикләү тураһындағы документ үҙ көсөнә инде, бөгөн 3 мең кешегә ҡарата ошондай сикләү ҡулланылды ла инде.

**Тағы ла ниндәй илдәрҙең закондары беҙгә өлгө була ала?**

- Закондарҙың иң ҡатыһы Израилдә. Германияла ла закондар бик ҡаты. Мәҫәлән, граждандың һалым буйынса ниндәйҙер бурысы бар икән, ул суд приставын саҡырып ала ла, уға бар мөлкәтенең исемлеген яҙып бирә. Әгәр ҙә ниндәйҙер мөлкәтен исемлеккә индермәһә, пристав уны төрмәгә бикләргә хоҡуҡлы. Белоруста ла закондар ҡаты ғына.

**Милли йолалар кеше яҡшы ғәмәлдә ғәҙәтенә әйләндерһен тигән маҡсатты алға һөрә. Уның механизмы бик ябай ғына: бер тапҡыр башҡарылған яҡшы эш - ғәмәл, ике тапҡыр башҡарылғаны - ҡылыҡ, ҡырҡ көн башҡарылғаны - ғәҙәт, йыл буйы үтәлгәне - холоҡ, ғүмер буйы күҙәтелгәне - яҙмыш. Кешенең ниндәйҙер яҡшы эште башҡарыуын уның ғәҙәтенә, холҡона әүерелдергәндә күп кенә проблемаларыбыҙ үҙенән үҙе хәл ителер ине кеүек. Шулай түгелме?**

- Бында бер һүҙ менән генә яуап биреп булмайҙыр. Минең ҡарамаҡҡа, тағы ла ҡабатлайым: һәр нәмә тәрбиәнән килә. Ҡайһы бер ауылдарҙа эскелек кешеләрҙең һеҙ әйткән ғәҙәтенә әүерелгән. Уларҙа, күрәһең, яҡшы тәрбиәселәр юҡтыр. Тәрбиәселәр, тигәндә, ауылдың абруйлы кешеләрен, дин әһелдәрен, лидерҙарын күҙ уңында тотам. Минең ҡартатайым, мәҫәлән, биш ауылға мулла булып торған. Уның янында яман ғәҙәт ҡылырға ҡурҡҡандар. Эскән, тәмәке тартҡан кешеләр уны урап үтергә тырышҡан. Уға берәү ҙә ҡаршы һүҙ әйтә алмаған, сөнки барыһы ла уның ошо ауыл кешеләрен хаҡ юлға баҫтырыр өсөн шулай ҡаты булғанын аңлаған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошондай тәрбиәселәр ҙә, күркәм йола-ғәҙәттәр ҙә юғалыбыраҡ тора шул хәҙер. Әммә тырышҡанда уларҙы яңынан ҡайтарырға була, тип уйлайым.

**Ҡасандыр армияға бармаған егеткә ҡыҙҙар ҡарамаҫ ине. Бөгөн мөнәсәбәт үҙгәрҙе. Миңә ҡалһа, армияға барған кеше 10-15 йылда ала торған тәжрибәне, тормош һабағын ике йылда үтә. Һеҙҙең был хеҙмәткә мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

- Малай саҡта һабантуйҙағы бәйгелә еңеп сығып, район үҙәгенән һыбай ҡайтып килгәндә, йығылып, аңымды юғалттым. Шунда билемдә ауырттырҙым. Дауаланып йөрөнөм һәм көҙөн тиҫтерҙәрем менән армияға китә алманым. Бик ауыр булды, хатта кеше күҙенә күренергә ояла инем. Яҙғы саҡырылыу мәле еткәс, табиптарҙы нисек алдарға икән тип баш ваттым. Амбулатория картаһында травма алыуым хаҡында яҙып ҡуйылған бит инде. Комиссияға барғас, йәшереп кенә был хаҡта яҙылған биттәрҙе ҡуптарып алып ырғыттым. Шулай комиссиянан үтеп китеп, армияға алындым. Монголия менән Ҡытай сигендә хеҙмәт иттем. Тәүҙә отделение командиры, аҙаҡ взвод командиры урынбаҫары булдым. Армия миңә күп нәмә бирҙе, физик яҡтан да, рухи яҡтан да нығындым. Юрист булам тигән хыялым тағы ла көсәйҙе. Был аңлашыла ла: ҡырҡ ата балаһы хеҙмәт иткән армияла күңелһеҙ хәлдәр менән дә осрашырға тура килде.

**Һабантуйҙа бәйгелә мин дә атта сабыша торғайным. Был тойғо миңә таныш. Бер генә секундҡа шул мәлегеҙгә ҡайтығыҙ ҙа, иҫләгеҙ: бына һеҙҙең атығыҙ алға сыҡты, финиш алыҫ түгел - шул саҡта ниндәй тойғолар кисерәһегеҙ?**

- Был саҡта менгән атың менән бер йәнгә әүереләһең инде. Минең ҡартатайымдарҙың береһе 1812 йылда сотник булып һуғышта ҡатнашҡан, Парижға барып еткән. Ул Парижға ингәндә лә аты менән бер йәнгә әүерелдеме икән, тип тә уйлап ҡуям. Беҙҙең нәҫелдә, ғөмүмән, хәрби кешеләр күп. Бер туған ағайым, ике туған ағайым хәрбиҙәр, бер ҡустым юғары хәрби училище тамамлап, Өфөлә эшләп йөрөй, бер һеңлем Питерҙа Юғары хәрби космос училищеһында уҡый. Улымда ла хәрби тормошҡа ынтылыш көслө.

**Хәҙер ниндәй енәйәттәр күберәк ҡылына, тип уйлайһығыҙ?**

- Судья булып эшләгән саҡта урлашыуҙар күп була торғайны. Хәҙер ҙә шулайҙыр. Кешенең иң ҙур байлығы - уның ғүмере. Шуға күрә һәр заман өсөн дә иң ҙур енәйәт - кеше үлтереү. Бер кемдең дә икенсе кешенең ғүмерен ҡыйырға хоҡуғы юҡ. Минең ҡарамаҡҡа, беҙҙә закондар кешенең ғүмерен ҡыйыусыларға ҡарата йомшаҡ. Беҙҙә ҡайһы ваҡыт ғүмер ҡыйыусыларҙы биш-алты йылға ғына иркенән мәхрүм итеүҙәре мөмкин.

**Беҙҙең илдә үлем язаһы юҡҡа сығарылды. Быға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Әлбиттә, халыҡ-ара нормаларға тап килтереү йәһәтенән беҙҙә үлем язаһы юҡҡа сығарылды. Минеңсә, айырым осраҡтар өсөн үлем язаһы кәрәктер. Ни өсөн кәрәк? Әйтәйек, кемдәлер кеше үлтергән өсөн 20 йылға төрмәгә ултырттылар икән, ти. Был осраҡта төрмәлә ултырыусыны 20 йыл буйына үлтерелгән кешенең туғандары үҙҙәренең дәүләткә түләгән һалымы иҫәбенә аҫырай булып сыға. Был барыбер ҙә ғәҙел түгел, минеңсә.

**Әгәр ҙә кеше үлтереүсе ғүмере буйына ғазапланһа, ғазапланыуын матбуғат саралары аша йәмәғәтселеккә еткерһә, башҡалар был юлға бармаҫ ине бит...**

- Юҡ, мин һеҙҙең менән килешмәйем. Сөнки кеше үлтереүселәрҙе күп күрҙем һәм һәр осраҡта уларға: "Һеҙ үлтергән кеше төшөгөҙгә инмәйме?"- тигән һорау бирәм. Улар: "Юҡ, мин тыныс йоҡлайым..." - тип яуаплай. Һеҙ әйткән категория енәйәтселәр яңылышлыҡ менән, аффект хәлендә йә эскән килеш кеше үлтереүселәр. Ә бына яуыз ниәт менән алдан план ҡороп кеше үлтереүселәр выждан ғазабы кисермәй.

**Йәмәғәтселек хәстәре, эшегеҙгә бәйле мәшәҡәт арҡаһында шәхси мәнфәғәтегеҙҙе ҡорбан иткәнегеҙ булдымы?**

- Төрлөһө булғаны бар. Әйткәнемсә, мин бит бер эште башлаһам, аҙағынаса еткермәйенсә туҡталып ҡалмайым. Судья булып эшләгән саҡта өйләндем. Йома көндө беҙҙең никах, шәмбе - туй. Тап йомала кеше үлтереүгә бәйле ҙур эште ҡарап, никахыма ҡайтып етә алманым. Унда минең урынға ағайым ултырҙы ла, иртәгеһенә туйға саҡ ҡайтып еттем...

**Ҡыҙығыҙ Гөлсәрҙең, улығыҙ Уралдың сабый саҡтарында ниндәй ҡыҙыҡтары булды? Беҙ Гөлсәрҙең сәхнәләге уңыштарына һоҡланабыҙ...**

- Гөлсәр бәләкәй сағында балалар баҡсаһына барғыһы килмәй, иларға тотона торғайны. Әсәһе уға асыуланып, өндәшмәй йөрөһә, Гөлсәр: "Әсәй, ниңә миңә матур итеп ҡарамайһың?"- ти ҙә, тағы ла ҡысҡырыбыраҡ илай башлай. Хәҙер ул йырлай, илаҡ бала йырсы була, тигәндәре дөрөҫ икән.

Уралдың да мәҙәк кенә ҡылыҡтары бар. Мәҫәлән, ҡайһы саҡта Гөлназ кистәрен билемә массаж яһай. Шул саҡта Урал: "Әсәйем минең дә билемде ыуһын", - тип, мотлаҡ килеп ҡыҫыла. Мин: "Ул минең кәләшем бит, шуға миңә массаж яһай. Үҫкәс, өйләнгәс, һинең дә кәләшең шулай итер", - тиһәм, Урал: "Әйҙә улай булғас һинең кәләшең минең билемде ыуһын да, минең кәләшем һинекен ыуыр", - тип һаман бирешергә теләмәй. "Әгәр ҙә һинең кәләшең минең билде ыуырға теләмәһә?" - тип тағы ла бәхәс усағына утын өҫтәйем, ә улым: "Ыумай ҡайҙа барһын!" - тип кенә ҡуя...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Зариф Закир улының үҙе етәкләгән системала оҙайлы йылдар уңышлы эшләүенең нигеҙе уның законға тоғролоғонда, ил, дәүләт мәнфәғәтен беренсе урынға ҡуйып йәшәүендә, тиһәк, яңылышмаҫбыҙ. Республикабыҙ ошондай шәхестәребеҙ эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә һаҡланып килә лә инде.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Һалдат та яуапһыҙ ҡалманы, патрондарын атып бөтөргән карабинын йәһәт кенә яурынына элеп алды ла, ҡулын йоҙроҡлап летчикка табан һуҙҙы. Икеһе лә бер-береһенең ымын ап-асыҡ аңланылар былай…***






Ул самолетын ҡаты үкертеп, ҡояшҡа табан күккә үрәпсетте. Был алым һауалағы алыштарҙа ҡулланылған иң хәтәр төр - ҡояш яғынан һөжүм. Самолет үҙенең дошманына тап ҡояш яғынан һөжүм итә. Ҡояштан күҙе сағылған дошманы, самолеттың үҙен дә абайламай, ҡайһы алыҫлыҡта икәнен дә самалай алмай... Был алым, ғәҙәттә, ике самолет араһындағы алышта ҡулланыла. Әммә тиҙерәк эшен тамамларға ашыҡҡан Ганс өсөн быныһы ғына ваҡ мәсьәлә булып тойолдо.

Һибәтулла кәйелеп үтеп киткән дошман самолетының үҙ эшен аҙағынаса еткермәйенсә китмәйәсәген аңланы. Бағанаға бәрелә яҙып осоп үткән самолеттың тәҙрәһенән үҙенә тишә ҡарап үткән немец летчигының күҙҙәрендә үҙенең үлем ҡарарын уҡыны ул. Кәйелеп китеп, туп-тура күккә сөйөлгән дошманының тактикаһын да аңлап алды. Ул хәҙер нәҡ баш осо тәңгәлендә әйләнәсәк һәм... Бағана ышығы юҡҡа сығасаҡ. Һибәтулла тап баш осонда балҡыған ҡояшҡа табан ынтылған самолетҡа ҡарап алды ла, һикереп торҙо, ни эшләргә белмәгәндән, өҫ-башын ҡаҡҡылап алды. Күҙҙәрен ҡыҫып, ҡояш яҡтыһы түңәрәгендә геүләгән дошман самолетын төҫмөрләргә тырышты. Тирә-яғына күҙ һалды. Күҙ күреме ҡола-ялан. Исмаһам, ҡыуаҡ әҫәре лә күренмәй. Унда-бында баш ҡалҡытырға ҡурҡып ятҡан һалдаттар. Кемеһе тере - кемеһе үле... Беленмәй.

Һибәтулла үҙен ҡорбан итеп һайлаған дошманының тейешле бейеклеккә етеп, таш кеүек үҙенә ябырылыуына тиклем күпме ваҡыт ҡалғанын самаларға тырышты. Ҡапыл күңелен һиллек тыныслығы биләп алды... Үҙенең нимә эшләргә тейешлеген тойҙо... Сит ерҙә, ҡола ялан уртаһында һерәйеп торған бағана төбөндә яңы 19-ҙын тултырған, йәмле урманлы, хозур Һаҡмар буйында тыуып үҫкән ябай башҡорт егете һәм бөтә Европаны теҙ сүктергән дәһшәтле герман армияһының утын-һыуын кискән, иң алдынғы хәрби самолетта ултырған немец летчигы Ганс. Осрашыр нөктә тап ошонда... Һибәтулла яурындарын ҡуҙғатҡылап алды, үҙенә хәҙер ҡамасау ғына булған һалдат тоҡсайын сисеп, бағана төбөнә ҡуйҙы. Башын эйә биреп, күккә, өҫкә ҡарарға бирмәгән каскаһын һалып, тоҡсайы өҫтөнә ҡуйҙы ла, карабинын ҡулына алып, ситкәрәк сығып, аяҡтарын кирә баҫып, күккә текәлде.

Беренсе герман һуғышы яугиры булған атаһы Ғиниәтулланың улын оло яуға оҙатҡанда әйткән һүҙҙәрен иҫләне:

- Улым, һуғыш ул етеҙҙәрҙе ярата, кем алдан мәргән атып өлгөрә, шул тере ҡала. Ятып ҡалғансы, атып ҡал.

Һибәтулла көрһөнөп ҡуйҙы. Их, ҡана ла һуң фриц менән ерҙә, икеһе бер кимәлдә осрашһа, ул да йәйәү, мин дә...

Самолеттың үкергән тауышы яҡынлаша башлауын тойған Һибәтулла бер мәлгә ике күҙен дә сытырҙатып йомоп, асып алды ла, карабинын ипләп кенә яурынына терәне һәм нәҡ күҙ сағылдырып балҡыған ҡояш нурына ышыҡланып өҫтөнә ябырылған ҡорос ҡоҙғонға тоҫҡап, дөп-дөп килтереп, ҡалған дүрт патронын оҙатты... Шунан, дошманына тоҫҡаған карабинының прицелы аша ҡояштың нәҡ уртаһынан үҙенә табан таш кеүек атылған ҡара нөктәнең ҙурайғандан-ҙурая барыуын күреп, урынында ҡатып ҡалды...

Хәҙер пулемет үлемесле пуляларын ҡола ялан уртаһында бер үҙе аяҡтарын кирә баҫып торған Һибәтуллаға яуҙырасаҡ... Самолет яҡынайған һайын Һибәтулланың күҙҙәре ҙурая барҙы...

Бына хәҙер... Хәҙер... Юҡ... Уның бер ҙә үлгеһе килмәй... Уның өҙөлөп һағынған Һаҡмарын, ата-әсәһен, тыуған өйөн тағы бер генә булһа ла күрмәйенсә... Ҡолас кирәп танһығы ҡанғансы бесән сапмайынса... Үҙенең баҫалҡылығы арҡаһында бер генә тапҡыр ҡосаҡлап үбеү түгел, ҡуйынына ла ҡағылып ҡарамаған һөйгән ҡыҙының күҙҙәренә булһа ла бер тултырып ҡарамайынса...

Юҡ, уның үлгеһе килмәй ине... Һибәтулла ҡояш эсенән үкереп үҙ өҫтөнә килгән дошманынан күҙҙәрен алмайынса, таш һындай ҡатып ҡалды һәм... көттө.

Ганс үҙенең ҡорос машинаһын кәрәкле бейеклеккә күтәргәс, уң ҡанаты яғына ауыштырып, кире ергә табан борҙо ла туп-тура аҫҡа атылды. Былдай атаканан һуң дошманының ҡотолорға бер әмәле лә булмаясағын белгән летчик ниндәйҙер тантаналы күңел күтәренкелеге кисерҙе. Ул үт кеүек туп-тура ергә атылыуысы самолетының үкереп эшләгән моторына ҡушылып, йырлап уҡ ебәрҙе. Прицел түңәрәктәре аша нәҡ үҙ тәңгәлендә нөктә генә булып күренгән бағананы эҙләп тапты.

- Әһә, теге һалдат та шунда ситтәрәк баҫып тора... Ә ниңә ҡасмай ул?..

Ҡулдары менән баштарын ҡаплап, ялан буйлап улай-былай югерешкән һалдаттарҙы күп күрҙе ул... Күп ҡырҙы... Ҡыҙыҡ бит... Хас та сысҡандарҙы ҡыуған бесәй... Броня тәҙрәһенең сыҡ-сыҡ итеп алыуын абайлаған Ганс йылмайып ҡуйҙы. Ха-ха, етмәһә, атып маташа! Таш менән танкка бәрней ҙә, мылтыҡтан ҡорос менән ҡапланған самолетҡа ат... Нәтижәһе бер уҡ... Ярай, тиҙерәк эште тамамларға ла... Немец летчиге прицел түңәрәген нәҡ ерҙә баҫып торған һалдатҡа тоҫҡаны... Пулялары кеше кәүҙәһен нисек өҙгөләйәсәген тойоп, пулеметтарының гашеткаһына баҫты... Әммә самолеттың кабинаһын һелкетеп дөкөлдәгән таныш тауыш ишетелмәне. Немец летчигы әсе һүгенеп, ҡабат-ҡабат гашеткаһын баҫҡыланы, әммә патрондары бөткән пулеметтар өндәшмәне. Самолет туҙан туҙҙырып, пропеллерҙары менән ергә ана тейәм, бына тейәм тигәндә, киренән күккә күтәрелде. Ганс яландың икенсе башына барып, самолетын үкертеп әйләнеш яһаны ла, иң тәпәш түбәнлектә, бағана төбөндә баҫып торған һалдат янынан осоп үтте. Ул үҙендә әллә ниндәй хистәр тойҙо... Патрондары бөтөү сәбәпле генә иҫән ҡалған һалдатҡа ҡарата бер ниндәй ҙә дошманлыҡ тойғоһо һиҙмәне... Үҙенең һуғыштан да, үлемдән дә, кемдәндер кемгәлер дошман булыуынан да, ут сәсеп йөрөгән дуҫ егеттәренең дошмандар бәреп төшөргәндә самолеттарында аҡырып-аҡырып "Әсәй!" тип ҡысҡырып көлкүмергә әйләнгәндәрен күрепишетеүҙән дә арығайны... Һәр осошоноң һуңғыһы булыуы мөмкинлеген тойоп, ерҙән айырылыу ҙа, ай-һай, еңел түгел шул...

Ганс бағана төбөндә баҫып торған һалдаттың йөҙөн ап-асыҡ күрҙе. Уларҙың ҡараштары осрашты.

- Ярай, бәхетең бар икән, икенсе тапҡыр ҡотола алмаҫһың! - тип ҡысҡырып, немец летчигы һалдатҡа йоҙроҡ менән янаны.

Һалдат та яуапһыҙ ҡалманы, патрондарын атып бөтөргән карабинын йәһәт кенә яурынына элеп алды ла, ҡулын йоҙроҡлап летчикка табан һуҙҙы. Икеһе лә бер-береһенең ымын ап-асыҡ аңланылар былай... Немец самолеты ер һелкетеп үкереп, офоҡ һыҙығына табан юнәлгән иптәштәре артынан юл алды...

Быуыны таралған Һибәтулла аяҡтарын саҡ һөйрәп, бағана төбөнә барып, арҡаһын бағанаға терәп ултырҙы. Аяҡтарын һуҙып ебәрҙе. Шунда ғына уң аяғындағы итегенең үксәһенән сылғау киҫәктәре һәлберәп сығып торғанын абайланы. Тиҙ генә итеген һалып, сылғауын һүтеп ебәрҙе. Ғәжәп, аяғында бер һыҙырылған урын да күренмәй, ә итек табанының яртыһы йолҡолоп сыҡҡан. Шул мәлдә яраланған уң ҡулын түштәренә ҡуша ҡыҫып тотҡан Семен аһ та аһ килеп уның янына сүгәләне.

- Ну, Таулбаев, право дело - ты в рубашке родился! Ай да молодец! - тип Һибәтулланың ҡул башына һуғып алды.

Шунан Һибәтулланың ялан аяҡ ултырыуына иғтибар итте.

- Тейҙеме әллә? - тип һораны.

Һибәтулла, юҡ, тигәнде аңлатып, башын сайҡаны ла, йылмайып, кирза итегенең пуля йолҡҡолаған табанын күрһәтте.

Семендың төҫө үҙгәреп китте, ул алан-йолан ҡаранды ла, яҡын тирәлә кеше күренмәгәнлеген тойғас, өс тапҡыр суҡынып алды. Шунан Һибәтуллаға эйелеп шыбырҙауға күсте:

- Хибатка, һин үҙеңдең ниндәй бәхетле икәнеңде лә белмәйһең... Ну и повезло тебе... Это чудо...

- Самолеттан ҡасып, бағананы өйөрөлтөп, танауың менән ер һөрәме ней ул бәхет? Етмәһә, бына итекте лә әрәм итте...

- Да погоди ты! - Семендың тауышы, нисектер, ҡалтыранып сыҡты.

- Итек, имеш! Ана яланды ҡара, кемеһе ботһоҙ, кемеһе ҡулһыҙ, ҡайһыныһы башһыҙ. Күп егеттәрҙе ошонда ҡалдырабыҙ... Иртәгә лә... Иртәнән һуң да... Һуғыштың осо-ҡырыйы күренмәй... Ярай, Таулбаев, тыңла, - уның тауышы хатта тантаналы яңғыраны. - Ҡасандыр бер мәл һуғыш бөтәсәк һәм һин тере ҡалып, ул көндө күрәсәкһең, мәгәр бер кемгә лә был ваҡиғанды һөйләмә... Сөнки бөгөн үлем ғазраилы һине үксәңдән үпкән. Һин бәхетлеһең... Был яугирҙарҙың борондан һыналған фаразы һәм ул дөрөҫ!

Семендың тауышында көнләшеү өндәре лә юҡ түгел ине.

Унда-бында һалдаттар берәм-берәм ерҙән тороп, ҡағынып, ҡайнаша башланылар. Ғәжәп! Һибәтуллаға үҙенән башҡа берәү ҙә тере ҡалмаған кеүек тойолғайны. Көлөшкән тауыштар ҙа ишетелә башланы.

Махорка төтөнөнөң таныш тәмле еҫтәре танауҙы ҡытыҡлап ебәрҙе.

- Ну, боец, подъем! Киттек обозға, мин ҡулдағы яраны сырматып алайым, һинең аяғыңа кейергә лә берәй нәмә йүнләрбеҙ...

Егерме биш-утыҙ минуттан һалдаттар колонналарға теҙелеп, юл буйлап артабан ҡуҙғалдылар... Арттарынан туҙан бөркөп ҡалды һәм кире юлға ятты.

Ауыр ҡуҙғалдылар улар... Күптәренең бер котелоктан ашаған иптәштәре, бер һыныҡ икмәк менән һуңғы семтем махорка бүлешеп туғандарынан яҡын күргән дуҫтарының ғүмер юлдары ошо билдәһеҙ далала өҙөлдө...

...Ошо ҡола ялан уртаһынан ҡуҙғалып киткәндәрҙең бик аҙ ғыналары данлы, шаңлы 1945 йылдың туғыҙынсы майын күрә алды. Улар араһында Йылайыр районының Аралбай ауылында тыуып үҫкән, үксәһенән Ғазраил фәрештәһе үпкән гвардия старшинаһы, данлы 112-се гвардиялы башҡорт кавалерия дивизияһының яугиры, күп ордендар һәм миҙалдар кавалеры Тауылбаев Һибәтулла Ғиниәт улы ла бар ине.

Бөтә иғтибарын бағана төбөнә һыйынған дошманына туплап, был юлы эшен аҙағына тиклем тамамларға тырышып, алыҫтан уҡ пулеметтары менән ерҙе теткеләп килгән немец летчигы Ганс үҙенең броняле быяла менән ҡапланған кабинаһына нимәләр шаҡ итеп ҡалыуынан һиҫкәнеп, штурвалын үҙенә табан тарта биреп ҡуйҙы. Тыңлаусан самолет һауала осоп уйнаған ҡош балаһы кеүек, ҡапыл моронон күккә сөйөп алды. Әммә саҡсаҡ ҡына ситкә һикереп ҡуйыу ҙа Һибәтулла файҙаһына булды. Пулемет бер мәл генә туҡтап торған арала пулялар ямғыры ергә һылашып ятҡан һалдаттың аяҡ осонан башлап ҡына яуып үтеп китте. Һибәтулла ниндәйҙер хәтәр көстөң итеген йолҡоп алырҙай булып һуғылыуын тойоп, үҙенә пуля тейеүен аңланы. Ә был мәлдә һалдат мылтығының пуляһы броняның фонаренә тейеп, Гансты тертләтеп ҡуйҙы.

- 34-се, 34-се, прием... Базаға ҡайтырға... Базаға ҡайтырға...

Ганс лингофонын бер ҡулы менән тамағына ҡыҫты ла:

- Аңланым... Хәҙер... - тине һәм рацияһын һүндереп ҡуйҙы.

Ул үҙен оло турнирға сыҡҡан рыцарь итеп тойҙо. Ана, аҫта, ерҙә, уның дошманы ята, ә ул тевтон рыцарҙарының данлы батырлыҡтарын дауам итеүсе! Юҡ, ул был алышта еңеүсе булырға тейеш! Әлбиттә, Ганс үҙенең иң ныҡ ҡоростан эшләнгән хәрби штурмовикта ултырыуын да, ҡул аҫтында ике эре калибрлы пулемет һәм пушка булыуын да, ә ерҙәге дошманының биш патрон һыйышлы ябай карабинынан башҡа бер ҡоралы булмауын да иҫәпкә алманы.

(Аҙағы. Башы 18-се һанда).

✓ *Һәр рәссамдың үҙ Салауаты, тиҙәр, һеҙҙең дә күңелдәрегеҙҙә Салауат үҙенсә балҡыуына, һеҙҙең Салауатығыҙҙың үҙенә генә хас сифаттары булыуына ла шик юҡ.*



*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*




**Баймаҡ яғындағы был мәрәкәле хәлдәрҙе Икенсе Эткол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов һөйләне. Гәзит уҡыусылар был уҙаманды "СМС-әйтеш" конкурсының бер нисә тапҡыр еңеүсеһе Айыҭҡужа сәсән итеп тә белә.**

### Кишергә барыу

Беҙ бала саҡта өлкән ағай-апайҙар клубҡа киске уйынға сығыуҙы "вечерға барабыҙ" ти торғайнылар. Бер көндө апайым әхирәте Ф. апайға "вечерға барайыҡ", тип тәкдим иткән. Икеһе лә һауынсы булып эшләйҙәр ине. Кис етеп, апайым кейенеп-яһанып бөтөүгә, әхирәте һауынға кейгән резина итектә, билен таҫтамал менән быуып, халат кейеп, тоҡ тотоп, "Әйҙә!" тип килеп ингән. Апайым, аптырап, "Кайҙа йыйындың?" тип һорағас:

- Кишергә бармайбыҙмы һуң? - тип үҙенән һораған.

### Дөрөҫ яуап

Темәстә еңгәй тейеш кеше тап булды. "Килен нисек?" тип һорағайны: "Тыщы йомшаҡ, эсе йылымыс ҡына", - тип яуап биргәйнем, "Ярты аҡыл" тип асыуланды. Дөрөҫ яуап өсөн әрләндем. Киреһенсә, "тышы йылы, эсе йомшаҡ", тип алдашһам, маҡтар инеме икән?

### Етди һөйләшеү

Сибайҙан автобус менән Баймаҡҡа килеп төштөм. Бер танышым осрап, ҡайҙан килеүемде белеште.

- Сибайҙың тегеү фабрикаһына, яңғыҙ бисәләргә механик булып эшкә ялландым, - тип шаяртып ҡына яуап биргәйнем ул:

- Нисек түләйҙәр? - тип һораны.

- Һеҙәмтә буйынса, сәғәтләп түгел, - тип яуапланым.

- Дә, маҡтанырлыҡ түгел икән, - тине танышым үтә лә етди төҫ алып.

Шарҡылдап көлөп ебәрмәйенсә саҡ түҙҙем...

### Ташҡа үлсәйем

Хәкимйән ҡусты ҡайныһы менән бесән тейәйҙәр икән. Йөк бейегәйен киткән. Хәкимйән күтәреп бесән ташлаған һайын: "Хоҙай аҡыл биргәнсе, буй бирһәсе",- тип һамаҡлай, ти.

Ҡайныһы уны тыңлап йөрөгән-йөрөгән дә:

- Эй, кейәү, аҡылың да ташҡа үлсәйем инде, - тип ҡуйған.

Хәҙер икеһе лә мәрхүмдәр.

### Мин - шофер...

Әмир ағай бик мәрәкәсел кеше булды. Үҙе лә шаяртҡанды аңлай белде. Шофер булып эшләне. Көҙ көнө ярҙамға кешеләр алып килеп, үҙенең бесәнен тейәп алып ҡайтырға барғандар. Барып еткәс, ярҙамсылар тейәй ҙә башлаған. Ә ағай үҙе кабинала гәзит уҡып тик ултыра икән. Тейәүселәрҙең береһе: "Әйҙә, тейәргә, унда нимә ҡарап ултыраһың?"- тип ҡысҡырғас, "Мин - шофер", тип яуап биргән.

Үҙенә бесәнгә килгәнен онотҡан булғандыр инде...

### Ятып йоҡланым

Яҙғыһын Йылайыр районының Матрай ауылында йәшәүсе Хаммат ағайҙарға килдем. Ағай үҙе совхозда баш агроном булып эшләй ине. Сәсеү ваҡыты булғас, ағай иртә тора. Уның уянғанын ишетеп, мин дә тора һалып, янына килдем.

- Шунан, ҡустым, нисек йоҡланың? - тине ағай күтәренке кәйеф менән.

- Ятып, - тип яуапланым да, бер аҙ торғас өстәп ҡуйҙым. - Баҫып йоҡларға мин ат түгел дә инде...

### Бүре түгелмә?

Мин бәләкәй саҡта өлкәндәр һөйләй торғайны. Бер кешене икенсеһе урманда ҡурҡытмаҡ булған. Толобонон тиҫкәре яғын кейеп, тегенең юлына сыҡҡан. Униһы ҡурҡып, ағас башына менеп киткән дә:

- Хәснияр ағай, һин бүре түгелмә? - тип ҡысҡырған.

### Үҙең алдың бит

Бер ваҡыт Рауил ағайҙың шофер танытмаһын алып ҡалғандар. Икенсе юлы Баймаҡта шул уҡ милиционер, туҡтатып, танытмаһын һораған икән:

- Төнә үҙең алып ҡалдың бит, ниңә минән һорайһың? - тип яуап биргән.

- Машинаны ниңә танытмаһыҙ йөрөтәһең, улай булғас? - тип тағы ла бәйләнгән гаишник.

- Һе, машинаны танытма түгел, мин йөрөтәм бит, - тип һаман да ныҡышҡан Рауил ағай.

- Униһын күреп торам, ә танытмаһыҙ йөрөргә ярамағанлығын белмәйһеңме ни? - тип тағы ҡаҙалған юл хәүефһеҙлеге хеҙмәткәре.

- Беләм, әммә танытмамды төнә һин бит үҙең алып ҡалдың, - тип гаишникты тамам өнһөҙ иткән Рауил ағай.

### Ҡайһыныһын?

Ауылда булған хәл. Асыуланырҙар, исемдәрен яҙмайым.

Ике әшнә артығы менән баш төҙәтеп, береһе икенсеһенең сәсен алмаҡ булған. Ҡолағынын артын ҡайсылағанда яңылыш ҡолағын ҡырҡып ебәргән дә:

- Ҡолағыңды ҡырҡтым да ҡуйҙым, - тип аҡлана һалған.

- Ҡайһыныһын? - тип һораған сәс алдырыусы...

### Салауаттай була алмайыммы?

Был хәл элекке "Һәүәнәк" совхозының бер ауылында була. Белһәм дә, билдәле сәбәптәр арҡаһында, ауылдың һәм кешеһенең исемен яҙмайым.

Ул ағай көтөүҙән ҡайтһа, ҡатыны балаһын алып, әсәләренә ҡайтып киткән. Ҡатыны күрше ауылдыҡы икән. Ағай күп уйлап тормаған, атын менгән дә шул ауылға сапҡан. Барып ингән дә балаһын тартып алып, кире үҙ ауылына сабып ҡайтып киткән.

Көс структуралары менән килеп, баланы алырға иткәс, атай кеше уны бирергә теләмәй икән. Унан ни өсөн шулай ҡыланғанын һорағастар:

- Ниңә, әллә мин Салауат Юлаевтай була алмайыммы ни? - тип яуап биргән.

Тегеләр ни эшләргә лә белмәгән, имеш.

### Тишек тубыҡ

Магазинда салбар һайлайым. Һатыусы кейеп ҡарарға тәкдим иткәйне:

- Оялам, плавкиемдың тубығы тишек, - тип яуап бирҙем.

### Прогресс бар

Һикһәненсе йылдар. Хәкимйән ҡустыны яңғын һүндереүсе итеп ҡуйҙылар. Берҙән-бер көндө китапхана янып китте. Янғын булғанын Хәкимйән үҙе лә белмәй ҡалған. Икенсе көндө килеп, имен ҡалған стеналарҙы ҡарап торған да:

- Элек янғын булһа, бер нәмә лә ҡалмай торғайны. Мин эшләгәс, стенаһы ҡалған әле. Прогресс бар, - тип әйткән.

### Тубығыма ултыртайыммы?

Рауил ағай еңел машинаһы менән Баймаҡҡа барған. Ауылдаштарын да ултыртып алған. Баймаҡҡа етеп барһа, гаишниктар торған. Улар аҡса йөйә торған "туҡмас таяҡтарын" күтәрһә лә, туҡтамаған. Тегеләр артынан ҡыуа төшкәндәр. Артынан ҡыуып етеп, "Ниңә туҡтамаһың?" тип бәйләнгәстәр:

- Күрмәйһеңме ни, машинамда урын юҡ ине. Мин һине тубығыма ултыртып алайыммы? - тип яуап биргән ағай.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

# БАТЫР ЯУГИР...

## Салауат



**Һәр ижад - ул доға, тиҙәр. Бына шуның өсөн дә ижадсының үҙ әҫәренә һалған уй-хисен, әйтер һүҙен тойор өсөн күрер күҙ генә етмәй, күңел күҙе лә кәрәк. Шөкөр, беҙ донъяға ошолай күңел күҙе менән баҡҡан уҡыусыларыбыҙ менән бәхетлебеҙ.**

Совет һәм Рәсәй рәссам-графигы, РФ Рәссамдар берлеге ағзаһы Фәнил Шәймөхәмәтовтың "Ғүмер ағасы" картинаһы буйынса әүҙем генә фекерләшеп алдыҡ. Беҙҙең һәр ниәтебеҙҙе күтәреп алып, әйләнә-тирәбеҙгә юғары сәнғәт юғарылығынан ҡарап өйрәнәйек, тигән маҡсатыбыҙҙы урталаҡлашып, бәйгелә ихлас ҡатнашҡан уҡыусыларыбыҙға ҙур рәхмәт. Башҡорт халҡы, ғөмүмән, хис-тойғоға бай халыҡ, ошо асылыбыҙҙы яңынан асайыҡ әле үҙебеҙҙә бергәләшеп.

Фәнил Сафуан улы үҙе лә донъяға асыҡ ҡарашлы рәссамдарҙың береһе, уның ауыл, башҡорт йолалары, ябай, әммә ихлас кешеләр сағылған әҫәрҙәре лә көнкүреш кимәленән юғары күтәрелеп, фәлсәфәүи мәғәнәгә эйә булған картиналарға әүерелгән. Төҫлө линогравюра техникаһы - ул бик ҡатмарлы жанр, был йүнәлештә эшләүсе рәссамдар хатта Рәсәйҙә лә күп түгел. Шулай итеп, "Ғүмер ағасы" буйынса барған бәйгенең еңеүсеһе тип Мәләүез ҡалаһынан Фәүзиә Йәнтилина табыла. Уға рәссам ошо триптихтың "Салауат йыры" тигән картинаһын бүләк итә.

Ә конкурсты артабан да дауам итәбеҙ. Бөйөк батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуған көнө яҡынлаша. Тирә-яҡ ыуыҙ йәшел төҫкә ингәндә Салауат көндәрен үткәреүҙе гәҙәт иткән халҡыбыҙ, сөнки тап Салауат Юлаев беҙҙең рухыбыҙҙы күтәрә, батырлыҡҡа, яҡшылыҡҡа әйҙәй. Шуға был юлы уҡыусылар иғтибарына Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, СССР, Рәсәй рәссамдары берлеге, Рәсәй рәссамдары ижади берлеге ағзаһы, живопись, графика, монументаль сәнғәт төрҙәрендә танылыу яулаған Вәкил Шәйхетдиновтың "Яугир, шағир, башҡорттоң милли геройы" тигән картинаһын тәкдим итмәксебеҙ. Йылдар үтеп, батыр йәшәгән быуаттан йыраҡлаша барған һайын Салауаттың исеме лә, образы ла күтәрелә бара, шуныһы ғәжәп. Һәр рәссамдың үҙ Салауаты, тиҙәр, һеҙҙең дә күңелдәрегеҙҙә Салауат үҙенсә балҡыуына, һеҙҙең Салауатығыҙҙың үҙенә генә хас сифаттары булыуына ла шик юҡ. Вәкил Ғилем улы үҙенең һүрәт төшөрөү үҙенсәлеген заманса реализм тип атай. Уның картиналарында башлыса рухи донъя сағыла, шуға ла улар нескә, хисле ҡарашҡа тәғәйенләнгән.

Һүрәт тураһында фекерҙәрегеҙҙе ирекле рәүештә (мәҡәлә, һүрәтләмә, бер кәлимә фекер, риүәйәт, нәҫер, хикәйә h.б) беҙгә яҙып ебәрегеҙ. Конкурс эштәрен баһалағанда һүрәттең идея-тематик йөкмәткеһен, художестволы үҙенсәлеген, заман һулышын һынландырыуын ни рәүешле аса алыуығыҙға төп иғтибар биреләсәк. Хәйерле сәғәттә! Һеҙҙән хаттар көтөп ҡалабыҙ!

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

✓ *Күп тә үтмәй, миңә матур открытка менән яуап килеп төштө. Атайым 1943 йылдың 4 сентябрендә ауыр яранан санитар батальонында һәләк булған. Уны шул Большая Гомельша ауылы яланында күмгәндәр.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БҮЛӘК БИРЕҮ ҘӘ... һөнәр

■ Һауаның бысранызы һәҙәмтәһендә донъя буйынса йылына 3,3 миллион кеше ваҡытынан алда үлә. Ғалимдар 35 йылдан һуң был һан 6,6 миллионға етеүе ихтимал, тиҙәр. Бигерәк тә сәләмәтлеккә озон һәм диаметры 0,0025 мм булған бәләкәй өлөшсәләр насар йоғонто яһай. Экологтар билдәләүенсә, төрлө илдәрҙә һауа бысраныуының сәбәптәре төрлөсә. Һиндостанда, Ҡытайҙа, мәҫәлән, йорт хужалығында ҡулланылған усаҡтарҙан сыҡҡан төтөн, АҠШ кеүек алдынғы илдәрҙә автотранспорт һәм электр станциялары, Европала ауыл хужалығы арҡаһында зыян килтерелә. Көньяҡ-көнсығыш һәм көнбайыш Океания иҫәбенә был илдәрҙә ваҡытынан алда үлеү 2050 йылға йылына 6 миллионға тиклем етеүе бар. Ғалимдар ыңғай тенденцияларҙы ла билдәләгән, мәҫәлән, урман ҡырҡыу менән бәйле янғындарҙы иҫкәртеү үлем осраҡтарын кәметеүгә алып килгән. Урман ҡануниәте реформаһы һауала ваҡ өлөшсәләр тупланыуын 30 процентҡа кәметергә мөмкинлек биргән.

■ Халыҡ-ара табиптар коллективы Европалағы "йыуан" һәм "һомғол" милләттәрҙе атаған. Тикшеренеү барышында яҡынса 250 мең кешенең мәғлүмәттәре тикшерелгән. Ниндәйҙер милләттең уртаса буйы ни тиклем оҙонораҡ, улар шул тиклем һомғолораҡ икән һәм уларҙың тән массаһы индексы ла аҙыраҡ. Иң оҙон һәм һомғол тип скандинавия илдәре - Норвегия, Швеция, Дания табылған, испандар, итальяндар, португалдар, гректар - иң тәпәше. Ғалимдар билдәләүенсә, был генетик үҙенсәлектәр генә түгел (генетика климат факторҙары һөҙөмтәһендә формалаша), ә милли кухня йолалары, шулай уҡ экология ла йоғонто яһаған. Тикшереүҙәргә славян халыҡтары инмәгән.

■ Фруктозаны артыҡ ҡулланыу һимереү, Паркинсон ауырыуы, депрессия, биополяр тайпылыш менән бәйле 900-ҙән ашыу гендың әүҙемлеген үҙгәртә икән. Калифорния университеты ғалимдары ҡомаҡтарҙа һынауҙар үткәргән. Уларҙы башта лабиринттан сығыу юлын табырға өйрәткәндәр. Һуңынан алты аҙна һынауҙар үткән, ҡомаҡтарҙы өс төркөмгә бүлеп, төрлөсә ризыҡ менән туҡландырғандар. Фруктозала "ултырған" ҡомаҡтар кире лабиринтҡа төшкәс, сығыу юлын башҡаларға ҡарағанда оҙағыраҡ эҙләгән. Икенсе төркөм фруктоза менән бергә омега-3 ҡабул иткән. Өсөнсө төркөмгә уларҙың береһе лә бирелмәгән. Икенсе һәм өсөнсө төркөмдәге ҡомаҡтар араһында айырма табылмаған, йәғни, омега-3 глюкозаның зыянын юҡҡа сығарған.

■ Бүләк биреү - кешелек тарихындағы иң боронғо йолаларҙың береһе. Психологтар билдәләүенсә, был кешенең психик торошона ла яҡшы тәьҫир итә. Ябай ғына бүләктән дә ыңғай тойғолар кисергән кешеләр була. Кемдер ҡиммәтле бүләктәр ҡабул итеп өйрәнгән, уларҙың иһә кәрәкле әйберен ала алмаһа, кәйефе төшә. Ғөмүмән, бындай кешеләрҙең кәйефе йыш үҙгәреп тора. Бүләк биреүсе лә, кешенең ҡыуаныуын күреп, шатлана. Балаға бүләк эшләп, уны ҡыуандырабыҡ икән, ул да һеҙҙе үҙен яҡшы тотоуы, дәрестә алған яҡшы билдәләре менән бөхетле итергә тырышасаҡ, тимәк, ул ала белеү генә түгел, бирә белеү ҙә мөһимлеген аңлаясаҡ, ти ғалимдар.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ



**Беҙ, күп кенә һуғыш йылдары балалары, атайһыҙ үҫтек. Ҡайһыларыбыҙ атайҙарының төҫтәрен дә белмәне. "Атай" һүҙен әйтеүгә тилмереп, бына 80 йәшкә лә килеп еткәнбеҙ. "Үлемһеҙ полк"таштар рәтендә атайымдың портретын тотоп атлағанда: "Атай, мин һине онотманым. Мин һинең бәләкәй ҡыҙың. Һин минең йөрәгемдә генә..."- тип илай-илай атланым...**



# АТАЙЫМДЫҢ ИСЕМЕН...

## хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегенән алдырҙым

Атайым Шәмсетдинов Ғизетдин Шәрәфетдин улы һуғышҡа 1942 йылдың 18 июлендә алына. Миңә ул ваҡытта 5 йәш кенә булған. Фронттан хаттар ғәрәп хәрефтәре менән яҙыла ине. Атайым мәҙрәсәлә белем алған булған, өйҙә уның Ҡөрьән-Кәриме лә һаҡланды. Инәйем ғәрәпсә уҡый белмәй, хатты тотоп, муллаға йүгерә, яуапты ла унан яҙҙыра. Атайым һуғышып йөрөгән ерҙәрен һүрәткә төшөрөп ебәрә. Йырҙар ҙа яҙа, инәйем уларҙы тиҙ генә ятлап ала ла, көйгә һалып, йырлап йөрөй, миңә лә өйрәтә. Инәйем, атайың йыр-музыка яратты, ауылға әртистәр килһә, уларҙы сәйгә алып ҡайтып, скрипкаларын, йырҙарын тыңлап ултырырға ятарды, тип һөйләй торғайны.

Күпмелер ваҡыттан һуң беҙгә ҡара ҡағыҙ килде. Инәйем үкһеп-үкһеп иланы, ағайым менән мин дә уға ҡушылдыҡ. Атайым хаҡында беҙ шул "пахарунка"нан башҡа нәмә белмәнек. Уның ҡайҙа, нисек үлгәне, ниндәй ерҙә ерләнгәне тураһында мәғлүмәт булманы. Ул хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә булды.

1960 йылдарҙа мин атайымдың һуғыш юлдарын белеү өсөн эҙләнеүҙәр башланым. Ҡырмыҫҡалы районы Ҡабаҡ ауылының һуғышта һәләк булғандар исемлегендә уның исеме юҡ ине. Ауыл хакимиәте миңә аныҡ ҡына яуап бирмәне. Район военкоматы һуғыш ваҡытында инәйемә "1944 йылда Украинаның Харьков өлкәһендә һәләк булды" тигән ҡара ҡағыҙ тотторған була. Ә "Хәтер китабы"нда "Хәбәрһеҙ юғалды" тигән яҙыу теркәлә. Төрлө инстанцияларға ҡат-ҡат мөрәжәғәт итеп тә, бер эш тә сыҡмағас, Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығын ҡаршылағанда сәмләнеп китеп ныҡлы эҙләнеүгә тотондом. Төрлө ерҙәргә хаттар яҙа башланым. Ҡайҙа ғына мөрәжәғәт итмәнем мин! Украинаны ла ҡалдырманым. Ахырҙа, миңә Украина Ветерандар ойошмаһы советы рәйесе генерал-майор П.С. Цыбенконан яуап килеп төштө. "Эҙләйбеҙ, әлегә таба алмайбыҙ", тиелгәйне унда. Шулай ҙа атайым табылғандай булып ҡыуандым.

Рәсәй Минобороныһының Үҙәк архивына запрос ебәрҙем, унан беҙҙең Ҡабаҡ ауылында йәшәгән һәм үлгән кешеләрҙең исемлек теҙмәһен һалғандар. Унда ла атайымдың фамилияһы эргәһендә "Хәбәрһеҙ юғалған" билдәһе тора. Ҡаңғыра торғас, Киевтың Житомир районындағы "Государственная межведомственная комиссия"ға барып юлыҡтым. Был ойошма һуғышта һәләк булғандарҙы һәм юғалғандарҙы эҙләй икән. Рәсәйҙең Үҙәк архивы, "Украина менән аралар яҡшы түгел" тип, унда хат яҙыуҙан баш тартты. Хатты үҙем төҙөнөм. Ил-ара хәлдәрҙе күҙҙә тотоп, Башҡортостандың һуғыш йылдарында нисек итеп украин халҡын һыйындырғанын, балаларын ашатып йәшәткәнен, завод-фабрикаларының беҙгә күсеп эшләгәнен теҙеп яҙҙым. Украина Фәндәр академияһының, Яҙыусылар ойошмаһының һуғыш бөткәнсе беҙҙә йәшәүен әйттем. Башҡорттоң ипле, ярҙамсыл, кешелекле халыҡ булыуын тасуирланым. Күп тә үтмәй, миңә матур открытка менән яуап килеп төштө. Житомир районының Большая Гомельша ауылы хакимиәте мемориаль таҡтаһында атайымдың исеме яҙып ҡуйылған! Атайым 46-сы армияла (223-сө уҡсылар дивизияһы, 1037-се полк) стрелок булып хеҙмәт итеп, 1943 йылдың 4 сентябрендә ауыр яранан санитар батальонында һәләк булған. Уны шул Большая Гомельша ауылы яланында күмгәндәр.

Икенсе хатты Большая Гомельша ауылы хакимиәте рәйесе яҙҙы. Атайымдың исеме фашистар менән алыштарҙа ауылды һаҡлаған һуғышсылар исемлегендә булған икән. Таҡталаштағы исеменең фотоһын төшөрөп ебәргән.

Шулай итеп, мин атайымдың ил өсөн баш һалыуын асыҡланым. Өҫтөмдән оло йөк төшкәндәй булды. Был михнәттәр тиҫтәгә яҡын йылдарҙы алды. Үҙ районыбыҙҙа ла исемлектәргә индертеп ҡуйҙым, китапҡа яҙҙырттым. Тик мин быларҙы әллә күпме күҙ-йәш ағыҙып, кәмһенеп, ныҡышып йөрөп башҡарҙым. Бәхтиһән, беҙҙә был эштәр менән ихласлап шөғөлләнгән бер ойошма ла юҡ икән. Хакимиәт - военкоматҡа, военкомат - архивҡа, архив тағы әллә ҡайҙарға тоҡып сығара ла ебәрә. Бик үкенесле, әлбиттә. Әгәр тейешле ойошмалар был мәсьәләгә яуаплыраҡ ҡараһа, иле, халҡы тарихына битараф булмаһа, әллә күпме шулай хәбәрһеҙ юғалыусыларҙың исемдәре ҡайтарылыр ине...

**М. ЯМАЛОВА.**

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ҺӨҘҺӨТ ҠОШТО БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

**Ҡырағай тәбиғәтте һаҡлау үҙәге (Центр охраны дикой природы) һәр яңы тыуған йылды бер ҡошҡа арнап, билдәләп үтә. Быйыл иһә был бәхет һөҙһөт (русса удод) тигән ҡош өлөшөнә тейҙе.**



Был ҙур булмаған үҙенсәлекле ҡоштоң оҙон нәҙек суҡышы, сағыу төҫлө ҡанаттары һәм әтәстекенә оҡшаған кикереге бар. Ул күберәген Европаның һәм Азияның үҙәк һәм көньяҡ өлкәләрендә таралған. Шулай уҡ Африканы ла үҙ итә. Рәсәй Федерацияһында Новгород, Ярославль, Нижегород өлкәләренән тыш, Татарстан һәм Башҡортостан республикаһында оя ҡора. Әйткәндәй, беҙҙең республикала был ҡошсоҡ Ҡыҙыл китапҡа индерелгән. Саванна, һирәк ҡыуаҡлы яландар, емеш-еләккә бай булған баҡсалар һөҙһөттөң яратҡан урындарынан һанала. Байтаҡ ваҡытын ерҙә, бөжәктәр аулау менән үткәрә.

Һөҙһөт кешегә борондан билдәле булған. Ҡошсоҡ тураһында мәғлүмәттәр Ҡөрьән һәм Библияның изге яҙмаларында осрай. Боронғо грек мифологияһына күҙ һалһаҡ, Фракия батшаһы Терей үҙенең ҡатындарын үлтерергә маташыуы арҡаһында һөҙһөт ҡошона әйләндерелә. Ислам динен ҡабул иткәнгә тиклем ингуш һәм чечен халыҡтарында һөҙһөт изге ҡош һаналған. Яҙ аллаһын, уның һәм бала табыуҙы символлаштырған. Йорт-ҡура тирәһендә оя ҡороуы һәйбәт билдәләрҙән һаналған.

Ғөмүмән, бөтә ҡоштар ҙа беҙҙең ҡанатлы дуҫтарыбыҙ, тигән һүҙҙәр беҙгә кескәй йәштән билдәле. Ата-әсәйҙәребеҙ, уҡытыусыларыбыҙ һәр саҡ был турала иҫкәртәләр ине. Һаман да иҫемдә, ноябрь айы етеү менән мәктәбебеҙ тирәләй үҫкән ағастарға төрлө материалдарҙан эшләнгән тағараҡтар элә торғайныҡ. Кемдер үҙенең тағараҡтарын төрлө төҫтәге буяуҙар ярҙамында семәрҙәр менән биҙәп алғаны ла хәтеремдә. Яҙ етеү менән кемуҙарҙан сыйырсыҡ оялары эшләй торғайныҡ. Көн дә тиерлек уҡыуҙан ҡайтҡас, Айрат туғаным менән үҙебеҙҙең һарай башында эленеп торған сыйырсыҡ оябыҙҙы сиратлап күҙәтергә ярата инек. Ҡошсоҡтоң нисә тапҡыр аҙыҡ артынан осоуын, нисек итеп һайрауын һәм күпме тапҡыр ояны тирәһендә турғайҙарҙы ҡыуып йөрөгәнен яҙып ултырған саҡтар ҙа булды.

Шулай итеп, ниндәй генә ҡоштоң йылы булмаһын, беҙ барлыҡ ҡанатлы дуҫтарыбыҙҙы һаҡларға һәм улар тураһында хәстәрлек күрергә тейешбеҙ. Бынан тыш, йыл да "Көньяҡ Урал" ҡурсаулығы ойошторған "Коштарҙы ашатығыҙ" һәм "Тағараҡ" тәбиғи акцияларында әүҙем ҡатнашырға саҡырабыҙ.

**Марат БӘХТИЙӘРОВ,**
**"Көньяҡ Урал" ҡурсаулығы методисы.**

*✓ Йөрәктең сафлығы. "Аллаһы Тәғәләгә ҡарата яҡшы мөғәмәләлә булғанда ғына йөрәк таҙара, ә тән Аллаһы Тәғәләнең дуҫтарына хеҙмәт иткәндә сафлана", тигән Әбү Хайр Аҡта.*



*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*



# ҠУРАЙСЫ АТАЙЫМ...

## яуҙа ятып ҡалды

**Һуғыш тамамланыуға 71 йыл була, ә уның эҙемтәләре, күпме кешеләрҙең яҙмыштарын емереүе бер ҙә онотолмай. Минең атайым - ҡурайсы Ғәлиастан Шәмсетдинов та, ошо һуғыш булмаһа, башҡорт сәнғәтен үҫтереүгә әллә күпме өлөш индергән булыр ине, тип уйлайым. Баймаҡҡа бер барғанымда Буранбаев Вара ағайҙың өйөндә "Баймаҡ районынан сыҡҡан ҡурайсылар" тигән китап ҡулыма эләкте. Авторын хәтерләмәйем. Был китапта атайымды, Моҫтай ауылында тыуған, тип яҙғандар ине. Шул хатаны төҙәтеп, атайым тураһында тулыраҡ белешмә биргем килә.**

Атайым Ғәлиастан 1909 йылда Иҫәнбәт ауылында Хәтирә менән Ғәбделманнандың ҙур ғаиләһендә кинйә бала булып донъяға килә. Бик шаян, шуҡ булып үҫә. Олатай үлеп китә, оло балалары үҙ донъяларын ҡороп, таралышалар. Донъя көтөү өләсәй менән кесе улы Ғәлиастан иңенә тороп ҡала. Шуға күрә атайым бер көн дә уҡый алмай. Аҙағыраҡ үҙ тырышлығы менән уҡырға, арлы-бирле яҙырға өйрәнә. Ҡурайсы ағаһы Динисламдан өйрәнеп, атайым да малай сағынан ҡурайҙа һыҙғырта башлай.

Өләсәйем олоғая башлағас, улына кәләш алып бирергә ҡарар итә. Басай ауылынан үкһеҙ етем Һәҙиә исемле ҡыҙҙы әйттерәләр. Атайым хеҙмәт юлын Түбә руднигында башлай, шахтала слесарь, молотобоец булып эшләй. Был ваҡытта ул яҡшы ҡурайсы булараҡ танылып өлгөрә, клубта концерттарҙа ҡатнаша, һабантуйҙарҙа бәйге тота. Аҙаҡ Иҫәнбәткә ҡайтып, Ишбирҙелә лә старатель булып эшләй.

1937 йылда Өфөләге Башҡорт драма театры ҡурайсыһы Заһир Исмәғилевты Мәскәү консерваторияһына уҡырға ебәрәләр. Уның урынына театр ҡурайсыһы итеп атайымды саҡыртып алалар. Әсәйемдең ағаһы Зиннәтулла апам мине Түбәгә ҡунаҡҡа алып ҡайтты. Тышта ултыра инем, Разия инәйем: "Сәлимә, ин, атайың ҡурай тарта", - тип мине саҡырҙы. Стеналағы радионан илаһи моң ағыла. Атайымдың радио аша ҡурай уйнауын беренсе тапҡыр ишетеүем булды. Мин уны илай-илай тыңланым.

Атайым 1938 йылда Мәскәүҙә, Ҡаҙанда, башҡа ҡалаларҙа гастролдәрҙә була. 1993 йылғы "Ағиҙел" журналының 6-сы һанында БАССР-ҙың халыҡ артисы Зәйни Иғдәүләтов менән Д. Мәһәҙиевтың "Дүрт оҙон йыл" тигән мәҡәләһе баҫылып сыға. Унда Зәйни Иғдәүләтов: "Хәтеремдә, Ғәлиастан ағай театрға килгәс, музыкаль бүлек етәксеһе, композитор Мәсәлим Вәлиев бөтөн артистарҙың да башҡорт халыҡ йырҙарын өйрәнеүен мотлаҡ бурыс итеп ҡуйҙы. Танылған ҡурайсы Шәмсетдинов был эшкә ифрат дәртләнеп тотондо. Шулай өс йөҙ самаһы йыр яҙҙыртты. Был эштә мин Ғәлиастан ағайҙың писаренә әйләндем", - тип яҙа. Ул был дәфтәрҙе Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фондына һәм Өфө сәнғәт институтының музыка бүлегенә тапшыра.

1938 йылғы гастролдән һуң атайым отпускыға ҡайтты. Ғәлләм еҙнәһе менән Хәспиямал апайына бесән эшләшә, бер һыйыр-ҙы уларҙа ҡалдырып, икенсеһен һатып, беҙҙе ҡаласа кейендереп, Өфөгә алып китте. Әсәйем театрҙың костюмдар бүлегендә эшләй башланы. Ул бик оҫта ҡуллы булды. Спектаклдәр өсөн селтәр-ҡашмауҙар, елән-камзулдарҙы хас үҙебеҙсә, башҡортса итеп эшләне. Мине Ғ. Туҡай урамындағы 14-се татар мәктәбенә беренсе класҡа уҡырға бирҙеләр. Зәйни Иғдәүләтов ағайҙар менән бер йортта күрше булып йәшәнек. Ул атайымдың иң яҡын иптәше ине. Атайым ауылда йәшәгәндә һунарға йөрөй торғайны. Өфөлә һунарҙы һағына ине. Бәлки, шуның өсөн дә ДОСААФ-ҡа ағза булып ингәндер. Уның "Ворошиловский стрелок" значогы ла булды.

1941 йылда Мәскәүҙә Башҡортостан әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре үтергә тейеш ине. Быға әҙерлек 1940 йылда уҡ башлана. "Дүрт оҙон йыл" мәҡәләһендә шулай тип яҙа Зәйни ағай: "Беҙҙең театрыбыҙҙан Шәмсетдинов етәкселегендә дүрт кеше башта Ейәнсура, Хәйбулла, Матрай, Баймаҡ, Әбйәлил райондарына, Силәбе өлкәһенең башҡорт ауылдарында йөрөп ҡайтты". Улар унда талантлы йырсылар, ҡурайсылар, өҙләүселәр табып, декадаға әҙерләнергә тейеш булалар. Баймаҡҡа барырға тейеш булғас, атайым мине лә алып ҡайтты. Атайым көн-дәр буйы бушамай, үҙ эше менән йөрөнө. 22 июнь туғандар йыйылышып, Ирәндеккә сығалар. Шунда һуғыш башланыуын ишетеп, иртәгеһенә үк атайым Өфөгә сығып та китә. "Мин һуғышҡа китәм. Әсәйең ауылға ҡайтыр, бында туғандар эргәһендә булырһығыҙ", - тип, мине ҡалдырып китте. Туғандарҙың атайымды оҙатып киткәне әле лә күҙ алдымда тора.

24 июндә атайымды һуғышҡа оҙаталар. Ул пулеметсы булып, Белоруссия ерендә һуғышҡанда 1943 йылдың 14 октябрендә һәләк була. Гомель өлкәһенең Вятковский районы Юрковичи ауылында ерләнә. Һуғыштан һуң Шерстин ауылы зыяратына күсерәләр. Беҙ был һуғышта иң ҡәҙерле ике кешебеҙҙе юғалттыҡ. Атайым һәм Зиннәтулла апамды. Апам башҡорт атлы дивизияһында хеҙмәт иткән. Ошо юғалтыуҙарҙан һуң әсәйем йоҡоһонда зарлы итеп йырлаусан булып китте. Мин уны илап уята торғайным. Һәр ғаиләгә һуғыш күҙ йәше, үкенестәр алып килде. Атайымдың ҡурайҙа уйнаған берәй яҙмаһы ла ҡалманы, тип һыҡрай йөрәгем бөгөн. Ҡайһы ваҡытта Мәскәүҙә йәки Өфөлә берәй архивта һаҡланмаймы икән, тигән уй ҙа килеп ҡуя...

**Сәлимә ШӘМСЕТДИНОВА.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәкдим итәбеҙ.**

## ЙӨРӘК

24. Һөйгәнең ҡулындағы йөрәк. Хараканиҙан йөрәгенең хәле хаҡында һорағандар, ул: "Ҡырҡ йыл буйы йөрәгем минән ситтә йәшәне", - тип яуаплаған.

25. Суфыйҙың йөрәге Аллаһы Тәғәлә ҡулында. "Аллаһы Тәғәлә суфыйға йөрәк биргәс, ул уны шундуҡ Биреүсегә кире ҡайтара. Аллаһы Тәғәлә ҡулындағы йөрәккә нәфсе лә, Иблес тә ҡағыла алмай", тигән Рабиға.

26. Суфыйҙың йөрәге - Мөхәббәт йәшәгән йорт. Әгәр ҙә йөрәк булмаһа, Мөхәббәт йортон ҡайҙа һалыр ине икән? Әгәр ҙә Мөхәббәт булмаһа, йөрәктең ни кәрәге булыр ине икән?

27. Йөрәктең сафлығы. "Аллаһы Тәғәләгә ҡарата яҡшы мөғәмәләлә булғанда ғына йөрәк таҙара, ә тән Аллаһы Тәғәләнең дуҫтарына хеҙмәт иткәндә сафлана", тигән Әбү Хайр Аҡта.

28. Ышанысһыҙ йөрәк. Өс осраҡта йөрәк ышанысһыҙға әүерелә:

- медитация ваҡытында кешенең иғтибары Аллаһы Тәғәләнән ситкә тайпыла;
- Аллаһы Тәғәләгә, уның бөйөклөгөн танымайынса, үҙе хаҡында ғына һөйләп мөрәжәғәт иткәндә;
- әгәр ҙә кеше Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергәнде унан да юғарыраҡ ҡуйһа.

29. Йөрәктең күреү һә-ләте. Йөрәк күҙ күрмәгәнде күреүгә һәләтле. Алит ибн Али Талиптан "Аллаһы Тәғәләне күрҙеңме һуң?" тип һорағандар. "Күрмәгәнгә нисек табынайым һуң", - тип яуаплаған ул. "Йөрәк яңы-лыш күрмәй", тип әйтелә Ҡөрьәндә.

30. Нәфсе - күп төрлөлөктө, йөрәк берҙәмлекте теләй. Нәфсе - йөрәкте аҙҙырыусы, ә йөрәк - хакимлыҡ министры. Йөрәк - күп төрлөлөк менән берҙәмлек араһында барған һуғыш майҙаны, яу яланы.

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Бишенсе сер: мин дә, һин дә ғәйепле түгел

Бер тәжрибә тәкдим итәм, ул һеҙгә ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс күренеүе мөмкин. 21 көн дауамында "ғәйеп көндәлеге" алып барығыҙ. Ошо өс аҙна дауамында ғәмәлдәрегеҙҙе күҙәтегеҙ: кемдәлер ғәйеп тойғоһо тыуҙырырға тырышыуығыҙҙы; һеҙҙә ғәйеп тойғоһо тыуҙырырға тырышыуҙарын; үҙегеҙҙә-үҙегеҙ ғәйеп тойғоһо тыуҙырырға тырышҡан хәл-торошто яҙып барығыҙ. Был күнегеү ярҙамында файҙаһыҙ уйын өсөн күпме ваҡытығыҙ бушҡа киткәнен баһалағыҙ. Үҙегеҙҙә йәки кемдәлер ғәйеп тойғоһо тыуҙырырға тырышҡанда ҡапыл ғына туҡталығыҙ һәм төҙәлегеҙ. Был ғәҙәтегеҙгә һеңгән ҡылығығыҙҙы үҙгәртергә ярҙам итәсәк һәм уны бөтөнләй онотторасаҡ. Әгәр тирә-яҡтағылар һеҙҙе ғәйепле тойорға мәжбүр итергә тырыша икән, барлыҡ ниәттәре бушҡа ғына булыуын белдерегеҙ.

## Алтынсы сер: мөхәббәттең ыңғай көсө

Мөхәббәт китаптар, йырҙар яҙырға, шедеврҙар тыуҙырырға, ҙур еңеүҙәргә илһамландыра, хатта тарих барышына йоғонто яһай. Былар - кешелекте берләштереүсе сифат. Мөхәббәттең күп төрлө билдәләмәһе бар, әммә улар аныҡ түгел. Мөхәббәттең нимә икәнен аңлау өсөн, тәүҙә уның нимә булыуын аңларға кәрәк. Мөхәббәт - күрә алмаусанлыҡ та, көс ҡулланыу ҙа, тәкәбберлек тә, дәғүәселек тә, ғашиҡлыҡ та түгел. Ғашиҡлыҡ бары тик тышҡы һыҙаттарға ғына йүнәлтелгән һәм үҙеңә иғтибар йүнәлттереү процесы ғына. Ул шәхси ихтыяжды ғына ҡәнәғәтләндерә һәм уның артынса уҡ күңел ҡайтыу тора. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ кейәүгә ир-егеттең матурлығына ҡыҙығып сыға, һуңынан уның бары тик үҙенең тышҡы ҡиәфәте тураһында ғына уйлауына зарлана. Йәки юғары интеллектлы кешегә сыға ла, һуңынан эргәһендә үҙен алйот һымаҡ тойғаны өсөн уны ғәйепләй. Тотороҡло, айыҡ аҡыллы кешегә сыҡҡандар ирҙәрен күңелһеҙ һәм мыжыҡ тип иҫәпләй. Ҡатын-ҡыҙ аҡса өсөн генә бай кешегә сыға ла, уның бары тик бизнес тураһында ғына уйлағаны өсөн үҙен бәхетһеҙ һанай. Енси яҡтан дәртле иргә сыҡҡандар уны башҡаларҙан көнләшеп бер була. Был исемлекте әллә күпме дауам итергә мөмкин. Шуны уҡ ир-атҡа ҡарата ла ҡулланырға ярай.

Нимә һуң ул мөхәббәт? Мөхәббәт - Ғаләмдең тартыусы, берләштереүсе, гармониялы көсө. Мөхәббәт - ул кешене үҙен асырға тырышыуҙа, эмоциональ, интеллектуаль, рухи яҡтан үҫергә тырышыуында ярҙам итеү. Ул ғына ла түгел - кешегә үҙ-үҙе булып ҡалыу өсөн тулы азатлыҡ биреп, уны нисек бар - шулай ҡабул итеү. Күп мөнәсәбәттәрҙә бер яҡлы мөхәббәт йәшәй. Мөнәсәбәттәр гармониялы булһын өсөн бирергә генә түгел, алырға ла кәрәк. Һеҙ партнерығыҙҙың ғына түгел, үҙегеҙҙең дә ихтыяжығыҙҙы ҡәнәғәтләндерергә тейешһегеҙ. Алмашҡа бер нәмә лә алмайынса, гелән биреү йәки гелән алып, бер нәмә лә бирмәү - ысын мөхәббәт асылы түгел.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**



## 9 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
0510 "День Победы". Праздничный канал.
09.50 "Песни Весны и Победы".
10.20 "В бой идут одни "старики". Военная драма.
11.50 Новости (с субтитрами).
12.00 Москва. Красная площадь. Парад, посвященный Дню Победы.
13.00 Новости (с субтитрами).
13.15 "Диверсант. Конец войны". Остросюжетный сериал. Россия, 2007 г.
17.00 "Бессмертный полк". Прямой эфир.
20.00 "А зори здесь тихие..." Военная драма (12+).
21.00 "Время".
21.30 "А зори здесь тихие..." Военная драма (12+).
23.20 "В бой идут одни "старики". Военная драма.
00.50 "Белорусский вокзал". Драма.
02.25 "Перед рассветом". Худ. фильм (12+).
03.45 "Мерседес" уходит от погони". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.30 "Истребители". Военно-драматический сериал (12+).
09.00 "День Победы". Праздничный канал.
12.00 Москва. Красная площадь. Военный парад, посвященный 71-й годовщине победы в Великой Отечественной войне 1941-1945 гг.
13.00 "Истребители". Продолжение сериала (12+).
15.00 "Вести".
17.00 "Бессмертный полк". Шествие в честь 71-й годовщины Великой Победы.
20.00 "Вести".
20.30 "Истребители". Военно-драматический сериал, заключительные серии (12+).
24.00 Праздничный салют, посвященный Дню Победы.
00.15 "Песни военных лет". Самые известные песни военных лет к празднованию Великой Победы исполняет всемирно знаменитый русский баритон Дмитрий Хворостовский.
01.30 "Мы из будущего". Фантастика (16+).
03.30 "Агент А/201. Наш человек в гестапо". Фильм 1. Док. фильм (12+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "С Днем Победы!" (12+).**
**07.30 "Победа". Худ. фильм (12+).**
**10.00 "С Днем Победы!" Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященный Великой Победе (12+).**
**11.30 Телефильм "Надежда" (12+).**
**12.00 "Большая Победа в маленьких сердцах". Концерт телеканала "Тамыр".**
**13.30 Телефильм "Радость нашего дома" (0+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Истории в табличках" (6+).**
**15.15 Песни Шамиля Шарипова (12+).**
**16.00 Телефильм "Медаль" (12+).**
**16.45 "Три письма". Худ. фильм (12+).**
**17.15 "Яблоневый цвет. Мечта Хасана Ахтямова" (6+).**
**18.00 "Победные рассказы" (6+).**
**18.15, 19.00 "Ретро-концерт" (12+).**
**18.55 "Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма". Минута молчания.**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**23.00 "Победа". Худ. фильм.**
**02.00 Н.Асанбаев. "Семь девушек" (12+).**

## 10 МАЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.30 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.30, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Война и мир". 1-я серия. Драматический сериал(16+).
22.40 "Влад Листьев. Жизнь быстрее пули" (12+).
23.45 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 Ночные новости.
00.35 "Клеймо ангелов: Мизерере". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Верни мою любовь". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести. Дежурная часть".
20.10 "А ну-ка, башуки! От Бураново до Баку", "Эдита Пьеха. Русский акцент" (12+).
22.00 "Вести".
23.30 "Евровидение-2016". 1-й полуфинал. 61-й ежегодный песенный конкурс.
03.00 "Срочно в номер. На службе закона". Детективный сериал (16+).
03.55 "Агент А/201. Наш человек в гестапо". Фильм 2 (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 15.45 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Садовые сокровища" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью"**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Истории в табличках" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.45 "Конь мой верный, конь мой вороной" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (0+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Москва-Берлин. Завтра война" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 З.Зайнуллин. "Женщины 41-го"**

## 11 МАЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.50 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.50, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым. Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Война и мир". 2-я и 3-я серии. Сериал (16+).
23.55 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 Ночные новости.
00.45 "Чак и Ларри: Пожарная свадьба". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Верни мою любовь". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Нелегкое счастье". Драма (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.40 "Война 2.0. Пиратская версия", "Научные сенсации. Хакеры смерти" (12+).
02.50 "Срочно в номер. На службе закона". Детективный сериал (12+).
03.45 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Садовые сокровища" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 02.00 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Истории в табличках" (6+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Люди 1941 года".**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Пожары". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Т.Гарипова. "Не улетайте, журавли" (12+).**

## 12 МАЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.40, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Война и мир". 4-я и 5-я серии (16+).
23.55 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 Ночные новости.
00.45 "Агент Джонни Инглиш: Перезагрузка". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Верни мою любовь". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Александра Пахмутова. Отвечу за каждую ноту". Док. фильм .
22.00 "Вести".
23.30 "Евровидение-2016". Международный конкурс исполнителей. 2-й полуфинал. Прямая трансляция из Стокгольма.
02.05 "Срочно в номер. На службе закона". Детективный сериал (16+).
03.00 "Гений из "шарашки". Авиаконструктор Бартини" (12+).
04.00 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Дети-герои" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Садовые сокровища" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Истории в табличках" (6+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "История признания" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Яблоневый цвет. Места Хасана Ахтямова" (6+).**
**18.00 "Дорога в жизнь" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Точка зрения. ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Лес теней". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Н.Наджми. "Друг-гармонист" (12+).**

## 13 МАЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 04.25 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Война и мир". 6-я, заключительная, серия (16+).
23.00 "Вечерний Ургант" (16+).
23.40 "Красная машина" (12+).
01.20 "Расплата". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Верни мою любовь". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
22.50 "Репортер. К 25-летию "Вестей" (12+).
00.40 "Кандагар". Боевик (12+).
02.50 "Диктор Иванович. Солдат телевидения".
03.50 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Садовые сокровища" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Красная кнопка" (16+).**
**12.45, 15.45 "Телелавка" (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**13.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Истории в табличках" (6+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**16.00 "Автограф" (12+).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.30 "ДОСААФ: Испытано на себе" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Императрица и воины". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 А.Атнабаев. "Песнь о любви" (12+).**

## 14 МАЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.30 "Путешествия Гулливера". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Влад Листьев. Жизнь быстрее пули" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 "Неоконченная повесть". Мелодрама.
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
18.50 "Без страховки" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Городские пижоны". "АВВА" (12+).
00.50 "Форсаж". Боевик (16+).
02.50 "Отбой". Худ. фильм (16+).
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.45 "Всем - спасибо!.." Худ. фильм.
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Гоша Куценко" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Маша и медведь". Худ. фильм (12+).
13.00 "Чужая женщина". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Чужая женщина". Продолжение сериала (12+).
17.00 "Один в один. Битва сезонов". Шоу перевоплощений (12+).
20.00 "Вести в субботу".
22.00 "Плохая соседка". Комедия (12+).
24.00 "Евровидение-2016". Международный конкурс исполнителей. Финал. Прямая трансляция из Стокгольма.
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 "Сказания Земноморья"(12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 Юбилейный концерт народного ансамбля танца "Лейсан" (6+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Знай наших!"**
**21.15 "Малый бизнес" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Русская формула" (12+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Шоколад". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости недели (на башк. яз.).**
**01.30 М.Файзи "Галиябану" (12+).**

## 15 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Курьер из "Рая". Худ. фильм (12+).
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Смешарики". "Пин-код".
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Следуй за мной".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.50 "Анна Каренина". Драматический сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Анна Каренина". Продолжение сериала (16+).
18.00 "Юбилейный вечер Вячеслава Добрынина "Все мимолетно".
19.55 "Аффатар жжот" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Подмосковные вечера" (16+).
23.25 "Михаил Булгаков. Великий мистификатор" (12+).
00.20 "Дилемма". Комедия (16+).
02.25 "Начинающие". Худ. фильм (16+).
04.40 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Ларец Марии Медичи". Худ. фильм (12+).
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.55 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Отцовский инстинкт". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Отцовский инстинкт". Продолжение сериала (16+).
15.35 "Юмор! Юмор! Юмор!" (16+).
18.00 "Возраст любви". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
01.00 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
02.55 "Последний солдат. Афганистан". Док. фильм (16+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс". Мультфильм.**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай" (12+).**
**09.30 "Русская формула" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Позывной "Барс" (12+).**
**16.45 "Историческая среда" (12+).**
**17.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**17.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**18.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**18.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**18.30 "История признания" (12+).**
**18.45 "Книга джунглей". Худ. фильм (6+).**
**20.30 "Байыҡ-2016" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Специальный репортаж" (0+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Притворись моим мужем". Худ. фильм (16+).**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ТАҒЫ ЛА БЕР ЕҢЕҮ



**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, импровизатор, өҙләүсе Илһам Байбулдин Бөтөн Рәсәй көйлө эпос башҡарыусылар конкурсы лауреаты булды.**

Сәсәнлек бәйгеһе 2016 йылдың ғинуарында иғлан ителгәйне. Эпик йырҙар башҡарыусыларҙы асыҡлау, был уникаль жанрға ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм мәҙәни милекте һаҡлау маҡсатында үткәрелгән конкурс видеоматериалдар буйынса үтте. Карелия Республикаһының Милли мәҙәниәттәр һәм халыҡ ижады үҙәге директоры Татьяна Леднева әйтеүенсә, был сара ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан. Унда Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 34 ғариза бирелгән, бөтәһе 200-гә яҡын кеше ҡатнашҡан. Конкурс билдәле сәсән, сәсәндәр династияһына нигеҙ һалыусы Трофим Рябининдың тыуыуына 215 йыл, Павел Рыбников тарафынан Олонецк губернияһында яҙып алынған былиналарҙың баҫылып сығыуына 155 йыл тулыуға арналды. Проекттың Гала-концерты 12 июндә, "Кижи" музей-ҡурсаулығында була, унда Илһам Байбулдин да сығыш яһаясаҡ.

# ҘУР СӘНҒӘТ БАЙРАМЫ

**Өфө ҡалаһында "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале үтәсәк. 25 майҙан 29 майға тиклем баш ҡала ҙур фестиваль майҙансығына әүереләсәк.**

Музыкаль форумдың программаһы тамашасыларҙы төрлө стилдәр, йүнәлештәр менән хайран итәсәк, тип белдерә ойоштороусылар. Классика һәм бөгөнгө заман, симфоник музыка һәм милли көйҙәр, этник кино һәм сәнғәттең тағы ла күп үҙенсәлектәре Конгресс-холл эргәһендәге амфитеатрҙа осрашасаҡ.

25 май өфөләр яратып өлгөргән сара - "Симфоник төн" уҙа. Классик музыканы үҙ итеүселәр Йәштәр симфоник оркестры башҡарыуында көйҙәр тыңлай аласаҡ. Ошо уҡ көндә БР Милли музейында "Төрки халыҡтарының костюмдары" тигән күргәҙмә асыла. Конгресс-холда "Сәхнә яҡтыртыу дизайны нигеҙҙәре" темаһына түңәрәк өҫтәл ойоштоғола.

26 май фестиваль Рәсәй киноһы йылына арналған саралар менән дауам итә. Кино эшмәкәрҙәре түңәрәк өҫтәлдә милли документаль, художестволы, анимацион фильмдар төшөрөү мәсьәләләрен ҡараясаҡ. Амфитеатр "Кино төнө"н ҡабул итә һәм был төндә ул ҙур кинотеатрға әүереләсәк.

27 майҙа "UFA-Kuraifest" тип аталған яңы проект тормошҡа ашырыласаҡ. "UFA - Kuraifest" - ҡатнашыусылар һәм тамашасылар өсөн онотолмаҫ хистәр, йыр, музыка байрамы бүләк итмәксе. Киске сәғәт 7-нән амфитеатр фестиваль майҙансығына әүерелә. Фестиваль программаһының төп геройы башҡорт милли уйын ҡоралы - ҡурай. Сарала этно-рок төркөмдәр, башҡа музыканттар сығыш яһай. Байрам "Сәскә ат, ҡурай!" тип аталған концерт менән тамамласаҡ.

28 май Конгресс-холда үткән "Евразия киңлегендә мәҙәни диалог" тип аталған ғилми-практик конференция менән башлана. Унда ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй Федерацияһы комиссияһы ҡатнаша. Салауат Юлаев майҙанында башҡорт милли костюмы байрамы үтә. Был флеш-мобҡа һәр кем ҡушыла һәм байрамға милли йәки стилләштерелгән костюмда килә ала. Амфитеатрҙа "Урал моңо" төрки йәштәре конкурс-фестивале ойошторола. Быйыл Башҡортостан исеменән Заһир Зәйнетдинов (Өфө), Марат Әхмәҙиев (Октябрьский), Илдар Жамалов (Учалы), Илнур Хәйруллин (Өфө), Олеся Лукина (Стәрлетамаҡ), Фәһим Тоҡомбәтов (Иглин районы), шулай уҡ "Йатаған", "Саптар" (Өфө), "Тархан" (Сибай), "Байымбәт" (Күгәрсен районы) төркөмдәре сығыш яһаясаҡ. "Урал моңо" конкурс-фестивалене гала-концерты "Этно төн"гә күсәсәк, унда Рәсәй төбәктәренән һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренән коллективтар сығыш яһасаҡ.

29 май "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивалене Гала-концерты үтә, унда иң сағыу сығыштар тәҡдим ителәсәк.

# ЙЫРСЫЛАР БӘЙГЕҺЕ

**18-20 майҙа Сибай ҡалаһында "Ирәндек моңдары" төбәк-ара башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар бәйгеһе үтә.**

Унда 35 йәшкә тиклемге профессиональ, үҙешмәкәр йырсылар ҡатнаша ала. Конкурс шарттары буйынса йырсылар башҡарған йырҙарының тарихын, барлыҡҡа килгән осорон белергә тейеш. Ғаризалар 10 майға тиклем ҡабул ителә, шуға ла бәйгелә ҡатнашырға теләүселәр Сибай ҡалаһының мәҙәниәт бүлегенә, шулай уҡ Республика халыҡ ижады үҙәгенә мөрәжәғәт итә ала. Төбәк-ара башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар бәйгеһе сиктәрендә фольклорсы ғалимдар, билдәле йырсылар менән осрашыуҙар, шулай уҡ башҡорт вокалы буйынса ижади лабораториялар үтәсәк.

БАҠСА



# УРМАН ЙЫУАҺЫ

**Күп йыллыҡ йәшел һуғандарҙың төрлө сорттары була - батун, шнитт-һуған, ялпаҡ һуған (порей), оҫҡон йыуаһы һ.б. Баҡсасылар витаминға бай был ризыҡтың, гәҙәттә, бер-ике төрөн генә үҫтерә. Бөгөн гәзит уҡыусыларҙы япрағы ынйы сәскәһенә оҡшаған йыуа төрө менән таныштырмаҡсыбыҙ. Халыҡ уларҙы урман йыуаһы йәки айыу һуғаны (черемша) тип йөрөтә.**

Урман йыуаһын баҡсала үҫтереүҙең ауырлығы юҡ. Ул яҡшы ҡышлай, 5-6 йылға бер тапҡыр күсереп ултыртып торһаң, шул да етә. Урман йыуаһын ағас ышығына сәсергә лә ярай, был йыуа ҡояш нурҙарын яратмай тигән һүҙ түгел. Урман йыуаһы ағастар япраҡ ярғанға тиклем үҫә, ә һуңынан ағастың олоно уны артыҡ йылынан, кибеүҙән һаҡлай. 40 см тәрәнлектәге соҡорҙар ҡаҙып, йыуаны шунда сәсәләр. Әйткәндәй, орлоҡтан сәселгән йыуа яйыраҡ үҫә, уны бер нисә йылдан ғына ашай башлаясаҡһығыҙ, шуға ла йыуаны тамыры менән ҡаҙып алып ултыртыу отошлоraҡ. Күсереп ултыртыу июль-августа башҡарыла, һалҡындар ныҡлап төшкәнсе тамыр нығынып өлгөрөргә тейеш. Июнь уртаһына тиклем йыуаға һыу ҡойоп торорға кәрәк, ул дым ярата.

Йыуаның япраҡтарын, һабағын сәскә атҡансы ашайҙар. Үҫемлектең йә өҫкө ике япрағын өҙәләр, йә иң эре йыуаларҙы тамырын ғына ҡалдырып тотошлай ҡырҡып алалар.

Урман йыуаһы - витаминлы ризыҡ. С витамины лимонға ҡарағанда 15 тапҡырға күберәк. Башҡа йыуаларға ҡарағанда, уның япрағы һәм һабаҡтарында микроэлементтар ҙа күп, каротин, эфир майҙары, фитонцидтар, сапониндар, углеводтар, лимон һәм башҡа органик кислоталар, алкалоидтар, флавоноидтар һәм башҡа файҙалы матдәләр бар. Халыҡ медицинаһында урман йыуаһын атеросклероз, йөрәктең ишемик ауырыуы, ҡалҡан биҙе, хроник гастрит, бронхит, шәкәр диабеты мәлендә ҡулланыу өсөн ҡулланалар. Иртә яҙ өлгөрә, был осорҙа башҡа йәшелсә-емештәрҙә сәсәбеҙ генә, шуға ла йыуа организмды витаминдар менән туҡландыра тора. Зәңге сирен иҫкәртә, гельминттарҙы ҡыуа, ҡанды таҙарта, енси әүҙемлекте, эсәк эшмәкәрлеген көйләй.

Урман йыуаһын салаттарға, һарымһаҡ урынына итле ризыҡтарға, бәлеш өсөн йомортҡа һәм дөгө эслегенә, хатта фаршҡа өҫтәргә була. Ҡышҡылыҡҡа полиэтилен пакетҡа һалып туңдыралар.

# ҠЫЯР ҮҪЕНТЕҺЕНӘ - ҺЫУ

**Ҡыяр үҫентеһе тиҙ үҫә, шунда уҡ беренсе уңышы менән дә ҡыуандыра башлай. Шуға ла ҡыяр үҫентеләрен туҡландырып торорға кәрәк, ул тупраҡтағы файҙалы матдәләрҙе исрафлап бөтһә, уңыш биреү түбәнәйә, туҡланыу элементтары тигеҙлеге боҙолоуы ҡыярҙың формаһында сағыла башлаясаҡ.**

Туҡландырыуҙың иң ябай һәм еңел ысулы: биҙрәнең 2/3 өлөшө тулғансы ҡара икмәк ҡайыры һалырға, һыу ҡойорға һәм берөй ауыр әйбер менән баҫырып ҡуйырға. Биҙрәне йылы урынға ҡуйып, икмәкте 1 аҙна әсетәбеҙ. Килеп сыҡҡан төнәтмәне һыу менән (1:3) ҡатыштырып, ҡыяр үҫентеләренең тамырына ҡойоп сығырға. Бер ҡыуаҡҡа сама менән ярты литр ҡойорға кәрәк. Бынан һуң ҡыяр яҡшы итеп сәскә ата башлай, ҡыярҙар һарғаймай, формаһы ла матур була.

# КӨЛ - АШЛАМА ЛА

**Көлдә азот юҡ, әммә унда 30-ға яҡын элемент бар: калий, кальций, магний, тимер, кремний, фосфор, көкөрт, бор, марганец һ.б.**

Көл фосфорлы-калийлы ашламаны алыштыра ала. 100 грамм ағас көлөндә (стакан 200 мг күләмле) 3 грамм фосфор, 8 грамм калий, 25 грамм кальций бар. Һалам көлөндә был матдәләр күберәк.

Яҙын 1 м2 майҙанға 100 грамм көл индерәләр, был 1 ҡалаҡ калий сульфатын алыштыра. Ҡомло тупраҡ өсөн көл тағы ла файҙалы, унда, гәҙәттә, бор аҙ була. Тик көл ямғыр селәүсендәренә насар тәьҫир итә һәм уларҙың юғалыуына килтереүе ихтимал. Көлдө һыуға изеп тә (1 биҙрә һыуға 1 стакан көл) тупраҡты ашлайҙар. 1-2 м$^2$ майҙанға ҡулланырға. Көлдө даими рәүештә сәскәләрҙең, йәшелсәләрҙең, ҡыуаҡтарҙың, хатта ағастарҙың тупрағына өҫтәү һәйбәт, улар сирҙәргә, ҡоротҡостарға бирешмәйәсәк.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# УРАҘА ЕТЕП КИЛӘ!

Ислам донъяһы тағы ла Рамаҙан айына яҡынлаша. Ҡөрьән өйрәтә: "Аллаһ хозурындағы айҙар һаны ун ике. Был турала Уның Китабында күктәрҙе һәм ерҙе яралтып бар иткән көндә уҡ билдәләнеп ҡуйыла. Ун ике айҙың дүртеһе тыйылған (гонаһ эштәргә ярамай торған хәрәм) айҙар. Хаҡ диндең тәртибе шундай. Был айҙар дауамында үҙ-үҙегеҙгә зыян-зәрәт килтермәгеҙ, мөшриҡтәр бергәләшеп һеҙгә ҡаршы торған кеүек, Аллаһ юлында һеҙ ҙә уларға бергәләшеп ҡаршы тороғоҙ. Белегеҙ: Аллаһ - ул тәҡүәләр менән!"

*"Тәүбә" сүрәһе, 36-сы аят.*

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (2) дүшәмбе | 3:52 | 5:22 | 13:30 | 19:34 | 21:04 | 22:34 |
| 10 (3) шишәмбе | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 19:35 | 21:05 | 22:35 |
| 11 (4) шаршамбы | 3:48 | 5:18 | 13:30 | 19:37 | 21:07 | 22:37 |
| 12 (5) кесе йома | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 19:39 | 21:09 | 22:39 |
| 13 (6) йома | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 19:41 | 21:11 | 22:41 |
| 14 (7) шәмбе | 3:43 | 5:13 | 13:30 | 19:42 | 21:12 | 22:42 |
| 15 (8) йәкшәмбе | 3:41 | 5:11 | 13:30 | 19:44 | 21:14 | 22:44 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 май "Яңғыҙҙар ташы"** (Ә. Ғаязов), драма

**8 май "Ике төш"** (М. Багаев), драма

**10 май "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.). Башлана 15.00, 19.00

**11 май "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса). Башлана 15.00, 19.00

**12 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**13 май "Джут"** (О. Жанайдаров), драма

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 май "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00

**12 май "Акса булһа бер мукса"** (М. Багаев), музыкаль комедия

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11, 12 май "Һөйәркәләргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ДИПЛОМАТЛЫҠТЫҢ...

## иң камил өлгөһө

**Күптән түгел "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле илебеҙҙең мәҙәни баш ҡалаһында сығыш яһаны. Санкт-Петербургта мосолман мәҙәниәте көндәре сиктәрендә үткән Башҡорт мәҙәниәте көнө сараһына улар бик бай тамаша бүләк итте. Рәсәй ҡалаларын, Европаны урап сыҡҡан ансамбль Санкт-Петербургта тәүге тапҡыр булды. Концерт алдынан И.И. Газа исемендәге Мәҙәниәт һарайының фойеһында халыҡ кәсепселеге сувенирҙары, Башҡортостан тураһындағы мәғлүмәт һәм фотокүргәҙмәһе, милли ашамлыҡтар һәм башҡорт балы йәрминкәһе үткәрелде.**



"Мираҫ" ансамблен Санкт-Петербургта йәшәгән башҡорттар ғына түгел, башҡа милләт халыҡтары ла бик ихлас ҡаршыланы. Хатта РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Татарстандың халыҡ артисы Альберт Әсәҙуллин сәхнәгә сығып, Өфөлә шундай юғары кимәлдәге ансамблдең барлығына ҡыуанысын белдерҙе. "Бындай тамаша бөгөнгө сәйәси-иҡтисади мәсьәләләр киҫкенләшеп торғанда дипломатлыҡтың иң камил өлгөһө булып тора", - тине ул. Ысынлап та, тамашасылар араһында башҡорт, татар, урыҫ, мари, сыуаш, белорус, ҡалмыҡ, ҡаҙаҡ һәм башҡа милләттәр вәкилдәре лә булды. Улар ҙа ансамбль репертуарындағы үҙ милләте бейеүҙәрен ҡарап кинәнде.

Яҡташтарыбыҙ араһынан "Мираҫ"-тың бейеү ансамбле генә түгел, ә вокал, хор һәм халыҡ уйын ҡоралдары оркестрын бергә туплаған ижади коллектив икәнен белмәүселәр өсөн был концерт оло асыш булды. "Ансамбль Санкт-Петербургҡа тағы килһә, мотлаҡ бөтөн дуҫтарыбыҙҙы алып киләсәкбеҙ, бындай тамашанан ситтә тороп ҡалырға ярамай", - тип белдерҙе тамашасылар.

Башҡорт мәҙәниәте көнө сиктәрендә Санкт-Петербургтың Милләтара мөнәсәббәттәр һәм миграцион сәйәсәтте бойомға ашырыу комитеты етәксеһенең беренсе урынбаҫары Окрушко Вадим Яковлевич һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимир Биктимир улы Баязитов, Өфө ҡалаһы хакимиәте Мәҙәниәт идаралығы рәйесе Исламетдин Ризаитдин улы Мәмбәтов Санкт-Петербург менән Башҡортостан араһындағы мәҙәни бәйләнеште үҫтереү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы.

"Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбленең Санкт-Петербургҡа гастролен ойошторған бөтөн милләттәштәрбеҙгә, айырыуса, коллективтың етәксеһе, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Илүзә Ҡаһарман ҡыҙы Ноғомановаға, Санкт-Петербург башҡорттарына һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙыусы Камил Әғзәм улы Хәйруллинға, "Ирәндек" фольклор ансамбленең һәм Санкт-Петербургтың "Башҡортостан мәҙәни үҙәге" етәксеһе Буканова Люциә Ғафар ҡыҙына оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Тамашасылар өсөн ысын мәғәнәһендә байрам ойошторған артистарға ҙур рәхмәт!

**Эльвира МОТАЛОВА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҮӘТ, ИСМАҺАМ,

## тамаша!



**"Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Тамыр" балалар телеканалының "Үәт, исмаһам, кадр!" тип аталған күркәм байрамы үтте. Концертты тамаша ҡылырға килеүсе бәләкәстәр һәм уларҙың ата-әсәләре йөрәктәрҙе иретерлек йыр-моңға сорналып, күңелдәрен үҫтереп ҡайтты.**

Был юлы сара "Рәсәй киноһы йылы"на арналғайны. Тамашасылар тәүге минуттарҙан уҡ "Тамыр" балалар телеканалы төшөргән фильмдар буйлап сәйәхәт итте. Балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә яратып өлгөргән "Ҡоралай", "Умырзая", "Ҡамыр батыр", "Ҡарйондоҙ", "Шүлгәнташ", "Кәкүк сәйе", "Шихандар сере" әкиәт-фильмдарынан билдәле йырҙар яңғыраны. Концерттың алып барыусылары, үҙебеҙ баш, үҙебеҙ түш, тип, бер ыңғайҙан яңы фильм төшөрөргә булып киттеләр. Әммә тәүге тапҡыр бындай етди эшкә үҙ аллы тотонғас, кино сәнғәте өлкәһендәге билдәле шәхестәр менән бәйләнешкә сығып, тәжрибә уртаҡлашыуҙарын һоранылар. Телефондан йәки махсус видео-бәйләнеш аша шылтыратыуҙарын ихлас күҙәтеп ултырған балалар араһында "Һәй, был бит скайптан шылтырата" йәки "Эй, вацап" тигән һүҙҙәр ишетелеп ҡалды.

Фильм төшөргәндә иң мөһиме нимә икән, тигән һорауҙың яуабын белгегеҙ килһә, Айнур Асҡаровтан һорағыҙ. Йәш режиссер һеҙгә тәү сиратта күңелегеҙҙе елкендереп торған идея кәрәк булыуы тураһында мотлаҡ әйтер. Идеянан һуң, әлбиттә, уны тормошҡа ашырырға ярҙам итеүсе продюсер кәрәк. Тырыш малайҙар һәм ҡыҙҙар Зөһрә Бураҡаеваның кәңәштәренә ҡолаҡ һалып йөкмәткеле сценарий яҙырға, Рияз Исхаҡов ярҙамында локация табырға өйрәнделәр. Оператор Урал Ғатауллин да һөнәри оҫталыҡ серҙәре менән бүлеште. Хөрмәтулла Үтәшев режиссер ҡушҡанды эшләргә, уны һәр ваҡыт тыңларға кәрәк, тип аңлатты. "Карусель" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы аша бөтәһенә лә Каляка-Маляка булараҡ билдәле Рәсәй актеры Сергей Друзьяк режиссер эшенең нескәлектәре тураһында һөйләне. Башҡортостандың халыҡ артисы Рушана Бабич, "Е7Е-медиа" студияһы етәксеһе Батыр Ғәлимов, "Тамыр" балалар телеканалы режиссеры Ләйсән Солтанғолованың да бик үҙенсәлекле, фәһемле кәңәштәрен ишеттек. Әммә бөгөнгө көндә иң төп кәңәште Өфө ҡалаһы ағинәйе Альбина Исхаҡова бирҙе. Ул балаларға фильм төшөргәндә милли рух, милли кейемдәр, башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында онотмаҫҡа ҡушты. Ошо иҫкәртеүҙе фильм төшөргәндә генә түгел, ғөмүмән, балалар өсөн ҡуйылған концерттар, төрлө саралар үткәргәндә лә иҫтә тоторға кәрәк инде ул. "Тамыр" балалар телеканалының тамашаһында был хәҡиҡәткә тағы бер ҡат инандыҡ. Кескәйҙәребеҙ моңло башҡортса йырҙар, дәртле бейеүҙәр, һығылма бил гимнастарҙың сығыштарына хайран ҡалып, йөрәктәре дәртләнеп үҙҙәре лә сәхнәләге тиҫтерҙәрен ҡабатлап рәхәтләнеп бейеп, һикереп алды. Улар үҙ-ара танышып, дуҫлашып та өлгөрҙөләр.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОМҺОҘ ҠОТОРҺА..

## ҡоҙоҡҡа ҡармаҡ һалыр

Ағасһыҙ йортҡа ҡош ҡунмаҫ, балаһыҙ йортҡа ҡот ҡунмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт:"Бик матур һарайҙа Шраван тигән принц йәшәгән. Ул байлыҡ һәм муллыҡ, шуның өҫтәүенә матурлыҡ һәм төҙөклөк ятаҡан. Үҙенең ҡалаһын туҡтауһыҙ биҙәгән, төҙөкләндергән, уны иң матур ҡалаларҙың береһенә әүерелдергән. Ләкин берҙән-бер көндө был эштәр уны туйҙырған икәнен аңлаған. Шул мәлдә генә уның ҡалаһына Будда килгән. Шраван уның эргәһенә барған, вәғәздәрен тыңлаған һәм ҡапыл ғына Будда эргәһендә йөрөгән монахтар рәтендә ҡалырға ҡарар иткән. Принцтың был ҡарарына барыһы ла аптыраған. Әле генә ҡатын-ҡыҙ һәм шарап менән күңел асыуҙан башы сыҡмаған принцтың нисек дин юлынан китеүе мөмкин, тип уйлағандар. "Һин уны берәй нимә эшләттеңме әллә?" - тип һорағандар Будданан. "Мин уның менән бер ни ҙә эшләмәнем, - тигән Будда.- Кешенең аҡылы шулай бер сиктән икенсеһенә күсенергә мөмкин, әлбиттә. Был аҡылдың ҡәҙимге юлы. Кеше байлыҡҡа сумып, аҡылдан яҙған, хәҙер байлыҡтан баш тартып, аҡылдан яҙа... Быныһы ла аҡылһыҙлыҡ..."**

**Шулай итеп, Шраван монах булып китә. Эргәһендәгеләр уның бер сиктән икенсеһенә ташланғанын ситтән генә күҙәтә башлай. Будда уҡыусыларын бер ваҡытта ла яланғас йөрөргә өйрәтмәй, ә Шраван яланғас йөрөй. Будданың бар уҡыусылары ла көнөнә бер тапҡыр ашай, ә Шраван көн аша бер ашай. Башҡалар ағас күләгәһе аҫтында доға ҡылһа, Шраван ҡояш аҫтында ултырып доға ҡыла. Элек ул бик матур һәм ап-аҡ йөҙлө булһа, алты ай эсендә уны танырлыҡ та булмай. Ябыға, тән тиреһе тупаҫлана. Бер көн кис Будда Шраванға килә һәм: "Шраван, һин монахлыҡҡа киткәнсе музыкант булғанһың, гитарала уйнағанһың икән. Шуға мин һиңә бер һорау бирәм: гитараның ҡылдарын бушатҡанда нимә була?" "Гитараның ҡылдарын бушатһаң, унан бер ниндәй ҙә көй сыҡмай", - тип яуап биргән Шраван. "Ә ҡылдарҙы бик ныҡ тарттырғанда нимә була?" "Ул саҡта ла көй сыҡмай. Көй сыҡһын өсөн ҡылдар бушаҡ та, тарттырылған да түгел, ә уртаса булырға тейеш. Гитарала уйнау ауыр түгел, әммә уның ҡылдарын бары тик оҫталар ғына дөрөҫ көйләй ала. Бында алтын урталыҡ кәрәк", - тип яуаплаған Шраван. Будда аҙаҡ шулай ти: "Мин дә һине алты ай күҙәткәндән һуң шуны уҡ әйтергә теләгәйнем. Үҙеңдән ниндәйҙер көй сығарырға теләһәң, ҡылдарыңды бушатма ла, тарттырма ла, уртасаға көйлә. Артыҡ көс һалып көсәнеү үҙеңде туҙҙырыуға, ә артыҡ бушаныу көсһөҙлөккә килтерә. Үҙеңде уртаса бер кимәлгә көйлә, шул саҡта ғына маҡсатыңа өлгәшерһең..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 6 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 789/05